✓ *Пессимистың оптимистан айырмаһы бар, әлбиттә. Пессимист, ярты юл үткәндән һуң: "Барам, барам, әле тағы әллә күпме бараһы бар", - ти ҙә, хәлдән тайып йығыла. Ә оптимист үҙенә шулай ти: "Әй, шәпмен дә инде, күпме юл үткәнмен, тағы аҙ ғына үтәһе ҡалды!"*

*(В. Леви).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22 - 28 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru  2002 йылдан башлап сыға  Һатыуҙа хаҡы ирекле  №21 (387)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Яраткан Өфөбөҙҙә...**

машина тығындары йәмһеҙләй



4

**Ҡандраҡүл**

Башҡортостандың 777... мөғжизәһе



5

**Башҡорт ер мәсьәләһен күтәрергә хоҡуҡлы**



8-9 сөнки ул был ергә тамырҙары менән бәйле

**Аяҡ аҫтында ғына...**

дарыу үҫә



15

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарафынан 2007 йылда ҡабул ителгән Төп халыҡтарҙың хоҡуҡтары тураһындағы декларацияға ярашлы, башҡорт халҡының аҫабалыҡ хоҡуғын тергеҙеү өсөн көрәш башларға ваҡыт түгелме?

*Вадим САФИН, ғалим-психолог, хеҙмәт һәм йәмәғәт эштәре ветераны:*

Башҡорт халҡының, үҙ ерендә йәшәүсе төп милләт булараҡ, үҙбилдәләнешкә хоҡуғын бер ниндәй ҙә Рәсәй закондары менән генә инҡар итеп булмаясаҡ. Ошо йәһәттән халыҡ-ара кимәлдә ҡабул ителгән документтарҙың булыуы бик һәйбәт, һәм милләт хоҡуҡтарын яҡлап сығыш яһаған алдынғы шәхестәребеҙ өсөн БМО декларацияһы ла бик ныҡлы нигеҙ булып тора. Ә аҫабалыҡ хоҡуғы тураһында һүҙ ҡуҙғатылһа, мин иң әүәл Башҡортостан республикаһына нигеҙ һалыусы арҙаҡлы шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың васыятҡа тиң фекер-тәҡдимдәрен иҫкә төшөрәм. Ул үҙ халҡының киләсәген йәшәйешебеҙҙәге өс иң мөһим нәмәне - ерҙе, телде һәм динде һаҡлап ҡалыуҙа күргән. Башҡортто башҡорт иткән ошо өс нигеҙ ташының береһе генә юҡ ителһә лә, халҡыбыҙ тарҡалыуға һәм юҡҡа сығыуға дусар буласаҡ. Бөгөнгө башҡорт хәлен ошо өс үлсәм күҙлегенән ҡараһаң, һис маҡтанырлыҡ түгел. Ил мөлкәте һәм уның нигеҙе - ер халыҡ ҡулында түгел. Үҙәк власть телебеҙҙе ҡыҫҡартыу, киләсәк быуынды туған телһеҙ ҡалдырыу сәйәсәтенән туҡтағаны юҡ әле. Халҡыбыҙҙың дингә ҡайта башлауы ғына уның төп идеологияһын булдыра алманы, сөнки дин әлегә ойоштороу, берләштереү ҡеүәһенә эйә түгел. Шулай булғас, йә ер, тел һәм дин (идеология) өсөн көрәш юлында ҡалабыҙ, йә халҡыбыҙҙың ирекле һәм үҙаллы милләт булыуынан ваз кисәбеҙ.

*Әмир ҒҮМӘРОВ, журналист:*

-Күптән ваҡыт. Әммә иң юғары кимәлдәге халыҡ-ара судтарҙа беҙҙең хоҡуҡтар тулыһынса яҡлау тапҡан хәлдә лә, Рәсәй властары уны бойомға ашырырға ҡамасаулаясаҡ. Автономия, суверенитет хоҡуҡтары менән ниҙәр булғанын ғына иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Тимәк, беҙҙең хоҡуҡтар тулыһынса яҡлау тапһын өсөн Рәсәй властары үҙгәрергә йә ил тарҡалырға тейеш. Минеңсә, бында төп ҡылда күҙгә күренмәгән өсөнсө көстәр - Рәсәйҙең дәүләт булараҡ тарҡалыуын, юҡҡа сығыуын көҫәгәндәр уйнай һәм улар ике йөҙләгән милләт вәкиле йәшәгән илде тарҡатыуҙың иң дөрөҫ юлы власть вертикалендә, самодержавиела икәнлеген бик яҡшы аңлай. Әлбиттә, донъяла барған үҙгәрештәр йоғонтоһонда Рәсәй ҙә үҙгәрешһеҙ ҡалмаясаҡ. Рәсәй үҙе дәүләт булараҡ тарҡалғас ҡына иҫенә килер килеүен, әммә уға тиклем ерҙәребеҙ донъя капиталистары ҡулына күсеп, республикабыҙҙан атама ғына тороп ҡалмаҫмы?

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

## БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ

*Рәшит ӘХТӘРИ*

# ХОҠУҠ-ХАҠЫМ – БӨЙӨК ХАЛҠЫМ



**Атам-әсәм тапты мине,**
**Халҡым күккә атты мине.**
**Дошмандарым дүрт тиҫтә йыл**
**Ауыҙымды япты минең.**
**Дуҫ-иштәрем тартты мине,**
**Тартмаһалар, ярты инем;**
**Әйҙең һанһыҙ һарты инем,**
**Бөкөрө бил ҡарты инем.**
**Атам-әсәм ит, бит бирҙе,**
**Һөлдә бирҙе, буй тултырҙы**
**Халҡым мейе һандығыма**
**Төйөп-төйөп уй туйырҙы.**
**Ҡаным - халыҡ, һыным - халыҡ,**
**Ул - даным да, ул - шаным да,**
**Таптар тейһә, намыҫымды**
**Йыуып торған иманым да.**
**Хисем, иҫем - халыҡтыҡы,**
**Ҡара түгел, хаҡлыҡтыҡы,**
**Хаҡлыҡ яҡлап ҡылған эшем -**
**Аҡҡоштағы аҡлыҡтыҡы.**
**"Әстүк-әстүк!" атам атты,**
**Ерҙән күккә Ватан атты.**
**Атынһам да, атылһам да,**
**Йәнем-тәнем Ергә ятты,**
**Ер тәңгәле йырға ятты.**
**Ерҙән башҡа алтын да юҡ,**
**Ерһеҙ алтын - һары сир тиң,**
**Халҡым юҡта, хаҡым да юҡ,**
**Ул саҡта мин -**
**Һуҡыр бер тин!**
**Һүнгән ерҙән балҡым-ҡалҡым**
**Урғыла йыр - тиң түҙ алҡым!**
**Бар минең бер йырлар хаҡым:**
**Хоҡуҡ-хаҡым - бөйөк халҡым!**

Стәрлетамаҡ районының Айыусы ауылынан бөйөк Ҡаһым түрәнең бүләләре.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

# ӘБЕЙ БАҪЫП ТОРА, егет ултырып бара...

**Ҡалала бөтә халыҡ та тиерлек, өлкәндәр ҙә, йәштәр ҙә йәмәғәт транспортында йөрөй. Иртән тығылыша-тығылыша автобустарға тейәләбеҙ, кисен дә төртөшә-төртөшә, эрләшә-эрләшә автобустарҙа өйгә ҡайтабыҙ. Былдай хәл көн дә ҡабатлана.**

Бына иртән тукталышта автобус көтөп торабыҙ. Халыҡ бик күп. 257-се маршрут менән Дим бисҭәһенән 21-се дауаханаға тиклем йөрөүсе автобус килеп туктаны. Кем өлгәр, кем көслө, берберенен этә-төртә автобустағы урындарҙы яулап алды. Бөтә ултырғыстарға йәш егеттәр, ирҙәр ултырған, ә баҫып тороусыларҙың бөтәһе лә тиҙемле һәм изге күңелле ҡатын-ҡыҙҙар, араларында ике оло йәштәге инәй ҙә бар. Автобус ҡуҙғалып китте, һәр тукталышта туктап, мөмкин булған тиклем пассажирҙар менән тыңҡысланды, иркен итеп тын алырлыҡ та түгел...

Бара торғас, эргәмдә баҫып барған инәйҙең хәле насарайыуын тойҙом. "Башым әйләнә, ҡан баҫымым күтәрелде, ахыры", - ти инәй. Күпме түҙеп килгән, мескен. Ә ҡолаҡтарына наушник тығып, йыр тыңлаған, телефондары менән уйнаған, йоҡлаған булып ҡыланып, ултырғыстарҙа кинәнеп ултырып килгән ир-егеттең, исмаһам, береһе лә ошо инәйгә урын бирергә уйламаны. Ахыр сиктә, бер ҡатын түҙмәне, бер егеттән инәйгә урын биреүен һораны. Ә ул егеттең йөҙөн, ҡәнәғәтһеҙлеген күрһәгеҙ! Саҡ-саҡ, иренеп кенә тороп баҫты ул, бахыр. Бына ошондай тормош ысынбарлығын, тәрбиәһеҙлек һөҙөмтәһен, заман йәштәренең "алға китеүен" һелкенәһелкенә ҡарап килдем Дим бисҭәһенән Өфөгә еткәнсе.

Ниңә был хәлде тәфсирләп яҙа икән, тиһегеҙме? Эйе, был ғәҙәти күренеш, әммә шул тиклем дә туң күңеллелекте, мәғәнәһеҙлекте күреп, мәҙәнилек, тәрбиә кимәле көндән-көн түбән тәгәрәүенә шаһит булып, әрнетә бит. Ә күпме ауырлы, бәләкәй балалы ҡатын-ҡыҙҙар аяғөҫтә баҫып килә автобустарҙа. Әлбиттә, көн дә енел машинала эшкә елдергән етәкселәр быңдай хәлдәргә ышанмаҫ та, күрмәҫ тә, улар өсөн был хәбәрем дә ваҡ мәсьәлә булып тойолор. Әммә...

"Киске Өфө" гәзите ҡала округы хакимиәтенә ҡарай бит, бәлки, "Башавтотранс" предприятияһына ла мөрәжәғәт итә алырһығыҙ, тип, шуны тәҡдим итәм: бөгөн кешеләргә, бигерәк тә йәштәргә аҡыл, мораль өйрәтеүҙең һөҙөмтәһе юҡ тиерлек. Шуның өсөн, бәлки, Өфө урамдарын өлкәндәргә, әсәгә, ҡатын-ҡыҙға хөрмәт тураһында мәғәнәле итеп яҙылған социаль рекламалар менән биҙәргә кәрәктер? Һәр көн күргән нәмә иҫтә ҡала бит, тыңлағанға, өйрәткәнгә ҡарағанда, бәлки, кешеләргә (ир-егеттәргә) тәьҫире көслө булыр ине ул яҙыуҙарҙың? Шулай уҡ пассажирҙар ташыу менән шөғөлләнгән транспорт салонына ла башҡорт һәм урыҫ телдәрендә өлкәндәргә, ҡатын-ҡыҙҙарға ихтирам күрһәтергә саҡырған яҙыуҙар яҙып элергә булыр ине. Автобуста тукталыштарҙы иғлан иткәндә лә: "Ололарҙы, ҡатын-ҡыҙҙарҙы хөрмәт итегеҙ!" - тип әйтә алыр ине водитель. Минеңсә, уның һөҙөмтәһе булыр кеүек...

Зөлфиә БАТЫРОВА.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Йәйҙең йәмле көндәрендә йәмһеҙ күренештәр ҙә осрап ҡына тора, үкенескә ҡаршы. Шуларҙың иң аяныслыһы, әлбиттә, кешеләрҙең һыуға батып үлеүе.**

# ЭСКӘН КИЛЕШ... "теге ярға" ынтылыусыларға

Һыу инеү сезоны башланыуға бик иртә булыуға ҡарамаҫтан, әле үк матбуғат биттәрендә батып үлеүселәр хаҡында хәбәрҙәр күренә лә башланы. Быңдай күңелһеҙ күренештәргә нисек сик ҡуйырға һуң? Әлбиттә, ҡотҡарыусылар пляж сиктәрен айҡап, байҡап тора, ләкин улар ҙа ҡыҙмаса йә иҫерек һыу инеүселәрҙең бөтәһен дә ҡарап өлгәрә алмай. Шуға күрә хәҙер пляжда спиртлы эсемлектәр эсеп, һыу инергә яратыусыларҙың тәртибе депутаттар күҙ уңына эләкте.

Ошо көндәрҙә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырыштарының береһендә административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында закондың ял итеүселәр тәртибенә ҡағылышлы өлөшөнә төүге уҡыуҙа ҡайһы бер төҙәтеүҙәр индерелде. Хәҙер һыу буйҙарында ял итеү зонаһында спиртлы эсемлектәр (шул иҫәптән, һыра ла!) эскән өсөн һәм иҫерек килеш һыу ингән өсөн 1 меңдән 5 меңгә тиклем (ошоға тиклем 300 һум ине) штраф түләтеү ҡарала. Был сара, исмаһам, ҡыҙған баш менән "теге ярға йөҙөп сығырға" ғәйрәтләнеүсе ҡупырыҡтарҙың бер нисәүһенең булһа ла ғүмерен һаҡлап алып ҡалһа, бик һәйбәт булыр ине лә бит...

Депутаттар бер ыңғайҙан төнгө сәғәттәрҙә алкоголь һатҡан өсөн штраф күләмен дә арттырҙы. Бынан һуң "йомшаҡ күңелле" һатыусы 23 сәғәттән алып иртәнге 8-гә тиклем араҡы менән һатыу итһә, уларға 10 мең күләмендә ( биш мең ине), ә фирмаға 300 мең (100 мең ине) һум штраф янай.

Самогон "оҫталарына" яза сараһы арттырылды - өй шаттарында үҙҙәре етештергән спиртлы эсемлектәр һатҡан өсөн улар ошоға тиклем 2-2,3 мең штраф түләй ине, хәҙер - 3-5 мең һум.

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Ҡыйғы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**Яҙғы, йәйге мәшәҡәттәр башланмаҫ борон, бөгөнИртәгә 2010 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. Яңы хаҡтарҙы иғлан итәбеҙ: 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 354 һум 24 тин тора.**

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы дауам итә.**

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

**Тағы бер тәҡдим бар...**

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

● Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфө-матбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, ярты йылға 240 һум.

● Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа унайлы һәм арзанраҡ: ярты йылға - 225 һум.

**Өфөләләргә әйтер тағы бер һүҙ...**

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъезыбыҙҙа почта йәшниге юҡ", - тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡалала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыкты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" - тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, гәзиз милләттәштәр!**

МӨХӘРРИРИӘТ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев етәкселегендәге республика делегацияһы Төркиәнең баш ҡалаһы Истанбулда 20-23 майҙа үтәсәк Башҡортостан Республикаһының фән һәм мәҙәниәт көндәрендә һәм һабантуйҙа ҡатнаша. Байрам сиктәрендә Башҡорт дәүләт университеты менән Истанбул университеты араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыу, Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған фәнни-ғәмәли конференцияла ҡатнашыу күҙаллана. Төркиә тамашасыһы шулай уҡ М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Әхмәтзәки Вәлиди" спектаклен ҡараясаҡ.

✓Литваның Шауляй ҡалаһында үҫмерҙәр һәм өлкәндәр араһында үткән гер спорты буйынса Европа чемпионатында Рәсәй командаһы составында беҙҙең спортсылар ҙа ҡатнашты. 63 кг ауырлыҡтағы үҫмерҙәр араһында - Рәсим Исламғолиев, 68 кг ауырлыҡ категорияһында Илшат Әхмәтханов алтын миҙал яуланылар.

✓Республиканың педагогия вуздары араһында үткән чемпионатҡа йомғаҡ яһалды. Уҡыу йорттары командаларына спорт йүнәлеше, еңел атлетика, атыш, гер спорты буйынса урындар билдәләнде. Дөйөм команда иҫәбе буйынса 1-се урынды Башҡорт дәүләт педагогия университеты, 2-се урынды Стәрлетамаҡ педагогия академияһы, 3-сө урынды Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһы яуланы.

✓Йәйге осорҙа алыҫ араға йөрөүсе поездарға билет хаҡы төшә. Мәҫәлән, 1 июндән 20 июнгә тиклем Адлерҙан, Сочиҙан, Анапа, Новороссийск, Кисловодск, Минеральные воды, Ейскийҙан китеүсе поездарҙың купе һәм плацкарт вагондарына 20 процент ташлама ҡаралаған. Был исемлеккә 400, 500, 600-сө поездар инмәй.

✓1 июндән "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы муниципаль берәмеге" конкурсы старт ала. Унда 2009 йылдың 1 сентябренән алып 2010 йылдың 1 сентябренә тиклем иң һәйбәт эшләгән муниципалитеттар билдәләнәсәк. 23 номинация буйынса үҙғарылған конкурста еңеүселәрҙе ағымдағы йылдың сентябрендә үтәсәк Башҡортостан Республикаһы муниципаль берәмектәренең III съезында тәбрикләйәсәктәр.

АҘНА ШАҘДАУЫ

# МӘҢГЕЛЕК ҺОРАУ БЫЛ: "КЕМ ҒӘЙЕПЛЕ?"

## Ә шахтерҙарға ер аҫтында ла көн юҡ, ер өҫтөндә лә...

**Беҙҙә һәр ваҡыт шулай: берәй ҡурҡыныс ваҡиға була ҡалһа, ғәйеплеләрҙе эҙләү башлана. "Кем ғәйепле?" тип аталған һәм борон-борондан килгән урыҫ халыҡ "уйыны" ул. Бына 9 майға ҡараған төндә Кузбаста тағы ҡурҡыныс хәл булды - шахта шартланы. Бер-бер артлы ике шартлау яңғыраны. Шахтерҙар һәм ҡотҡарыусылар һәләк булды. Йәмғеһе 66 кеше. Тағы ла утыҙлабының яҙмышы билдәһеҙ. "Билдәһеҙ" тип әйтеп булмай инде. Был - рәсми формулировка. Кәүҙәләре табылмаған, шулай тигән булалар. Асылда, улар ҙа күптән мәйет. Ер аҫтында саф һауа урынына ағыулы газ - метан шартлауҙан түшәм дә, стеналар ҙа ишелеп төшкән, аяуһыҙ ут ҡоторона - тереләр ҡала буламы? Шунан, кем ғәйепле икән?**



Был һорауҙы бер мин генә бирмәйем. Дөрөҫөрәге, минән бигерәк башҡаларҙы был һорау айырыуса ныҡ борсой. Әлбиттә, тере ҡалған шахтерҙарҙы һәм һәләк булғандарҙың ғаиләләрен. Һис шикһеҙ, шахтаның етәкселеген һәм хужаларын. Аңлашылып тора, РФ Президентын һәм Премьер-министрын борсой был һорау.

Шахтерҙарҙан башлайыҡ. Улар өсөн шахтаның шартлауы йәки ишелеүе һәм, һөҙөмтәлә, кешеләрҙең һәләк булыуы - ғәҙәти күренеш. Улар быға әҙер. Һәр хәлдә, әҙер булырға тейеш. Ер аҫтына төшөү - ул офиста компьютер "сыҫҡан"-ын һәрмәп, мониторға текәлеп ултырыу түгел. Шахтер профессияһы айырыуса хәүефле һәм ғүмер өсөн ҡурҡыныс һөнәрҙәр исемлегенең иң башында. Шул уҡ ваҡытта шахтер ер аҫтына үҙ белдеге менән һәм, хатта, үҙе теләп төшә. Уны бит берәү ҙә мәжбүр итмәй. Был хәлдең сәбәбен эҙләп, ер аҫтына төшөргә лә кәрәкмәйҙер. Шахтер ҡаласыҡтарында һәм ҡасабаларында ир-аттарға башҡа эш юҡ. Йә ер аҫтына төшәһең, йә бисәң, балаларың ас ултыра. Кузбастағы шахтер ҡалаларының күбеһендә шул уҡ хәл. Йәғни, шахтер хеҙмәте, бер яҡтан, урындағы халыҡтың ирекле рәүештә һайлаған һөнәре булһа, икенсе яҡтан, уларға ер аҫтына төшөүҙән башҡа сара ла ҡалмай. Аңлашылалыр, был шарттарҙа эш биреүселәр (йәғни, шахта хужалары) сығымдарҙы (шахтерҙарға түләнәсәк эш хаҡын, шул иҫәптән) мөмкин тиклем кәметергә, ә табышты мөмкин тиклем арттырырға тырыша. Бының өсөн хужалар эш хаҡын шахтерҙар тарафынан тауға сығарылған таш күмерҙең күләме менән тура-нан-тура бәйләй. Күпме эшләйһең, шулай ашайһың, тимәк. Ошондай шарттарға ҡуйылған шахтерҙар, әлбиттә, хәүефһеҙлек техникаһына тәкәрәп ҡарай. Хатта уларҙың ҡайһы берҙәре шахтала тәмәке тартып маташа, имеш. Улар ғәйеплеме? Һис шикһеҙ. Шахтерҙар ер аҫтында метандың күпләп сығыуын иҫкәртеүсе датчиктарҙың эшлектән сығыуын йәшермәй, был турала туранан-тура белдерә. Уларҙы ғәйепләп буламы? Метан күбәйһә, эшләргә ярамай. Эшләмәһәң, күмер булмай. Күмер булмаһа, шахтерҙарҙың эш хаҡы ла юҡ. Аҡса булмаһа, шахтанан ер өҫтөнә күтәрелеүҙең мәғәнәһе ҡалмай. Шулай ҙа ғәйеплеме шахтерҙар? Әлбиттә! Яуапҡа тарттырылырға тейешме? Һис шикһеҙ!

Шахта етәкселеге һәм хужалары өсөн иһә, иң мөһиме - табыш. Ул ни тиклем күберәк булһа, шул тиклем яҡшыраҡ. Табышты күбәйтеүҙең юлы бер генә - шахтерҙарға әҙерәк түләү, күмерҙе күберәк сығартыу һәм ҡыйбатыраҡ һатыу. Эшкә профсоюздар һәм хеҙмәт хәүефһеҙлеге буйынса яуаплылар ҡамасауламаһа, бигерәк тә яҡшы. Метан йыйылғанмы? Шартлау ҡурҡынысы янаймы? Түшәм ишелеп төшөргә торамы? Хужаларҙың бында эше юҡ. Улар өсөн күмер сығарылһын ғына. Артабанғы хәлде үҙегеҙ ҙә аңлап тораһығыҙҙыр. Ғәйеплеме улар? Әлбиттә! Яуапҡа тарттырылырға тейешме? Һис шикһеҙ!

РФ Президенты һәм Премьер-министры тәү ҡарашҡа туранан-тура шахталар һәм шахтерҙар өсөн яуап бирмәй кеүек. Әммә улар, ғөмүмән, халыҡ өсөн яуаплы ла баһа. Президентты, мәҫәлән, халыҡ (электорат, йәғни) һайлап ҡуйған. Ышаныс белдергән. Тауышын биргән. Уға илдең (тимәк, үҙенең, балаларының, яҡындарының) яҙмышын, бөгөнгөһөн, киләсәген ышанып тапшырған. Президент (һәм, әлбиттә, Премьер) илдең (был юлы "халыҡ" мәғәнәһендә ҡулланыла) именлеге хаҡында төрлө яҡлап хәстәрләргә бурыслымы? Һис шикһеҙ! Әйтәйек, хеҙмәт хәүефһеҙлеге. Йәғни, шахталарҙағы әлеге лә баяғы метан датчиктары. Уларҙы һәм, ғөмүмән, шахталарҙа хәүефһеҙлекте күҙәтеп, ваҡытында саралар күреп тороу туранан-тура дәүләт органдарының эше түгелме ни? Гостехнадзор тип атала ул. Эшҡыуарҙарға бының кәрәк булмағаны көн кеүек асыҡ та баһа. Тимәк, дәүләт эшләп еткермәгән булып сыға. Тимәк, дәүләт ғәйепле. Эш олонан ҡуһпа, Президент һәм Премьер-министр ҙа был хәл өсөн яуаплылыҡҡа тарттырылырға тейеш.

Туҡта әле, һин кем, тиерһегеҙ. Чапай кеүек, ҡылысың менән унлы-һуллы һелтәп, бар донъяны ғәйепле иттең, тиерһегеҙ. Әйе, төптәнерәк уйлаһаң, ғәйеплеләр бөтөнләй юҡ һымаҡ. Шахтерҙарҙы нисек итеп ғәйепләргә була инде? Улар бит оҙаҡ йылдар буйына алып барылған иҡтисади сәйәсәт арҡаһында шундай шарттарға ҡуйылған. Горбачев һәм Ельцин ваҡытында шахтерҙар Мәскәүгә килеп, каскалары менән асфальт төйөп ҡараналар. Берәй нәмә үҙгәрҙеме? Ай-һай!

Ә эшҡыуарҙар һуң? Улар аҡса эшләмәһә, дәүләткә ваҡытында һалым түләмәһә, ҡаҙнаны тулыландырып тормаһа, бөгөн пенсионерҙарыбыҙ, бюджет хеҙмәткәрҙәребеҙ ас ултырыр, мәктәптәребеҙ, дауаханаларыбыҙ ябылыр ине. Шулай түгелме ни? Эйе, әлбиттә, эшҡыуарҙарҙың да төрлөһө була. Ҡайһы берәүҙәр тапҡан аҡсаларын унлы-һуллы туҙҙыра. Яхталар һатып ала, самолеттар, футбол һәм баскетбол клубтарын үҙләштерә. Уларһыҙ ҙа булмайҙыр инде.

Дәүләтте лә бер нисек тә ғәйепләп булмай, шикелле. Президент менән Премьер-министрҙың башҡа эштәре лә күп. Ә технадзор һәр бер шахтаға өлгөрә алмай ҙа баһа. Шахтерҙар датчиктарҙы ҡапламаһа, боҙмаһа, бәлки, бер нәмә лә булмаҫ ине... Тимәк, бар ғәйеп шахтерҙарҙа ғына?

Уның ҡарауы, фажиғә булғас, бөтәһе лә берҙәй булып шахтерҙарға ярҙамға ташланды. Дәүләт беренселәрҙән булып шахтала һәләк булғандарҙың, зарар күргәндәрҙең ғаиләләренә аҡсалата ярҙам итергә вәғәҙә бирҙе. Хужалар ҙа ышандырҙы. Урындағы власть та. Миллион һумдан кәмерәк сумма яңғыраманы ла шикелле. Һанап ҡарайыҡ әле. Рәсәй хөкүмәте шахтала һәләк булғандарҙың ғаиләләренә 1-әр миллион һум бирәсәк. Шахта хужалары - тағы ла 1 миллион. Бынан тыш, улар һәләк булған шахтер ғаиләләренең һәр бер ағзаһына бер йыллыҡ уртаса эш хаҡы түләргә (яҡынса 900 мең һум), ерләүгә киткән сығымдарҙы ҡапларға (140 мең һум) вәғәҙә итә. Күпме килеп сыға инде? Һәләк булған бер шахтерҙың "хаҡы" өс миллиондан саҡ ҡына артығыраҡмы? Был бит Өфө кеүек ҡалалағы ике-өс бүлмәле фатир... Бына шулай баһалана шахтер ғүмере.

Һүҙ ыңғайында әйтеп үтәйем. 2010 йылдың тәүге өс айында ғына "Распадская" шахтаһының табышы 2,5 миллиард һум тәшкил иткән. Ә 2009 йыл һөҙөмтәләре буйынса "Распадская" шахтаһынан уның хужалары 4 миллиард һум дивиденд алған. Был сығымдарҙан ҡалған саф табыш.

Шахтерҙар баш күтәреп ҡараны. Митингыға сыҡты, тимер юлын баҫып алды. Был осраҡта инде дәүләт перәник түгел, ә сыбыртҡы ҡулланды. Шахтерҙарға ҡаршы ОМОН сығарылды. Ә Кемерово өлкәһе губернаторы "баш күтәреүселәр араһында шахтерҙар юҡ, улар барыһы ла енәйәтселәр һәм экстремистар" тип белдерҙе. Ҡайһы бер күҙәтеүселәр шахтерҙарҙың сығышында "ҡыҙыл-һары" революция саҡҡыларын "күреп" ҡалды.

Бына шулай, йәмәғәт. Бер ҡараһаң, бөтәһе лә ғәйепле, асылда иһә - ғәйеплеләр юҡ. Шундай ҡыҙыҡ "уйын". Ғөмүмән, беҙҙә һәр ваҡыт шулай. Илебеҙҙең тарихын ғына байҡағыҙ. Төпкә төшмәгеҙ, йәмәғәт. Яҡын тирәләге йылдарҙы ҡарап сығыу ҙа етә. "Курск" һыу аҫты кәмәһен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, Саян-Шуша гидроэлектростанцияһын... Ғәйеплеләр юҡ. Фажиғәләр дауам итә.

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ауыл футбол командалары араһындағы "Алтын башаҡ-2010" республика бәйгеһендә ҡатнашырға теләүселәр БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығына мөрәжәғәт итһен. Был бәйгелә еңгән командалар Бөтә Рәсәй кимәлендә үткәрелгән "Алтын башаҡ" бәйгеһендә ҡатнашыу хоҡуғына эйә буласаҡ.

✓12 июндә Ишембай районы Торатау буйында "Салауат йыйыны" үтәсәк. Унда республика райондарынан башҡа, III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ҡатнашыусы ҡунаҡтар ҙа була. Программаға традицион "Сая ҡыҙҙар" "Салауат йыйыны батыры", "Иң матур башҡорт тирмәһе" конкурстарынан тыш, Торатауҙа "Ырыуҙар ташы" тип исемләнгән мемориаль комплексҡа нигеҙ ташы һалыу тантанаһы ла индерелгән.

✓"Башҡортостан Республикаһының муниципаль берләшмәләре советы" Ассоциацияһы сиктәрендә ауыл биләмәләре палатаһы булдырыла. Унда республиканың барлыҡ 54 муниципаль районындағы ауыл муниципалитеттары етәкселәре инәсәк. Башҡортостанда бөгөн барлығы 895 муниципаль берләшмә иҫәпләнә, шуларҙың 817-һе - ауыл биләмәләре һәм уларҙа республика халҡының 40 проценты йәшәй. Палата ойоштороуҙың маҡсаты - ауыл муниципалитеттарының дөйөм проблемаларын хәл итеү, алдынғы тәжрибә менән уртаҡлашыу, урындағы үҙидара мәсьәләләрен хәл итеүҙең берҙәм механизмын булдырыу.

✓"Башҡортостан Республикаһының муниципаль берләшмәләре советы" Ассоциацияһы идараһы муниципаль хеҙмәткәрҙәренең форма кейеме тураһында положениены һәм уны кейеү ҡағиҙәләрен раҫланы. Был яңылыҡтың инициаторы - Иглин районы хакимиәте һәм улар күптән түгел муниципаль хеҙмәткәр кейеменең презентацияһын үткәрҙе.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов "Һабантуй" байрамдары үткәреү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Указда райондарҙа яҙғы баҫыу эштәре тамамланыу айҡанлы үткәрелгән байрамдың графигы раҫланған.

✓Республикала һыу инеү миҙгеле асылмаған да әле, шулай булыуға ҡарамаҫтан, йылғаларҙа 17 кеше, берәүһе бала, батып үлергә лә өлгөрҙө, 15 кеше батҡан ерҙән ҡотҡарылды.

✓ *Машинаның хужаһы "крутой" булһа, уның машинаһы ишеккә төкөлә яҙып терәлеп ултыра. Һеҙ йәш балағыҙ менән коляска этеп, өй алдына сығып ҡарағыҙ. Хәүефһеҙ йөрөй алырһығыҙмы?*



*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ЮЛ ХӘҮЕФҺЕҘЛЕГЕН ХӘСТӘРЛӘП

**Баш ҡаланың Октябрь проспектындағы бөтә "зебра"лар алынды. ЮХХДИ үткәргән даими сараларға ҡарамаҫтан, былдай урындарҙа машина йөрөтөүселәр йәйәүлеләргә юл бирмәй, етмәһә, Октябрь проспекты киҫеүек автомагистралдәрҙә ГОСТ буйынса былдай юл аша сығыу юлдары ҡаралмаған.**

- 2008-2009 йылдарҙа уҡ был урындарҙа ер аҫты һәм ер өҫтө үткәүелдәре барлыҡҡа килергә тейеш ине, әммә иҡтисади көрсөк арҡаһында уларҙы төҙөүҙе туҡтатырға тура килде, - тип белдерҙе ЮХХДИ Идаралығы етәксеһе Динар Ғилметдинов. - Әлегә йәйәүлеләргә юлды аша сығыуы ауырға тура килһә лә, киләсәктә ҡала округы хакимиәте был проблеманы хәл итер, тип ышанам.

"Зебра"лар алып ташланды, әммә был юлда әҙәпле булыу һәм юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәргә кәрәкмәй тигәндә аңлатмай. ЮХХДИ инспекторҙарына водителдәр һәм йәйәүлеләрҙе бер-береһен ихтирам итергә өйрәтергә балалар ҙа ярҙам итә. Өфө мәктәптәрендә уҡыусы башланғыс синыф уҡыусылары "Ихтирамлы хәрәкәт" акцияһы сиктәрендә иншалар яҙып, хәрәкәт иң көслө булған урындарҙа машина йөрөтөүселәргә һәм йәйәүлеләргә тапшырҙы.

Статистика буйынса, бөтә юл-транспорт фажиғәләренең яртыһын йәйәүлеләр менән бәйле осраҡтар алып тора. Йышыраҡ бында йәйәүле үҙе юл ҡағиҙәһен боҙған булып сыға. РФ Кодексының 12.29 статьяһына ярашлы, былдай йәйәүлеләргә 200 һум күләмендә административ штраф та ҡаралған. Йыл башынан 13 мең тәртип боҙоусыға штраф һалыу тураһында ҡарар сығарылған да инде. 2010 йылда Башҡортостанда 440 юл фажиғәһендә 45 кеше үлгән, 443-ө йәрәхәт алған. Былдай аварияларҙың күп өлөшө Өфө ҡалаһына тура килә, уларҙа 11 кеше үлгән, 237-һе йәрәхәтләнгән.

Алда - йәйге каникулдар. Был осорҙа балалар ҡатнашлығында юл фажиғәләре бермә-бер арта. Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге инспекторҙары иғтибарлыраҡ булырға һәм юл ҡағиҙәләрен үтәргә кәңәш итә.

## БЫНЫ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

**18 йәше тулған һәр рәсәйле йома һайын халыҡ иҫбен алыу тураһындағы белемдәрен күрһәтеп, аҡсалата бүләк ота ала. "Рәсәй радиоһы" һәм "Халыҡ иҫәбен алыу - 2010" сайты был темаға арналған викторина ойоштора.**

Викторинала халыҡ иҫәбен алыуҙың тарихы һәм үткәрелеү урындары, иҫәп алыу ҡағыҙҙарының йөкмәткеһе, хатта статистика буйынса һорауҙар бар. Росстат үткәргән был сарала мең ярым кеше ҡатнашып өлгөргән дә инде. Ойоштороусылар викторина һорауҙарына яуап ебәреүселәрҙең тағы артыуына ышана. Әгәр ҙә 7 мең һум күләмендәге бүләкте оторға теләһәгеҙ, һәр йома "Рәсәй радиоһы" эфирын тыңларға онотмағыҙ. www.perepis-2010.ru сайтында һорауҙарҙы телөгән ваҡытта алырға була. Сара 27 октябргә тиклем дауам итә.

*ЙӨҘӨН КҮРЕП ЙӨҘ ОЯЛМАҺЫН...*

**"Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар" тиҙәр. Миңә Өфөгә йыш йөрөргә тура килә. Баш ҡала булараҡ, Өфөнө матур, йыйнаҡ тоторға тырышалар, сөнки егәрле кешеләр йәшәй бында. Әммә Өфөнөң күҙгә ташланып торған етешһеҙлектәре, хаталары ла күп кенә икән.**

# ЯРАТҠАН ӨФӨБӨҘҘӨ...



## машина тығындары йәмһеҙләй

Шулай бер көндө кис урамда танышымды көтөп торам. Эргәмә генә "Тиҙ ярҙам" машинаһы килеп туҡтаны ла, унан табиптар, водитель сығып, ураткып йөрөп өй номерын эҙләй башланы. Килеп, минән дә һоранылар, мин: "Белмәйем", - тинем. Яҡын-тирәлә башҡа кешеһе лә юҡ исмаһам. Былар икенсе йортҡа китте. Сәғәткә ҡарап алдым, 6-7 минут юғалтты былар. Кеше ҡотҡарыуҙың ун минуты ла алтын икәнен иҫәпкә алһаҡ, ярҙам өмөт итеп ятҡан ауырыуҙың үлеп китеүе лә ихтимал ине бит. "Тиҙ ярҙам" килмәй, тип бәлә һалырға хаҡыбыҙ бармы ошонан һуң?

Бәхтиһәң, такси хеҙмәте лә адрестар эҙләп яфалана икән Өфөлә. Ҡалаға килеп йөрөгән ҡунаҡтар ҙа ошондай фекерҙә. Ошонан сығып, өфөлөләргә минең бер кәңәшем бар: бүяуығыҙ булмаһа, аҡбур йә күмер менән булһа ла йорт мөйөшөнә уның номерын яҙып ҡуйығыҙ әле, зинһар. Йорттар алдында подъезд, фатир номерҙары, лифттарҙа фатир күрһәткестәре юҡ. Күп сығым талап итмәй был эш, әммә баш ҡаланы йәмһеҙләй һәм ҡәҙерһеҙләй.

Өфөнөң тағы бер күҙгә ташланып торған етешһеҙлеге бар: шәхси автобустар туҡталыштарға барып етмәй, урамдар киҫешкән йә урам аша сыға торған урындарҙа тейәй улар пассажирҙарҙы. Һөҙөмтәлә, ике яҡлап та хәрәкәт тотҡарлана, ағыулы газ бөркөп ултырған машиналар тығыны барлыҡҡа килә. Яҡында ғына ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре лә баҫып торорға мөмкин, әммә уларҙың үҙ эше - ошондай тығында берәйһе юл йөрөү ҡағиҙәһен боҙмаҫмы икәнен шым ғына күҙәтәләр. Парадоксмы? Урамдар киҫешкән урында юл хәүефһеҙлеген иҫкәртеү, тәьмин итеү уларҙың эше түгелме ни? Ышанмаһағыҙ, Галле округы, Һупайлы, Черниковка биҫтәләрендәге урам киҫелештәрендә кешеләрҙе ашыҡ-бошоҡ тейәгән шәхси автобустарға күҙ һалығыҙ әле.

Тағы бер хата. Ҡалала өй алды тулы машина. Машинаның хужаһы "крутой" булһа, уның машинаһы ишеккә төкөлә яҙып терәлеп ултыра. Подъездан сыҡҡан һайын машинаға тейеп, кешеләрҙең кейеме бысрана. Һеҙ йәш балағыҙ менән коляска этеп, өй алдына сығып ҡарағыҙ. Хәүефһеҙ йөрөй алырһығыҙмы? Йорт алдында ултырған машиналарға яңылыш тейһәң дә, улары "ошаҡлашып" ҡысҡыра башлай. Ә бит яҡындағы өйҙәрҙә ауырыуҙар, балалар бар, кемдәрҙер төнгө сменанан һуң ял итә.

Ҡалала тауыш кимәлен, газ кимәлен үлсәйҙәрмелер, юҡмылыр, ә мин бер көн шундай тәжрибә эшләп ҡараным: Һупайлы биҫтәһенең Жуков урамы яңындағы фатирҙың форточкаһын асып ҡуйып, тәҙрә тупһаһына аҡ ҡағыҙҙар теҙеп һалдым да теүәл бер тәүлеккә шулай ҡалдырып торҙом. Бер көндән аҡ ҡағыҙ өҫтөндә тип-тигеҙ ҡором йәйелеп ята ине. Унан ҡағыҙҙы буяп ҡараным, ысынлап та, был машиналар ҡоромо булып сыҡты. Өфөлөләрҙең үпкәһенә Хоҙайым түҙемлек бирһен.

Шундай етешһеҙлек тә бар Өфөлә: маршрут автобустарының тәҙрәләре мәңге бысраҡ. Руль артында ултырған машина хужаһы көслө юл хәрәкәте шарттарында ла тиҙ генә аҡса йыйыу һәләтен үҙләштергән, әммә ул туҡталыштарҙы иғлан итеүҙе, үҙен аҫыраған автобусын таҙа тотоуҙы үҙ бурысы тип һанамай. Ултырып барған әҙәмдәр, бахырҙар, йә үҙҙәре тоҫмаллап, йә һорай-һорай барып, кәрәкле туҡталышта төшөп ҡалырға тейеш икән.

Һәм тағы. Бер танышым менән Өфө урамы буйлап машинала китеп барабыҙ. Уңға боролоуыбыҙ булды, беҙҙе ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре туҡтатты. Аңдып торғандар икән - язаһын ҡылып та ҡуйҙы былар. Беҙ икәүләп, килгән боролошобоҙға сығып, иҫкәртеүсе юл билдәһен эҙләп ҡараһаҡ та таба алманыҡ. Етмәһә, кире боролоп сығыуы аңһаттан булманы. Парадокс: ҡала урамы тулы машина, ә өҫәр-дүртәр һыҙатлы киң урамдары ҡырында юл тамғалары ара-тирә генә. Ул тамғаларға кәм тигәндә хәҙер 60-70 йыл барҙыр. Бәй, баш ҡала һынлы баш ҡалала юл тамғаларын яңыртып торорға тейештәр бит! Мәғлүмәти тамғалар заман талаптарына яуап бирерлек, водителдәр хаталанмаҫлыҡ итеп ҡуйылһа, юл-хәрәкәт фажиғәләре булмаҫ ине. Ҡаланы биҙәүсе һәр төрлө уттар артында иҫкәртеүсе юл тамғаларын, билдәле, ситтән килгән водителдәр күрә алмай һәм был бахыр ҡунаҡтар ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренә ем булып тора.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ,**
**Бөрйән районынан килеп, Өфөгә хайран булып йөрөүсе.**

*ИҒТИБАР!*



## УҠЫРҒА САҠЫРАБЫҘ

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты 2010-2011 уҡыу йылына 8-9-сы синыфтарға уҡыусылар ҡабул итә. Уҡыусыларҙың математика, рус теле, башҡорт теле буйынса белем кимәле тикшерелә.**

**Ҡабул итеү көндәре: 16 июнь, сәғәт 10.00 - Өфө ҡалаһы, Рәсәй урамы, 88, БРГИ (белешмә өсөн телефон: 284-66-09); 22 июнь, сәғәт 10.00 - Йылайыр районы Юлдыбай урта мәктәбе; Мәләүеҙ районы Юлдаш урта мәктәбе.**

**Үҙегеҙ менән тыуыу тураһында таныҡлыҡ (төп нөсхә һәм күсермәһе), уҡыусының шәхси кенәгәһе күсермәһе, шаҡмаҡлы дәфтәр һәм ручка алып килеү мотлаҡ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓30 майҙа Якутов исемендәге паркта Балаларҙы яҡлау көнөнә арналған саралар сиктәрендә "Балалар коляскалары парады" байрамы үткәрелә. Был байрам быйыл икенсе тапҡыр уҙа һәм ул өфөлөләр күңеленә бик хуш килде. Балалары булған ата-әсәләр ҡатнашыу өсөн ойоштороу комитетына ғариза бирергә тейеш. Телефон: +7 (347) 292 32 69.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә йәйге осорҙа йәштәрҙең һәм үҫмерҙәрҙең ваҡытлыса мәшғүллеген ойоштороу һәм һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереү мәсьәләләренә арналған күсмә ултырышҡа әҙерләнеү тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, йәй көнө 2500-ләп үҫмер йәштәрҙе эшкә урынлаштырыу үҙәктәре аша, шулай уҡ вакансиялар йәрминкәләре ярҙамында ваҡытлыса эшкә урынлаштырыла. Әле үҙәктәр базаһында улар өсөн 447 буш вакансия булыуы асыҡланған.

✓Билдәле булыуынса, быйыл сентябрҙә һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереү мәсьәләләренә арналған күсмә ултырыш беренсе тапҡыр баш ҡалала үтәсәк. Хакимиәттең һаулыҡ һаҡлау идаралығы начальниғы әйтеүенсә, сарağа әҙерләнеү сиктәрендә 1-се, 5-се һәм 21-се, шулай уҡ 4-се инфекцион, 17-се балалар дауаханаларына капиталь ремонт үткәрелә, 13-сө, 8-се дауаханаларҙа, 3-сө дауаханаың бала табыу бүлексәһенә лә реконструкция үткәреү ҡаралған. Ҡайһы бер дауалау учреждениелары яңы ҡорамалдар менән йыһазландырылаcаҡ, тип тә көтөлә.

✓Иран менән "Өфөмебель" предприятиеһы араһында килешеү төҙөлгән. Хәҙер беҙҙең мебель эшләүселәр Иранға үҙ тауарҙарын һата аласаҡ. Килешеүгә Мәскәүҙә ойошторолған күргәҙмә-йәрминкәлә барышында ҡул ҡуйылған.

✓Баш ҡалала "Берҙәм регистратура" хеҙмәтенән көн дә 10 мең өфөлө файҙалана, мөрәжәғәт итеүселәр һаны арта бара. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфиә Баҡыева әйтеүенсә, әле "Берҙәм регистратура" программаһы буйынса баш ҡаланың 46 муниципаль поликлиникаһы һәм филиалдары эшләй. Белеүегеҙсә, был хеҙмәтте ойоштороуҙың маҡсаты - медицина ярҙамы сифатын яҡшыртыу, камиллаштырыу, сираттарҙы кәметеү. "Берҙәм регистратура"ға 1303 һәм 246-46-46 һандары, йә интернет аша яҙылып була.

*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ 777... МӨҒЖИЗӘҺЕ*

**Тыуған еребеҙҙең һоҡланғыс бер тәбиғәт ҡомартҡыһы булған Ҡандракүл Туймазы районында урынлашҡан. Ҙурлығы буйынса, Асылыкүлдән бер аҙ ҡалышып, икенсе урында тора, 1250 гектар ерҙе биләй, оҙонлоғо - 4,8, киңлеге - 3,5 км. Күлдең уртаса тәрәнлеге 5 м. Иң тәрән ере 16-17 метрға етә. Ярҙың оҙонлоғо - 17,6 км. 1995 йылда Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты ҡарары буйынса Ҡандракүлгә милли парк статусы бирелә.**

# ҠАНДРАКҮЛ



Ҡандракүл ҡиммәтле тәбиғи объект булып иҫәпләнә, орнитологик комплекс буларак, уның экологик һәм ғилми әһәмиәте бик ҙур. Яр буйы үҫемлектәренең, альгофлораның, хайуандар донъяһының төрлөлөгө күлдең уникаль ҡомартҡы икәнлеген раҫлай. Бынан тыш, күлдең, уның тирә-яғының эстетик һәм бальнеологик ҡиммәте мөһим.

Оҙонса түңәрәк формалағы күл көнбайыштан көнсығышҡа табан һуҙылған. Көньяҡтан ул текә яр, артабан болонло далалар, ылыҫлы урманлы тауҙар менән уратылһа, көньяҡ-көнсығыштан ҡайынлы һәм ҡатнаш япраҡлы урмандарға "төрөлгән". Күлдең тәпәш ярҙары ҡыр ҡоштары менән тулы ҡамышлы әрәмәлектәрҙән тора.

Көҙән күл буйында йылы яҡҡа осор ҡоштар күбәйә.

Легенда буйынса, 300 йыл элек Әй йылғаһы буйҙарынан күсеп килгән Ҡотой исемле башҡорт ир уҙаманы көнсығыш ярҙағы тауҙарҙы һәм тарлауыҡтарҙы үҙенең дүрт улына - Яҡупҡа, Әмиргә, Ҡәнзәфәргә һәм Сәлихкә бүлә. Бөгөнгө көнгә тиклем был уйһылыуыҡтарҙы ошо уландар исеме менән атап йөрөтәләр: Яҡуп ҡулы, Әмир ҡулы, Ҡәнзәфәр ҡулы. Ә "Алмаз" санаторийы урынлашҡан ер "Ҡушбүлек" тип йөрөтөлә.

Ҡандракүл ауылында йәшәүсе ололар әйтеүенсә, борон был күл дингеҙ ҙурлығында, ә ярҙары алыҫҡа-алыҫҡа һуҙылған булған. Күлде айырып торған тау ҙа булған. Бер ваҡыт был тау емерелгән дә күл бөгөнгө урынға ҡойолған; унан боронғо аттар өйөрө сыҡҡан, имеш, шуға ла Ҡандра-Ҡотой эргәһендәге ярҙарҙы "Йылҡы туплауы" тип атап йөрөтәләр.

Йылы, дымлы микроклимат арҡаһында был тирәлә көҙ иҡе аҙнаға һуңлап килә. Күл төрлө шишмә, инеш, ҡар һыуҙары ярҙамында тулыланып тора. Шундай хәл булған: күл төбөндәге ҙур ер аҫты шишмәһе таш менән ҡапланып, күл ярҙарында һыу 300-400 метрға тиклем кәмегән. Бер аҙҙан был шишмә тағы ла атып сыҡҡас, күл ҙурайып киткән. 1965-1966 йылдарҙа тағы ла артҡан. Шуныһы ҡыҙыҡлы: йыл һайын 25 майҙан алып 10 июнгә тиклем һыу кимәле күтәрелһә, август-сентябрь айҙарында ул кәмеүгә табан бара.

Күл өс яҡтан да тауҙар менән уратып алынған. Яҡындағы һыу артерияһы - Ҙур Нөгөш йылғаһы. Төньяҡ-көнбайышта, күлдән 900-1000 метр алыҫлыҡта, дөйөм кимәле 4,5 гектарлыҡ утрау бар. Исеме лә шулай - Утрау. Ул урмандарға, һыу баҫа торған болондарға бай.

Күңелһеҙ хәл: күлдең экологияһы маҡтанырлыҡ кимәлдә түгел. Уға минераль ашламалар, пестицидтар, башҡа төрлө һыу сүп-сары менән бысраныу ҡурҡынысы янай. Тикшереүҙәр һыуҙың үтә күренмәлелеге насарайыуын билдәләй. Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө көндә ҡайһы бер хайуан, ҡош төрҙәре юғалыу ҡурҡынысы аҫтында тора. Күптән инде төнгә тынлыҡты ярғанат, өкө ҡанаттары тауышы боҙмай. Бурһыҡтар ҙа күренмәй. Был ҡурҡыу белмәҫ хайуандар ҡасандыр кешеләрҙе үҙҙәренә бик яҡын ебәрә торғайны... Ҡайһы бер төр үҫемлектәр, йәнлектәр юғалды. Әммә Башҡортостан хазинаһы - Ҡандракүл урынында тора, әҙ булһа ла һыуҙа балыҡ, урманда кейектәр бар, йәйге йәшеллектә юғалып барған боронғо үҫемлектәр ҙә күренгеләй. Быларҙың барыһын да беҙгә һаҡларға һәм киләсәк быуындарға ҡалдырырға кәрәк.

**Әлфиә ӘБЙӘЛИЛОВА.**

*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

## ӨФӨ ХАЛҠЫ...
## тормошонан ҡәнәғәт

**Росгосстрахтың Стратегик тикшеренеүҙәр үҙәге хеҙмәткәрҙәре асыҡлауынса, үҙҙәрен бәхетле тойған кешеләр күберәк Мәскәү, Санкт-Петербург һәм Түмән ҡалаларында йәшәй икән. Унда кешеләр башҡа ҡалаларҙыҡына ҡарағанда үҙҙәрен бәхетлерәк тоя, оптимистик рухта йәшәй.**

Ә бына, ышанаһығыҙмы, юҡмы, дүртенсе урынды беҙҙең Өфө ҡалаһы алып тора. Әгәр 2008 йылда өфөләрҙең 66 проценты тормоштан тулыһынса ҡәнәғәт булһа, 2009 йылда уларҙың һаны 75 процентҡа еткән, ә 2010 йылда алынған һорау алыу буйынса - 79 процент! Ҡайҙа бында кризис төшөнкөлөгө?

Быйыл бындай тикшеренеүҙәрҙә Рәсәйҙең 125 ҙур, уртаса һәм бәләкәй ҡалаларында йәшәүсе 18 меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Март айынығы менән сағыштырғанда, тормоштарынан ҡәнәғәт кешеләр һаны өлкән йәштәгеләр, студенттар һәм эшҡыуарҙар иҫәбенә бер аҙ арта төшкән. Пенсионерҙарҙы - пенсия өҫтәлеүе, студенттарҙы - яҙ, ә эшҡыуарҙарҙы - күрәһең, кризистың тамамланыуы илһамландырған.

- Социологик тикшеренеүҙәр үҙәге бүлексәләре хеҙмәткәрҙәре төрлө ҡалаларҙа төрлө ҡатлам кешеләренә шылтыратып, анығ мәғлүмәттәр туплай. Беҙҙең тикшеренеүҙәр буйынса, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда ир-егеттәр тормоштан ҡәнәғәт. Оптимистарҙың күбеһе - йәштәр, - тип һөйләй страховкалау компанияһының матбуғат хеҙмәткәре Д. Шәрипова.

*ҺОРАУ-ЯУАП*

## ИНВАЛИДЛЫҠ БИРМӘЙҘӘР

**Балабыҙ күҙ нервыһы атрофияһы менән, йәғни һуҡыр булып тыуҙы. Әле икенсе күҙе лә насар күрә башланы, шуға ҡарамаҫтан, комиссияға бер нисә тапҡыр документтар әҙерләп тапшырһаҡ та, инвалидлыҡ бирмәйҙәр. Һау күҙе менән таблицалағы тәүге ике юлды ғына күрһә, бирергә мөмкин булыр, тиҙәр. Беҙгә ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

- Медицина социаль-эксперт комиссияһы (МСЭК) ҡарарына дәғүә белдерергә кәрәк. Унан һеҙҙең хәлдә ниндәй шарттарҙа инвалидлыҡ бирелеүе хаҡында ирекле эксперт менән кәңәшләшегеҙ. Тағы ла нигеҙләнгән яҙма яуап алығыҙ. МСЭК биргән яҙма ҡарар менән риза булмаһағыҙ, был мәсьәлә буйынса судҡа мөрәжәғәт итә алаһығыҙ.

## АҢЫМА КИЛЬҺӘМ - ГИПС

**Февралдә магазин иҙәнендә резина коврик булмау сәбәпле, тайып йығылдым һәм аяғымды һындырҙым. Әле булһа гипстамын, больничныйҙа ятам, ә магазин хеҙмәткәрҙәре минең хәл менән бер тапҡыр ҙа ҡыҙыҡһынманы. Бындай хәлдә мин нимәгә дәғүә итә алам?**

- Ҡулланыусы буларак, һис шикһеҙ, һеҙҙең зыянды ҡаплатыуға хоҡуғығыҙ бар. Ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙының күсермәһен, ҡайһы магазинда ниндәй йәрәхәт менән ниндәй айҙың көнөндә медицина учреждениеһына мөрәжәғәт итеүегеҙ хаҡында теркәлгән амбулатория картағыҙҙың күсермәһен алып, судҡа бирегеҙ. Бер-ике шаһитты йәлеп итһәгеҙ, бигерәк яҡшы. Был күңелһеҙ хәл арҡаһында эш хаҡығыҙҙа юғалтыуҙар булһа, һеҙ эштә булмаған осор һәм күпме юғалтҡанығыҙҙы сағыштырыу өсөн унан алдағы эшләгән ваҡытығыҙ буйынса премия яҙыу тураһында положениеның һәм эш хаҡы иҫәпләнгән документтарҙың күсермәһен алығыҙ. Шул уҡ ваҡытта дауаланыуға дарыуҙар, махсус тукланыу, гипс өсөн тотонолған сығымдарығыҙҙы, шулай уҡ бөтә рецепттарығыҙҙы, тауар чектарын һаҡлағыҙ һәм уларҙың күсермәләрен үҙегеҙҙең юллау ыскына беркетегеҙ. Мораль зыянды ҡаплатыу тураһында ла ғариза бирә алаһығыҙ. Ҡазаланыуығыҙ арҡаһында ауыртыныуҙар кисереүегеҙ, йәмәғәт урыны - магазинда йығылыу сәбәпле, кәмһенеү, унайһыҙланыу тойғоларына дусар булыуығыҙға һылтанығыҙ. Матди зыянды раҫлау мөмкинлеге булһа, уның суммаһын үҙегеҙ билдәләйһегеҙ.

## БУШЛАЙ ЯРҘАМ

**Яңауылда йәшәйем, пенсияламын. Торлаҡ мәсьәләһе буйынса бушлай юридик ярҙам кәрәк ине, ҡайҙа, кемгә мөрәжәғәт итергә?**

- Был мәсьәлә буйынса БР Юстиция министрлығына мөрәжәғәт итегеҙ. Адресы: 450000, Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 38-се йорт. Телефоны (347) 272-81-15.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләнә.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Бил һыҙлаһа



❖ Һыҙлаған урынды ҡыҙартҡансы скипидар менән ыуырға һәм сүпрә менән әсетеп яһалған арыш ҡамырын 40-50 минутҡа ябып бәйләргә. Был компресс көн аша эшләнә, бер үк ҡамырҙы бер нисә көн файҙаланырға була, тик ул йомшаҡ булһын. Дауалау ваҡыты 3-5 көн.

❖ Билгә керән япрағын да бәйләргә була, уның да шифаһы ҙур.

❖ Ҡоро гәрсисте (горчица) йылы һыуҙа бутҡа кеүек шыйыҡлап, билгә ябаһың.

❖ Сөсө ҡамырҙы ауыртҡан урынға сепрәк аша һалып, бер нисә тамсы скипидар тамыҙаһың һәм йылы итеп бәйләп ҡуяһың.

❖ Әсе торма һутын ҡалын туҡымаға һеңдереп, билгә бәйләйһең.

❖ Ҡайын япрағын бешереп бәйләү ҙә шифалы.

### Шар уйынсыҡ ҡына түгел

Оҙаҡ йүткерһәң, шарҙы өрөп тултыр, йүткереүең баҫылыр. Ә ҡурылдай (бронхит) булһа, 1 сирек диаметрлы шарҙы көн дә өрөп тултырһаң, хәл яҡшыра.

### Кесерткән

Ерҙе ябып йәш кесерткән сыҡты. Уны щи, борщҡа ҡушып, салат, бәлеш итеп ашау анемиянан ҡотҡара. Айына 3 мәртәбә 1-әр стакан төнәтмәһен эсһәң дә ярай.

### Ҡара ҡарағат

Баҡсаларҙа ҡара ҡарағат япраҡ яра башланы. Бөйөрҙәге таш, быуындарҙа тоҙ ултырыу сирҙәренән ҡара ҡарағат бөрөһө һәм 1-2 һум ҙурлыҡтағы май айындағы япраҡтары ҡотҡара. Әле үк сәй итеп эсегеҙ, ҡышҡылыҡҡа киптереп алығыҙ. Ташларға киҫелгән һабаҡтарын да ваҡлап алырға онотмағыҙ.

### Баш ауыртһа

Көнө буйы эштән бушамай киткәндә, баш ауыртыуы яфалауы ихтимал. Бындай осраҡта ябай салфетканы алма һеркәһенә манып, маңлайға ябырға һәм ялыҡ ябынырға. 10-15 минуттан баш ауыртыуы үтә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Хужабикә: "Йәгеҙ, йылы саҡта картуф тәкәһенә тейешегеҙ", - тигәс кенә эштең ниҙә икәнен аңлап алдым. Бында бәлеш, ҡыҫтыбый кеүек нәмәне тәкә тип йөрөтәләр икән.*






## ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Ҡул өсөн ҡағиҙәләр

● Бармаҡтарығыҙға йөҙөк һәм балдаҡтар тултырмағыҙ. Бер йәки ике дана менән риза булығыҙ. Шулай уҡ беләктәрегеҙгә ҡат-ҡат беләҙектәр киймәгеҙ.

### Сәс өсөн ҡағиҙәләр

● Сәстәрегеҙҙе кер, туҙан һәм башҡа нәмәләрҙән саф һәм паҡ йөрөтөгөҙ һәм һәр көн тарағыҙ. Көйҙөрмәгеҙ һәм бөҙөрәләтмәгеҙ. Тәбиғи хәлен боҙмағыҙ.

● Сәсегеҙҙе тәрбиәләп үрмәйенсә һис кем менән осрашырға бармағыҙ, ҡунаҡтар алдына сыҡмағыҙ. Һәр хәлдә шәриғәт рөхсәт итмәгән кешеләргә күрһәтмәгеҙ.

● Ныҡ тығыҙ итеп үрмәгеҙ. Башҡаларҙың сәстәрен ҡушып аҫмағыҙ, сәс осона ҙур таңҡә йәки ауыр нәмә таҡмағыҙ.

### Баш өсөн ҡағиҙәләр

● Башығыҙҙы ғәҙәттән тыш түбән йәки бер яҡ ситкә һалмағыҙ. Ҡулығыҙ менән башығыҙға таянмағыҙ. Халыҡ алдында тырнанмағыҙ.

● Ҡышҡыһын йылы һәм йәйгеһен бер аҙ һалҡын һыу менән кәмендә аҙнаһына бер мәртәбә һабынлап йыуығыҙ. Йыуғандан һуң шунда уҡ һалҡын һауаға сыҡмағыҙ.

● Ашағандан һуң өс сәғәт ваҡыт үтмәйенсә йыуынмағыҙ һәм ҡойонмағыҙ. Йыуынғандан һуң һөртөнөгөҙ һәм тиҙерәк кейемегеҙҙе кейегеҙ. Эҫе көндәрҙә йөҙ, ҡул һәм аяҡтарығыҙҙы йыш йыуығыҙ.

### Йөрөү ҡағиҙәләре

● Йөрөгәндә бик ашыҡмағыҙ, йүгермәгеҙ һәм бик аҡрын йөрөмәгеҙ. Юлда булған кешеләрҙе этеп-төртмәгеҙ. Тәнгегеҙҙе һелкетмәгеҙ, ҡулдарығыҙҙы болғамағыҙ. Ғәҙәттән тыш ҡысҡырып һөйләшмәгеҙ. "Ҡәһ! Ҡәһ! Ҡә! Ҡә! Ҡә!" - тип көлмәгеҙ.

● Аяҡтарығыҙҙы һөйрәмәгеҙ. Тирә-яҡҡа ҡарамағыҙ. Кешеләрҙән көлөп ҡалмағыҙ. Бер кешене мәсхәрләп, уның кеүек ҡыланып күрһәтеүсе булмағыҙ.

### Йоҡо ҡағиҙәләре

● Ятасаҡ урынығыҙҙы үҙегеҙ йәйегеҙ. Туҙан һәм еүешлектән таҙа тотоғоҙ. Торғас, урынығыҙҙы үҙегеҙ йыйып ҡуйығыҙ.

● Мөмкин булһа, тәртип буйынса йоҡлағыҙ. Иртә ятып, иртә тороғоҙ. Йәғни тығыҙ сәғәттән дә һуңламай йоҡлағыҙ һәм алты сәғәттән һуңламай тороғоҙ. Йоҡоно тейешле ваҡыттан ҡалдырыу сәләмәтһеҙлеккә сәбәп буласаҡ өсөн ғәҙәтләнгән ваҡыттан һуңламаҫҡа тырышығыҙ. "Тәүҙә ярты төндә булған йоҡонон бер сәғәте икенсе ярты төндең ике сәғәтенә тиң, - тигән һүҙҙе онотмағыҙ.

● Салҡан ятыу яман төштәр күреүгә һәм баҫтырылыуға, йөҙ түбән ятыу насар һулауға сәбәп булған өсөн ян тарафҡа ятығыҙ.

● Зарур булмаһа, бер бүлмәгә күмәкләшеп ятмағыҙ.Һалҡындан һаҡланыу өсөн өҫтөгөҙгә бер нәмә ябынығыҙ. Йоҡо ваҡытында тәҙрәләрҙе асыҡ ҡалдырмағыҙ.

(Дауамы бар).

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

**Миңә "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналының баш мөхәррире вазифаһында 34 йыл эшләргә насип булды, һәм шул осорҙа республикабыҙ төбәктәрен күп тапҡыр иңләп-буйлап гиҙеп сығылды. Мәктәптәрҙә уҡытыусылар, ата-әсәләр менән осраштым, ауыл халҡы менән аралаштым. Һәр төбәк һөйләшенә генә хас булған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, хатта айырым терминдар ул саҡта уҡ миңә бик ҡыҙыҡлы булып тойолдо. Ерле һөйләш һүҙҙәрен дөрөҫ аңламауым арҡаһында уңайһыҙ хәлдә ҡалғаным да аҙ булманы.**

# ТОРМОШ ИПТӘШТӘРЕ КҮП ТӘ УЛ,

## ир менән ҡатын берәү генә

Мәҫәлән, Әбйәлилдә: "Өгөрсө унды быйыл", - тиһәләр, тәүҙә аптырабыраҡ ҡалаһың да, ҡыяр тураһында һүҙ барыуына төшөнөп, йылмайып ҡуяһың. Бөрйән яҡтарында: "Туҡрап-туҡрап торҙом да, йоҡтап алдым", - тип һөйләү ситтән килгән кешегә мәҙәгерәк булып тойола. Ә Салауат районында "баҡа" тигәнгә лә торған ерҙән йылмайыша башлайҙар, сөнки бында ошо ҡәҙимге һүҙҙең башҡа мәғәнәһе лә барлыҡҡа килгән. Тәтешләлә ир кешегә "апай" тип әйтеүҙәре ҡыҙыҡ. Ейәнсурала башындағы бүрегенде "Кәпәсең шәп икән!" - тип баһалайҙар.

Әйткәндәй, Ейәнсура районының Күгәрсен ауылында йылға яҡын мәктәптә эшләргә тура килде. Бик һәйбәт, кешелекле ағай менән апай өйөндә фатирҙа торҙом. Бер көн китапханаға йыйынып йөрөгәнемдә апай: "Сәлимйән, оҙаҡ йөрөмә, тәкә бешерәм", - тип, тиҙерәк ҡайтырға ҡушты. Минең уйымса, тәкә ите бешкәнсе, кәмендә сәғәт ярым ваҡыт үтә. Шулай ҙа бик тиҙ ҡайттым. Хужабикәнең бөсө ажғырып торған самауыры түргә ҡунаҡланы. Табын уртаһына тәмле еҫ бөркөп торған ҙур таба ҡуйылды. Апайыбыҙ: "Әйҙә, ашай башлағыҙ", - тип әмер бирҙе. Беҙҙең яҡтарҙа сәйҙе аштан, йәғни иттән һуң эсеү ғәҙәткә ингән бит инде. Шулай булғас, минең ике күҙ ҡаҙан ягына төбәлгән. Хужабикә: "Йәгеҙ, йылы саҡта картуф тәкәһенә тейешегеҙ", - тигәс кенә эштең ниҙә икәнен аңлап алдым. Бында бәлеш, ҡыҫтыбый кеүек нәмәне тәкә тип йөрөтәләр икән.

Әлбиттә, ерле һөйләштәр телебеҙҙең ҡабатланмаҫ байлығын тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта туған телебеҙҙә дөрөҫ һөйләшеүебеҙ һәм яҙыуыбыҙ тураһында ла етди уйланырлыҡ сәбәптәр бар. Шул хаҡтағы ҡайһы бер фекерҙәремде милләттәштәремә еткерергә булдым.

Һүҙемде тыуған төйәгебеҙҙең рәсми исеме - Башҡортостан Республикаһы атамаһынан башлайым. "Стан" һүҙенең йәшәгән урын, ил, төбәк мәғәнәһендә ҡулланылыуын иҫәпкә алып, Башҡортостан һүҙенең Башҡорт иле, йәғни башҡорт халҡы йәшәгән төбәк тигәнде аңлатыуын беләбеҙ. Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Татарстан, Дағстан кеүек атамалар ҙа шулай барлыҡҡа килгән. Әммә ошо атамаларҙа, Башҡортостан исеменән айырмалы рәүештә, о өнө әйтелмәй һәм о хәрефе яҙылмай. Ә ни өсөн Башҡортостан исемендә "стан" алдынан о хәрефе яҙылырға тейеш һуң? Ғөмүмән, ошо рәүешле яҙыуҙың кәрәге бармы? Минеңсә, Башҡортстан тип әйтеү һәм яҙыу килешлерәк һәм дөйөм ҡағиҙәгә яраштырыраҡ булыр ине.

Һуңғы ваҡытта матбуғатта, радио, телевидение тапшырыуҙарында "көн дауамында", "ай дауамында", "сәғәт дауамында" тип яҙа һәм һөйләй башланылар. Был һүҙбәйләнештең рус телендәге "в течение ..." тигәндең тура тәржемәһе икәнлеге үҙенән-үҙе беленеп тора. Ә халыҡ улай һөйләшмәй, телебеҙҙә ошо мәғәнәне биреү өсөн ҡулай булған ҡалып бар бит. Мәҫәлән, "Кәнәшмә көн буйы барҙы", "Лектор сәғәт буйы һөйләне", һ.б.

Гәзит-журналдарҙа "проект сиктәрендә" һүҙбәйләнеше лә йыш осрай. Был да рус телендәге "в рамках" тигәнгә тура килтереп яһалған яңы һүҙ ҡалыбы. Минеңсә, "Мәғариф проекты сиктәрендә быйыл фәләнсә мәктәп төҙөлдө" тип яҙыу урынына "проект буйынса", "проект нигеҙендә" йәиһә "проектта ҡаралғанса" тип алыу отошлораҡ булыр ине.

Руссанан тура тәржемә итеү, йәғни һүҙ калькаларын ҡулланыу йәшәйешебеҙҙә мәрәкәле хәлдәр тыуҙыра. Шулай бер күңелле генә мәжлескә йыйылғанбыҙ. Хужабикә ҡунаҡтарҙы бер-береһе менән таныштыра башланы. Яҡыныраҡ ултырған ирҙе күрһәтеп: "Был минең тормош иптәшем", - тине. Артабан 3-4 кеше аша ултырған ирҙе атап: "Быныһы минең тормошомда иң яҡын иптәшем", - тип ҡосаҡлап алды. Минең эргәлә ултырған ҡунаҡ бик ғәжәпләнеп: "Бәй, быларҙың ҡайһыһы хужабикәнең ире булып сыға һуң?" - тип, миңә өндәште. Тарих төпкөлөнән бирле телебеҙҙә "ир", "ҡатын", "бисә" һүҙҙәре бар. Был осраҡта әлеге "тормош иптәше" һүҙбәйләнешен ҡулланыуҙың һис бер кәрәге юҡ. Тормошта иптәштәрең күп булһа ла, һәр кемдең ире йәиһә ҡатыны берәү генә була бит.

Фекерҙәремде йомғаҡлап, телебеҙҙә көн һайын ҡулланған һүҙҙәргә иғтибарлыраҡ булыуыбыҙҙы теләр инем. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа Терминология комиссияһының эшмәкәрлеген сағылдырған тәҡдимдәр, һығымталар, ҡарарҙар тураһында бер ни ҙә ишетелмәй. Бәлки, әле мин телгә алған һәм башҡа бик күп осраҡтарға ул асыҡлыҡ индерә алыр ине.

**Сәлимйән ҒҮМӘРОВ.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# АҠЫЛЛЫ ҒЫНА...

## эшеңде көйләр, фәһемле һүҙ һөйләр

● Кеше күңеле - тәрән мөғәрәп, баҫҡыс ҡына ҡуя бел, бөтә байлығын сығара.

● Кешене бер алдаһаң, аҡшайып ҡарар; ике алдаһаң, тешен ыржайтыр; өсөнсөһөндә сөрсөтә һуғыр - алдашыуҙан алыҫ бул.

● Вайымһыҙ һәм ғәмһеҙ булма - икеһе лә ҡаза килтерә.

● Кеше зарына ҡолаҡ һал - балыҡ ҡына бер ни ҙә ишетмәй.

● Һәр ерҙә дуҫым бар, тип арҡаланма, арҡауҙың да арҡан кейҙереүе ихтимал.

● Бәләсниккә тарыма - ғүмер буйы сәйнәр, аҡыллыға юлыҡһаң, эшеңде көйләр, фәһемле һүҙ һөйләр.

● Донъям теүәл булһын, тигән ҡатындың башында ҡырҡ төрлө уй, ҡулында йөҙ эше уйнар.

● Эш юлында - эшеңде, ҡайтыуында өйөңдө ҡайғырт.

● Телеңде насар һүҙҙәрҙән һаҡлау өсөн яҡшыларын йышыраҡ әйт.

● Тарих тирмәнен кирегә әйләндереүселәргә эйәрмә - он-талҡанға әйләнеүең бар.

● Боҙолған кәйефеңде тышҡа сығарма, иртәгеһе көндөң матурлығын уйла.

● Күп белергә теләйем, тип, күп төпсөнмә, кешене маҙаһыҙлама - эштә лә, һүҙҙә лә сама белеү хәйерле.

● Кешенең кемлеге аш янында һәм мал бүлгәндә беленә, нәфсеңде тыя бел.

● Ҡунаҡсыллыҡ - матур ғәҙәт, әммә әйләнгән һайын килеп маҙаһыҙлаған әрһеҙ кешене гел ҡунаҡ тип булмай.

● Тормошта эш ҡыра алмаған ошаҡсы һәтемтәйҙәр һәр саҡ була - һаҡ бул, уларҙың ағыуы йыландыҡынан көслө.

● Ҡайғыға төшкән кеше күңеле - төтөн тулған өй, тәҙрәләрҙе ас, йәғни ҡайғылыны бөгәлөп төшөүҙән ҡотҡар.

● Ғүмер - серле йомғаҡ, асылмаған йоҙаҡ: яраған асҡыс тапһаң ғына серен асырһың, дөрөҫ йәшәү юлын табырһың.

● Йүнле һәм йүнсел бул - йүнгә тартыр, малың артыр, йүнһеҙлек иһә сәс ағарта, донъя вата, артҡа тарта.

● Күкрәк һуғып, аяҡ киреп, ҡара-ҡаршы ирешкән кешеләр ике эт өрөүенә тин.

● Атың юлда арыһа, әрләмә, ҡамсылама - келәттәге һолондо ғына йәлләмә.

● Нәфсеңде тый, донъя ҡыума: донъя малы дуңғыҙ ҡаны, һыу сепрәге - ҡайҙа күмһәң, шунда серей.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш




**Иван Иванович Лепехин (1740-1802) - Рәсәй Император фәндәр академияһы академигы һәм уның даими секретаре, медицина докторы, Санкт-Петербург Ирекле иҡтисад йәмғиәте ағзаһы, Дәүләт медицина коллегияһының, Тәбиғәтте тикшереүселәрҙең Берлин һәм Гессен-Гамбург патриотик йәмғиәттәренең почетлы ағзаһы. 1768-1772 йылдарҙа И.И. Лепехин Ырымбур губернаһын өйрәнеү буйынса ойошторолған өс Академик экспедицияның береһенә етәкселек итә. 1770 йылда И.И. Лепехин Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры буйлап килеп, Урал һырты аша уҙа, Яйыҡ, Мейәс, Әй һәм Ҡариҙел йылғаларының башына барып етә, ул ваҡыттағы Ырымбур губернаһының үҙәк районндарында тикшеренеүҙәр алып бара. Уның экспедицияһы утыҙҙан артыҡ завод һәм рудниктарҙа була, байтаҡ ҡына башҡорт ауылдарында һәм йәйләүҙәрендә туҡтап, уларҙың көндәлек тормошона ҡараған мәғлүмәттәр йыя. Академик Лепехин яҙмалары башҡорт этнографияһы өсөн бөгөн дә ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе булып тора. Экспедиция материалдары "Доктор һәм фәндәр академияһы адъюнкты Иван Лепехиндың Рәсәй дәүләтенең төрлө провинциялары буйлап сәйәхәт көндәлеге яҙмалары" исеме аҫтында бер нисә томда донъя күрә. Һеҙгә ошо яҙмаларҙың башҡорттарға ҡараған өлөшөн тәҡдим итәбеҙ.**

... 8-се числола статский советник әфәнде беҙгә ҡыҙыҡлы тамаша әҙерләп ҡуйғайны. Бер башҡортто саҡыртып килтереп, уларҙың солоҡ ағасына менеү ысулын һәм бал менән һыйланырға яратҡан айыуҙарҙан кәрәҙҙе нисек һаҡлауын күрһәтергә ҡушты: урманлы ерҙәрҙә йәшәүсе башҡорттар үҙҙәренең солоҡтарын бейек ҡарағайҙарҙа яһай, һәм уларҙы ваҡыты-ваҡыты менән, яҙын-көҙөн генә ҡараштыра. Улар ағасҡа нәҙек ҡайыштарҙан өс бармаҡ яҫылығында үрелеп, кирәм тип аталған ныҡлы арҡан ярҙамында менә. Ағас олонында аяҡ бармаҡтарын терәрлек ҙур булмаған киртләстәр, йәғни киртек уйыла. Ағасҡа менер өсөн кирәмде олон аша уратып алып, бил һәм һул ҡулбаш аша уҙғарып, остарын тоҡанлап бәйләйҙәр ҙә, ағасҡа аяҡтарҙы терәп, арҡанға салҡан һалынып яталар. Һуңынан арҡанды ҡулдар менән өҫкәрәк ташлай биреп, уға ятҡан көйө өҫкә менергә лә, аҫҡа төшөргә лә була.

Балды айыуҙарҙан һаҡлар өсөн күрәләтә көлкөлө ысулдар уйлап табылған. Солоҡ ҡапҡасынан өҫтәрәк бәйләнгән бауға талыҡ тип аталған түмәр аҫып ҡуйыла, ул айыу солоҡҡа менә торған урынға тап килергә тейеш. Түмәр айыуға өҫкә үрмәләргә ҡамасаулағас, ул уны ситкә табан этеп ебәрә. Хәрәкәткә килтерелгән түмәр айыуҙың ҡабырғаһына йә башына бәреләә; үсегеп киткән айыу түмәргә тәпәйе менән нығыраҡ һуғып ебәрә, ә ситкә ныҡ тайпылған түмәр айыуға тағы ла ҡатыраҡ килтереп һуға. Был хурлыҡлы тамаша айыу хәлдән тайғансы, йә булмаһа, түмәр ныҡ бәрелеүҙән айыу осоп төшкәнсе дауам итә.

Икенсе ысул бына ниҙән ғибәрәт. Солоҡ ауыҙына килеп етерлек ағас ботағына бауҙар менән дүрт мөйөшлө бәүелсәк беркетелеп, солоҡ ҡапҡасына табан тарттырылып, нәҙек кенә бау менән бәйләп ҡуйыла. Ағасҡа үрмәләгән айыу солоҡҡа етер өсөн мотлаҡ бәүелсәккә ултырырға мәжбүр була: әммә был осраҡта ла бәүелсәкле ботаҡ бәйләнгән бау уға ҡамасаулап торғас, айыу уны өҙөп ташлай. Үҙен тартып торған көстән арындырылған һығылмалы ботаҡ кире китеп, бәүелсәктәге айыуҙы ағастан ситкә алып китә. Шул рәүешле айыу солоҡ хужаһы килеп, уны үлтергәнсе бәүелсәктә бәүелеп торорға дусар була: ағасҡа етергә йыраҡ, ә бейеклек йәиһә ағас тирәләй ҡағып ҡуйылған осло ҡаҙыҡтар ергә төшөргә мөмкинлек бирмәй.

Ошо саҡта әлеге башҡорт менән төрлө нәмәләр хаҡында һөйләшкәндә, башҡорттарҙың кесерткәндән туҡыма һуғыуын белеп, кесерткәнде нисек ҡулланыуҙары тураһында һораштым. "Беҙ уның ике төрлөһөн: бында үҫкән ҡәҙимгеһен һәм икенсеһен - киң япраҡлыһын ҡулланабыҙ", - тип яуапланы башҡорт. Һуңғыһынан беренсеһенә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ туҡыма сыға. Тегеһе лә, быныһы ла дымлы урындарҙа хисапһыҙ күп үҫә, кешенең күкрәгенә тиклем еткәндәре була. Кесерткән өлгөрөп еткәс, һабаҡтарын услап тотоп, аяҡ менән тамыр яғына тибеп, өҙгөсләп йыялар. Кәрәк тиклем йыйылғас, һабаҡтарын һындырғылап, йүкәнән һалабаш һыҙырған кеүек, ҡабығын һыҙырып алалар. Һыҙырылған ҡабыҡты киптереп алғас, тылҡып, эшкә яраҡлы хәлгә китерәләр.

Башҡортто ҡалдырып, ҡәҙимге эштәребеҙ менән яланға сығып киттек. Һис тейелмәгән бай көтөүлектәр башҡа урындарҙы ҡарауға сарыф ителгән ваҡытыбыҙ өсөн үкенеү тойғоһон ҡуҙғытты; йәй үткәс урманға ҡурай еләгенә барған кеүек булды инде. Шиңгән һәм иртәнге һыуыҡтан әлһерәгән үҫемлектәр араһында һарына һәм өйрәк үләнен (запья трава) танып була ине әле; башҡорттар уларҙың тамырҙарын, беҙ шалҡан бешереп ашаған кеүек, аҙыҡ сифатында ҡуллана: уларҙың оролары бар, һалма өсөн ҡулланылған ондоң бер төрө шунан яһала.

Йәнғужа йылғаһынан 10 саҡрым үткәс, Һалмыш йылғаһы аша сығып, иртәнгә Яманғол исемле башҡорт ауылына килеп еттек. Ошо ауылда миңә тәү тапҡыр башҡорттарҙың ҡышҡы торлағын күрергә насип булды; йәй көндәрен улар, ҡалмыҡтар кеүек, малдарына яҡшыраҡ көтөүлөктәр табыр өсөн дала буйлап күсеп йөрөй һәм тирмәләрҙә йәшәй, ә көҙөн ҡышлауҙарында йыйыла. Йорттары татарҙарҙыҡы һәм мариҙарҙыҡы кеүек төҙөлгән. Мейес урынына ярым цилиндр рәүешендәге камин яһайҙар, уның торбаһы эстән балсыҡ менән һыланған кәртәләрҙән хасил була. Бына ошо сыуал тип аталған камин уларға йылылыҡ бирә. Утын янып бөткәс, йылы оҙағыраҡ һаҡланһын өсөн, сыуал тишеген өй эсенән тиренән яһалған туп менән ҡаплап, ике таяҡ менән терәтеп ҡуялар. Ошо каминдан башҡа, уларҙың ҡаҙан ултыртылған бәләкәй усаҡтары бар. Бында һалма бешерәләр, ҡорот ҡайнаталар.

**(Дауамы бар).**

ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ



# ҒӘЛИӘХМӘТ АЙЫТБАЕВ

**Ғәлиәхмәт Айытбаев - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге осоронда әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1917 йылдың 20-27 июлендә Ырымбурҙа үткән 1-се Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт үҙәк шураһына ағза итеп һайлана. Уға Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең башҡарма органында үтә лә яуаплы һәм мөһим эш йөкмәтелә - Башҡорт үҙәк шураһының Ер һәм урман эштәре буйынса бүлек мөдире итеп тәғәйенләнә. Был осорҙа ул башҡорттоң ер мәсьәләләрен хәл итеүгә йүнәлтелгән проект, положениелар өҫтөндә әүҙем эшләй.**

1917 йылдың ноябрендә Ғ. Айытбаев тарафынан башҡорт улыстарында ер эштәре буйынса бүлектәр ойоштороу һәм уларҙың эшмәкәрлеге тураһында положение эшләнә.

8-21 декабрҙә Каруанһарайҙа үткән 3-сө Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Ғәлиәхмәт Айытбаев башҡорттоң ер мәсьәләһе буйынса ҙур доклад менән сығыш яһай. Ошо доклад нигеҙендә оло йыйын ер буйынса резолюция ҡабул итә. Унда башҡорт ерҙәрен файҙаланыу хоҡуҡтары, ҡуртым (аренда), Башҡортостан территорияһына күсенеп килеүселәр, Башҡортостандың ер һәм мөлкәте менән идара итеү, һ. б. мәсьәләләр яҡтыртыла. Күскенселәр мәсьәләһе буйынса ҡоролтайҙың ҡарарында былай тиелә:

"16. Правом поселения на Башкирской территории пользуются только башкиры и другие мусульмане тюркского племени, оставшиеся вне пределов автономной Башкирии.

19. Все переселенцы, заселившие Башкирию после 20 апреля 1898 года путем принудительного отчуждения им земли, как результат хищнических законоположений и распоряжений царского правительства, должны обмениваться землями с теми из башкир и мусульман, которые остались вне пределах Башкирии и которые пожелают поселиться в ней.

20. Первыми обмену подвергаются переселенцы, поселившиеся в Башкирии по законам 9 ноября 1906 г., 14 июня 1910 г., 29 мая 1911 года.

21. Земли, находящиеся в пользовании переселенцев, насильственно захвативших наделы башкир, пользуясь покровительством старого правительства, передаются прежним владельцам - башкирам".

Ойоштороу йыйынында Башҡортостан автономияһының 22 кешенән торған закондар сығарыу органы - Кесе ҡоролтайы (предпарламент) ойошторола. Милли хәрәкәттең лидерҙары Зәки Вәлиди, Шәриф Манатов, Сәғит Мерәҫов, Аллабирҙе Йәғәфәровтар менән бергә Ғәлиәхмәт Айытбаев та Кесе ҡоролтай ағзаһы итеп һайлана, Башҡорт хөкүмәте составына инә. "Айытбаев хөкүмәттең ауыл хужалығы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнде", - тип яҙа З. Вәлиди.

1918 йылдың 4 февралендә Башҡорт хөкүмәте ағзалары, шул иҫәптән Ғ. Айытбаев та, большевиктар тарафынан ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Әммә уны оҙаҡ тотмайҙар. Төрмәнән сығыу менән Айытбаевты совет платформаһындағы Башҡортостан автономияһы яҡлы башҡорт большевиктары үҙҙәренә эшкә йәлеп итә. Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советына (БВРС) ағза итеп алалар. Бында уға оҙаҡ эшләргә тура килмәй. 1918 йылдың 30 мартында Ырымбур мосолман комитеты тарафынан БВРС таратыла. Башҡортостанға автономия яулау идеяһы бының менән генә һүрелеп ҡалмай. Башҡорт эшмәкәрҙәре Милләттәр эштәре буйынса комиссариатҡа (Наркомнац) ҙур өмөт бағлай.

Апрелдә Айытбаев Мәскәүҙә Наркомнац янындағы Үҙәк мосолман комиссариатына эшкә алына. Был осорҙа комиссариатта башҡорт эшмәкәрҙәренән Шәриф Манатов, Хәбибулла Ғәбитовтар эшләй. Ғ. Айытбаевты комитеттың ер эштәре һәм сәнәғәт бүлеге мөдире вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләйҙәр. Бер үк ваҡытта комиссариаттың башҡорт эштәре буйынса комиссары вазифаһын башҡара. Әҙерәк Мәскәүҙә эшләгәндән һуң, ул комиссариаттың урындағы органдарының эшен юлға һалыу өсөн Башҡортостанға ҡайта.

1918 йылдың йәйендә Башҡорт хөкүмәте тергеҙелгәс, Айытбаев ҡабат Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Зәки Вәлиди уны бәйләнештәр ойоштороу өсөн Төркиәгә ебәрергә уйлай. Әммә уның сит илдә йөрөп ҡайтҡанлығы тураһында мәғлүмәттәр юҡ.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Ғәлиәхмәт Айытбаев Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте - Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлана. 23 февралдә Автономиялы Башҡорт Совет социалистик республикаһының ер эштәре халыҡ комиссары итеп һайлана. 1920 йылда ул Тамъян-Ҡатай кантонының ғәҙәттән тыш комиссияһы (КантЧК) рәйесе булып эшләй. Ғәлиәхмәт Айытбаевтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

**Халыҡта "Ашаған белмәй, тураған белә" тигән бик тапҡыр әйтем бар. "Йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр барып күр", тип тә әйтәләр. Ошондай әйтем-мәҡәлдәргә иҫтә тотоп, беҙ ҙә һеҙгә үткән быуаттың 80-се йылдары аҙағынан башлап милли яңырыу, сәйәсәт, дәүләт ҡоролошо мәсьәләләре менән аныҡ шөғөлләнгән һәм ил эше менән янған ике шәхесебеҙҙе "Диалог"ҡа саҡырырға булдыҡ. Улар: хоҡуҡ белгесе, юридик фәндәр докторы, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың комитет рәйесе, БР атҡаҙанған юрисы Зөфәр Ирғәли улы ЕНИКЕЕВ менән сәйәсәт фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университеты янындағы колледж директоры Әхтәр Мөхәмәт улы БОҪҠОНОВ. Уларҙың әңгәмәһе, әлбиттә, илебеҙ, республикабыҙ, милләтебеҙ яҙмышы хаҡында барыр.**

# БАШҠОРТ ЕР МӘСЬӘЛӘҺЕН

## сөнки ул был ергә

**▶ Рәсәй етәкселеге, уның Дәүләт Думаһы Рәсәй Федерацияһы составындағы республикалар менән "бесәй-сысҡан уйыны" уйнаған кеүек ҡылана. Аскернә бесәй ҡулындағы сысҡанды уйната-уйната йоторға ярата. Мәскәү менән республикалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙә бер ниндәй аныҡлыҡ та, һис юғы, был эштәр менән шөғөлләнеүсе министрлыҡ та, ведомство ла юҡ. Шул уҡ ваҡытта донъя капиталы Рәсәйҙең үҙе менән ошо уҡ уйынды башҡарған һымаҡ. Бөтә донъя күҙлегенән Рәсәй үҙе лә сысҡан хәлендәлер, күрәһең. Яңыраҡ телевизорҙан Мәскәүҙәге Дәүләт Думаһы бинаһына терәлеп үк ултырған "Мәскәү" ҡунаҡханаһы хаҡында һөйләнеләр. Бәхтиһән, ҡунаҡхана - Мәскәүҙеке, ә ул ултырған ер Америка байныҡы икән. Ул ҡунаҡхана ерен күпмелер миллиард долларға һатып алған, имеш. Һатыуҙар һәм һатып алыуҙар ошондай кимәлдә барғас, хәлебеҙ аңлашыла. Ғөмүмән, хәҙер Рәсәйҙә бар нәмә лә, бөтә кимәлдә лә һатыла һәм һатып алына. Бына ошондай хәлдәргә ниндәй баһа бирәһегеҙ?**

**З. ЕНИКЕЕВ:** Бөгөн Рәсәй Федерацияһында барған реформаларҙың ил халҡын бөлгөнлөккә төшөрөргә йүнәлтелгәнен барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Беҙ ошо илдә йәшәгәс, быларҙан азат була алмайбыҙ. Һуңғы биш йылда Рәсәйҙең депрессив регионддары бер нисә тапҡырға артты. Элек рентабелле региондар 48 ине, хәҙер 12-гә генә ҡалған. Ер ҙә һатыуға китте. Хәҙер Мәскәүҙең үҙендә лә, Псков өлкәһендә лә, Әбйәлил районында ла - бар урындарҙа ла һатыла ер. Сәйәсәт шулай ҡуйылған һәм закон менән нығытылған икән, уны туҡтатыу мөмкин түгел. Әгәр ҙә урындағы халыҡ, етәкселек күтәрелеп сығып, шул башбаштаҡлыҡҡа кәртә ҡуймаһа, беҙҙең яҡын киләсәктә ерһеҙ тороп ҡалыуыбыҙ ҙа бар. Беҙ генә түгел, бар Рәсәй халҡы. Мин Әбйәлил районында булғанда ундағы ер һатыуҙың нисек атҡарылғанлығын белеп ҡайттым. Фәлән ауылда йәшәүсе Фәләнов Фәлән үҙенә йорт һалырға тип ер юллап ала ла, шуны Магнит байына һатып ебәрә. Беҙгә бәләне ситтән түгел, үҙебеҙҙән эҙләй башларға кәрәк. Һәр бер кешелә эске контроль булырға тейеш. Бөгөн ер һатыусы - ата-әсәһен һатыусы ла. Беҙ, киреһенсә, еребеҙгә йәбешеп ятырға тейешбеҙ. Һин, бәлки, бөгөн насарыраҡ йәшәйһеңдер, әммә ереңә ерегеп ятһаң, киләсәктә насар йәшәмәйәсәкһең. Ә Мәскәүҙә иһә ер генә түгел, гәзиттәр яҙыуынса, депутат урындары ла, министр урындары ла - бар нәмә һатыла. Быға хәҙер аптырарға түгел.

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Ер мәсьәләһенә ике төрлө ҡараш бар. Беренсе ҡараш - әсәйгә, тыуған илгә ҡарата булған ҡараш, икенсе ҡараш - һатыу һәм һатып алыу объекты. Шуға күрә ер мәсьәләһе тыуған һайын ул иң тәүҙә беҙҙең халыҡҡа килеп ҡағыла. 90-сы йылдарҙа йәһүдтәр ойошмаһы етәксеһе Кац ер мәсьәләһенә ҡарата: "Егеттәр, әйҙә, беҙ башҡорттарҙы дөрөҫ аңлайыҡ. Улар бит дөрөҫ сығыш яһай. Ошонда ултырыусыларҙан башҡорттарҙан башҡа бер кемдең дә ер мәсьәләһен күтәрергә мораль хоҡуғы юҡ. Улар ошо ерҙәге тормош өсөн башҡаларға ҡарағанда күберәк яуаплылыҡ тоя", - тигән бик ҡыҙыҡлы бер фекер әйткәйне.



Беҙ ошо ергә этногенетик яҡтан бәйлебеҙ һәм еребеҙҙе юғалтыу асылыбыҙҙы юғалтыуға тиң буласаҡ. Ҡырҙан килгән кеше иһә беҙҙең ергә һатыу һәм һатып алыу объекты итеп ҡарай.

**З. ЕНИКЕЕВ:** Мөхит - киң мәғәнәгә эйә төшөнсә. Уға идеология ла, мәҙәниәт тә, сәнғәт тә инә. Шулай булғас, башҡорт өсөн ер тупраҡ, һыу, һауа ғына түгел, киңерәк мәғәнәле төшөнсә. Тимәк, ерен һатыусы ата-әсәһен генә түгел, үҙен дә, үҙенең асылын да һатыусы. Бөгөн, мәҫәлән, мин Мәскәүгә барырға һәм унда балаларымды ебәрергә ҡурҡам. Унда скинхедтар хәрәкәте йылдан-йыл бер нисә тапҡырға арта бара. Беҙ, башҡорттар, Башҡортостанда бындай күренештәргә юл ҡуймаясаҡбыҙ. Үҙебеҙҙе генә түгел, башҡаларҙы ла туҡматмаясаҡбыҙ. Сөнки, Кац әйтмешләй, беҙ, ысынлап та, ошо ерҙәге тормош өсөн тулы мораль яуаплылыҡ тойғоһо менән йәшәүсе милләт. Башҡорттарҙа яуаплылыҡ тойғоһо көслө. Бына мин экология буйынса диссертация яҡлаған кеше булараҡ, тәбиғәтте һаҡлау беҙҙең милләттең ҡанынан килгәненә инандым. Сөнки тәбиғәтте башҡорт үҙенеке итеп ҡабул итә, ә килмешәктәр беҙҙең тәбиғәтте байлыҡ туплау объекты итеп ҡарай. Беҙҙең халыҡта, мәҫәлән, "После меня хоть трава не расти", "После меня хоть потоп" кеүек мәҡәлдәр бөтөнләй осрамай. Беҙҙә, киреһенсә, "Ҡош атҡан йәлсемәҫ", тип әйтәләр.

***Башҡорт өсөн ер тупраҡ, һыу, һауа ғына түгел, киңерәк мәғәнәле төшөнсә. Тимәк, ерен һатыусы ата-әсәһен генә түгел, үҙен дә, үҙенең асылын да һатыусы. Бөгөн, мәҫәлән, мин Мәскәүгә барырға һәм унда балаларымды ебәрергә ҡурҡам. Унда скинхедтар хәрәкәте йылдан-йыл бер нисә тапҡырға арта бара. Беҙ, башҡорттар, Башҡортостанда бындай күренештәргә юл ҡуймаясаҡбыҙ. Үҙебеҙҙе генә түгел, башҡаларҙы ла туҡматмаясаҡбыҙ. Сөнки, Кац әйтмешләй, беҙ, ысынлап та, ошо ерҙәге тормош өсөн тулы мораль яуаплылыҡ тойғоһо менән йәшәүсе милләт. Башҡорттарҙа яуаплылыҡ тойғоһо көслө. Бына мин экология буйынса диссертация яҡлаған кеше булараҡ, тәбиғәтте һаҡлау беҙҙең милләттең ҡанынан килгәненә инандым. Сөнки тәбиғәтте башҡорт үҙенеке итеп ҡабул итә, ә килмешәктәр беҙҙең тәбиғәтте байлыҡ туплау объекты итеп ҡарай. Беҙҙең халыҡта, мәҫәлән, "После меня хоть трава не расти", "После меня хоть потоп" кеүек мәҡәлдәр бөтөнләй осрамай. Беҙҙә, киреһенсә, "Ҡош атҡан йәлсемәҫ", тип әйтәләр.***

**▶ Зөфәр Ирғәле улы әйткән "Ҡош атҡан йәлсемәҫ" тигән мәҡәлдең дини аңлатмаһы ла бар. Беҙ башҡорт халҡының рухи короле Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тыуыуына 175 йыл тулыуҙы билдәләгән саҡта мосолман донъяһының арҙаҡлы дин әһелдәре, шәйехтәр, ишандар һәм суфыйҙар менән аралаштыҡ. Уларҙың белдереүенсә, әҙәм балаһынан тыш йән эйәләре араһында "Аллаһ" һүҙен иң күп әйткәне ҡоштар икән. Ҡоштар тәүлегенә 100 мең тапҡыр Аллаһы Тәғәләгә зекер әйтә. Йән эйәләре араһында иң "ялҡауы" - ишәктәр, улар тәүлегенә 5 мең тапҡыр "Аллаһ" һүҙен ҡабатлай. Ә иң гуманлы, иң аҡыллы иҫәпләнгән кешеләр ғүмер буйы бер тапҡыр булһа ла үҙен яралтыусыны иҫкә алмауы бар. Ошо күҙлектән ҡарағанда, тере йән эйәләре араһында иң изгеһе - ҡоштар, шулай булғас, уларҙы атҡан кешенең ни өсөн йәлсемәүе лә аңлашыла. Бөгөнгө һөйләшеүгә тағы ла бер халыҡ мәҡәлен килтереү урынлы булыр ине: "Кәрәгең тирәгеңде йыҡтыра". Ҡышҡы селләлә яғыр утының, урманға барырға атың булмаһа, өйөңдө йылытыр өсөн йортоң янындағы һуңғы тирәкте лә йығаһың инде ул. Беҙ әлегә беҙгә һәйбәт, әлегә йәшәрлек эш хаҡы, ҡунырлыҡ мөйөшөбөҙ бар, тип, шул һуңғы тирәгебеҙҙе йығып көн итәбеҙ түгелме һуң бөгөн? Шул ваҡытта Ер шарының һөмһөҙ һыйыры - донъя капиталы, әкиәттәге аждаһа кеүек, еребеҙҙе, булмышыбыҙҙы, асылыбыҙҙы ҡуша йоторға самалай...**

**З. ЕНИКЕЕВ:** Әлбиттә, "Кәрәгең тирәгеңде йыҡтыра" мәҡәле бик тәрән мәғәнәгә эйә. Уны юридик яҡтан ҡарағанда, "иң һуңғы сара" йә "сараһыҙлыҡ ысулы" тип тә атарға булалыр. Диндә лә асығыуҙың һуңғы сигенә етеп үлмәҫ өсөн сусҡа итен ашау рөхсәт ителгәнен ишеткәнем бар. Ошо мәҡәлде беҙҙең сәйәсәткә күсереп ҡарағанда, минеңсә, беҙҙең тактика ошоға тиклем дөрөҫ бара, стратегия ла дөрөҫ ҡуйылған. Әммә урыҫ халҡында бик тапҡыр әйтелгән "Против лома нет приема" тигән мәҡәл дә бар. Хәҙерге хәлебеҙҙе аңлатыр өсөн мин Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда әйтелгән һүҙҙәрҙән дә тапҡырыраҡты таба алмайым. Бөйөк аҡыл эйәһе ошо көндәребеҙҙе алдан күргән кеүек. Беҙгә иң мөһиме халыҡты һаҡларға, бының өсөн милли интеллигенцияны үҫтерергә кәрәк. Ул фәҡәт милли тойғоло, башҡорт рухлы, шәжәрәһе өҙөлмәй һаҡланып килгән интеллигенция булырға тейешле. Беҙҙең шундай интеллигенция донъя интеллигенцияһы менән интеграцияла йәшәргә һәм донъя кимәлендә милләтебеҙ хоҡуҡтарын яҡларға бурыслы.

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Беҙҙең ғалимдар йәҙитселекте байраҡ итеп күтәрә башланы. Мин уның төп идеология булырына икеләнәм. Сөнки йәҙитселек класссик вариантлы башҡорт мәнфәғәтенә тура килеп бөтмәй. Әхмәтзәки Вәлиди йәш сағында күренекле суфый шәйехе, башҡорт тарихсыһы Морат Рәмзиҙең "Талфиҡ әль-әкбәр" тигән китабын уҡып, милли идеология менән янып йәшәй башлай. Беҙ, ғөмүмән, онотолған башҡорт эмигранты, ваҡытында Мәккәләге иң юғары уҡыу йортонда уҡытыусы Морат Рәмзи хаҡында нимә беләбеҙ һуң? Икенсенән, беҙҙең идеологтар Морат Рәмзи генә булмаған. Тарихсы Марсель Фархшатов фекеренсә, Венгрияла Ғәлимйән Тағандың 32 китабы үҙ тәржемәсеһен көтөп ята. Ҡыҫҡаһы, беҙгә үҙебеҙҙең тарихты яңынан ҡарап сығып, үҙҡимммәттәребеҙҙе, тактикабыҙҙы һәм стратегиябыҙҙы билдәләргә кәрәк. Кем ул бөгөн башҡорт? Бөгөн башҡорт милләт булараҡ трансформация осорон кисерә. Ошо процестарға етди анализ кәрәк.

90-сы йылдарҙа беҙҙең бер идеология бар ине - республикабыҙға суверенитет яулау. Кемдәрҙер урамда йөрөнө, кемдәрҙер сығыш яһаны, кемдәрҙер бер нәмә лә эшләмәне. Бөгөн иһә идеологик кризис кисереүебеҙ арҡаһында ни эшләргә лә белмәйбеҙ. Киләсәктә, кем белә, бәлки, географик сиктәрҙең әһәмиәте бөтөнләй юҡҡа сығыр. Илдәр һәм дәүләттәр араһындағы сиктәр киләсәктә бөгөнгө Башҡортостан менән Силәбе өлкәһе араһындағы сиктәр кеүек кенә тороп ҡалыуы бар. Сөнки транснациональ корпорациялар, кәрәҙле телефондар бөгөн үк сиктәрҙе тоймай. Бер үк ваҡытта йәшәү шарттарыбыҙ ҙа үҙгәрә. Әле ауыл ерендә беҙҙе элек милләт итеп һаҡлап килгән күп кенә ҡиммәттәр ирей, юҡҡа сыға. Халыҡ хужалығын ойоштороп тороусы колхоз-совхоздарҙың да юҡҡа сығыуы күп нәмә тураһында һөйләй.

Сағыштырыу өсөн ХХ быуат башында йәшәгән башҡорттоң көнитмешен генә алайыҡ. Ул саҡта башҡорт үҙе етештергәнде үҙе файҙаланып, шуның нигеҙендә автономлы йәшәй алған. Бер генә миҫал: беҙҙең атай-әсәйҙәр кәзә дебетен йә унан бәйләнгән шәл һатып ҡына ғаилә бюджетын шаҡтай яҡшырта инеләр. Һәр хәлдә, улар дебет, шәл һатырға ҡала баҙарына китһә, уларҙың ҡайтыуы беҙҙең өсөн оло байрамға әүерелә торғайны.

Бөгөн беҙгә маҡсаттарыбыҙҙы билдәләү өсөн ниндәй һөнәрҙәр менән булышырға кәрәк икәнлекте лә аныҡлау кәрәк. Йәһүдтәр бер ваҡытта ла ергә йәбешеп ятмаған һәм ятмай. Улар са-

**✓ *Хәҙер хатта балаларыңды нисек тәрбиәләүең дә, уларға ниндәй һөнәр, йүнәлеш биреүең дә - барыһы ла милли сәйәсәткә хеҙмәт итергә тейеш. Сәйәсәт менән шөғөлләнергә теләмәүселәрҙең яҙмышын башҡалар хәл итә.***

# Күтәрергә хоҡуҡлы,

## тамырҙары менән бәйле

уҙа, финанс өлкәһендә, медицина өлкәләрендә, йәғни мәңгелек һөнәрҙәр өлкәһендә эш итә. Мин беҙгә лә ерҙе ташлап китергә кәрәк, тип әйтмәйем, әммә хәҙерге технократик процестар ерҙә күп кешенең эшләүен талап итмәй. Беҙгә лә ерҙә эшләй торған кешеләрҙең нисбәтен яңынан ҡарарға кәрәк. XX быуат башында ҡалала башҡорттар бик аҙ ине. Унда бер нисә тапҡыр миграция ағымы күҙәтелә. Беҙгә, һис һүҙһеҙ, йәштәребеҙҙе сит илдәргә уҡырға ебәрергә кәрәк, тик аңында башҡорт рухы булғандарын ғына. Күп кенә егеттәребеҙ уҡып, кеше булып ала ла, халҡын оноңта.

Милләтебеҙ вәкилдәре киләсәктә ниндәй һөнәр вәкилдәре булыуы ла оло әһәмиәткә эйә. Сөнки киләсәктә милләтебеҙҙең идеологияһын улар билдәләйәсәк. Беҙ, башҡорт егеттәре, мәҫәлән, малай саҡта барыбыҙ ҙа офицер, хәрби кеше булырға хыялланабыҙ. Мин дә хәрби училищеға уҡырға ингән ерҙән, кире уйланым һәм ул саҡта дөрөҫ эшләгәнемә бөгөн килеп инандым. Башҡорттар араһынан генералдар, адмиралдар, хатта контрадмиралдар бар. Бер саҡ БДУ-ға ваҡытында һыу аҫты кәмәһендә капитан булыусы контрадмирал килеп китте. Һөйләшеп киттек. Баҡтиһәң, уның ҡатыны икенсе милләттән, балалары өсөнсө милләттән һәм шуның менән - вәссәләм. Йәғни, беҙҙең милләт өсөн ул контрадмирал кәрәкме-юҡмы? Ә беҙ: "Ана, Владивостоктан бер башҡорт генералы ҡайтҡан, әйҙә, ҡоролтайға делегат итеп һайлайыҡ", - тип зыҡ ҡубабыҙ.

**▸ Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда Рәсәйҙең үҙ сиктәрен мәңге бикле тота алмаҫы һәм беҙҙең тағын да күтәрелеп, киренән дәүләтселегебеҙҙе яулау мөмкинлегебеҙ булыры хаҡында белдерә. Уның ошо фекерен хәҙерге көнөбөҙгә лә һалып буламы? Йәғни, ошо этапта дәүләтселегебеҙҙе һаҡлау мөмкин булмаған осраҡта ла быным һуңынан мөмкин булыуына өмөт итеп булмаймы?**

**З. ЕНИКЕЕВ:** Нисек кенә ҡыҫырға тырышмаһындар, Рәсәй дәүләте унитарлығы оҙаҡҡа бармаясаҡ. Киҫкен үҙгәрештәр ҙә булыуы бар. Ошолай барһа, Алыҫ Көнсығыш Республикаһы барлыҡҡа килеүе мөмкин. Россель Урал Республикаһы Конституцияһын эшләп маташты. Был идея тере әле. Дәүләт Думаһында күп булырға тура килә, унитарлыҡ менән күптәр риза түгел. Бөтә губерналар, республикалар, крайҙар, өлкәләр килеменең 70 процентын Мәскәүгә ебәреп тора, уның ҡарауы, олигархтар икеләтә арта ғына бара. Хәҙер Рәсәй менән бер ил дә мөнәсәбәт ҡорорға теләмәй. Барыһы ла унан алыҫыраҡ булырға тырыша. Ни өсөн икәне аңлашыла.

Беҙгә тынысланырға, ҡулды төшөрөргә ярамай. Йәштәрҙе аңһыҙ сыуалыштарҙан һаҡларға кәрәк. Бары тик хоҡуҡ сиктәрендә, хоҡуҡ рамкаларында, цивилизациялы юлдар менән генә эш итеү зарури. Заманында Махатма Ганди Һиндостанды ошондай юлдар менән Англия колонияһы булыуҙан ҡотҡара. Рәсәйҙең барлыҡ региондарға ҡаршы алып барған сәйәсәтен бары тик колонизаторлыҡ сәйәсәте тип кенә атарға була. Был сәйәсәткә ҡаршы беҙ Рәсәйҙең башҡа субъекттары интеллигенцияһы менән берләшергә тейешбеҙ. Заманында Әхмәтзәки Вәлиди ҙә Рәсәйҙең демократик көстәре менән берләшергә ынтылған.

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Әхмәтзәки Вәлиди бик күп ваҡиғаларҙы алдан әйтә белгән, унда ғилми күрәҙәселек булған. Ул Рәсәйҙәге проблемалар менән халыҡ-ара ойошмалар барлыҡҡа килеп, шулар шөғөлләнәсәге хаҡында белдерә. Быныӊ дәлиле итеп Берләшкән Милләттәр Ойошмаһын алайыҡ. Икенсе бер фекере. Ул Рәсәй Афғанстанды үҙенең йоғонтоһона индерергә аҙаҡҡа хәтлем тырышасаҡ, ти. Дәлиле: СССР был илгә ғәскәр индерҙе.

***Беҙ бәләне юғарынан эҙләргә яратабыҙ. Күп кенә бәләләр үҙебеҙҙә ята. Бөгөн Мәскәүҙә йә башҡа урында ултырыусылар: "Был башҡорттарҙы, татарҙарҙы йә сыуаштарҙы нисек бөтөрөргә икән?" - тип уйланып ултырмай. Ана, татарҙар ошо йылдар эсендә үҙҙәрендә дәүләтселектәрен нығытыу нигеҙендә байтаҡ ҡына эштәр башҡарып өлгөрҙө. Раил Кузеев Башҡортостанда башҡорт потенциалының 35 проценттан да кәм булмауы хаҡында һүҙ алып бара торғайны. Беҙ йүнәлешле эшләй алһаҡ, тиҫтә йыл эсендә башҡорт потенциалын 50 процентҡа ла еткерә аласаҡбыҙ. Башҡорт имиджы күтәрелһә, беренсенән, икенсе милләткә ауышҡандар үҙ асылына ҡайтасаҡ, икенсенән, бер яғы башҡорт булған ҡатнаш никахлы ғаиләләрҙәге балалар беҙҙең позицияны һайлаясаҡ. Мин ҡатнаш никахлы ғаиләләрҙә тыуған балаларға йәлләп ҡарайым. Һорашһаң, уларҙың күптәре аныҡ итеп ниндәй милләткә ҡарауын әйтеүҙән тартына. Шул уҡ ваҡытта саҡ ҡына ҡылдарын тартһаң, Иван, Марияллары ла башҡорт позицияһына күсергә әҙер генә тора.***

Вәлиди кеүек шәхестәр кәрәк беҙгә, әммә ундай шәхестәр тәрбиәләнер мөхит юҡ әле. Уның ата-әсәһе ғәрәпсә, фарсыса белгән һәм ун йәшенә тиклем ул күп кенә телдәрҙе өйрәнгән. Бына бит нисек. Тимәк, бүтәндәр тел өйрәнеп йөрөгән ваҡытта Вәлиди инде ғилми хеҙмәттәр яҙырлыҡ булған. Беҙҙең мәғариф системаһы уның кеүек шәхестәр үҫтереүгә мөмкинлек бирмәй. Ул система, киреһенсә, кешене шәхес булараҡ юҡ итеүгә йүнәлтелгән.

Беҙ бәләне юғарынан эҙләргә яратабыҙ. Күп кенә бәләләр үҙебеҙҙә ята. Бөгөн Мәскәүҙә йә башҡа урында ултырыусылар: "Был башҡорттарҙы, татарҙарҙы йә сыуаштарҙы нисек бөтөрөргә икән?" - тип уйланып ултырмай. Ана, татарҙар ошо йылдар эсендә үҙҙәрендә дәүләтселектәрен нығытыу нигеҙендә байтаҡ ҡына эштәр башҡарып өлгөрҙө. Раил Кузеев Башҡортостанда башҡорт потенциалының 35 проценттан да кәм булмауы хаҡында һүҙ алып бара торғайны. Беҙ йүнәлешле эшләй алһаҡ, тиҫтә йыл эсендә башҡорт потенциалын 50 процентҡа ла еткерә аласаҡбыҙ. Башҡорт имиджы күтәрелһә, беренсенән, икенсе милләткә ауышҡандар үҙ асылына ҡайтасаҡ, икенсенән, бер яғы башҡорт булған ҡатнаш никахлы ғаиләләрҙәге балалар беҙҙең позицияны һайлаясаҡ. Мин ҡатнаш никахлы ғаиләләрҙә тыуған балаларға йәлләп ҡарайым. Һорашһаң, уларҙың күптәре аныҡ итеп ниндәй милләткә ҡарауын әйтеүҙән тартына. Шул уҡ ваҡытта саҡ ҡына ҡылдарын тартһаң, Иван, Мариялары ла башҡорт позицияһына күсергә әҙер генә тора.

**З. ЕНИКЕЕВ:** Миңә йыш ҡына дәүләт һәм муниципаль органдарҙың хеҙмәткәрҙәре алдында лекциялар яһарға тура килә. Шунда дәүләт теле булараҡ, башҡорт телен уҡыу-уҡымау мәсьәләһе күтәрелһә, мин уларға: "Һеҙҙең балалар киләсәктә уҡып кеше булырға теләһә, башҡорт телен белеүе өҫтөнлөк һаналасаҡ", - тиһәм, йөҙ проценты менән урыҫ булған аудитория ла был фекерҙе еңел ҡабул итә.

Шул уҡ ваҡытта баш ҡалабыҙҙа башҡорт милли интеллигенцияһының күпселеге торлаҡһыҙ интегә. Ниһайәт, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте инициативаһы менән уларҙың да проблемаһы хәл ителә башланы. Быйыл бына Өфө тирәһендә ауылдарҙа башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәренә йорт һалалар. Һәм ҡайһы берәүҙәр беҙҙе бында милләтселектә ғәйепләргә тотондо. "Ниңә башҡорттарҙы ғына унда йыяһығыҙ?" тип һорайҙар минән. Мин уларға: "Ә һеҙ башҡорт ихтилалдары ваҡытында Өфө тирәһендә йөҙ саҡрым радиусында барлыҡ башҡорт ауылдарын яндырғандарын беләһегеҙме? Беҙ шуларҙы аяҡҡа баҫтырабыҙ. Башҡорттар Ислам дине, урыҫтарҙың азатлығы өсөн ҡан ҡойҙо. Шуға күрә һеҙ бында башҡорттарға баш ҡала тирәһенә киренән йыйылырға ярҙам итергә бурыслыһығыҙ", - тип яуап бирәм. Был һүҙҙәремде аңлап, бик яҡшы ҡабул итәләр.

**▸ Әйтәйек, Татарстанда 16 мең башҡорт йәшәй. Шул уҡ ваҡытта көнбайыш Башҡортостандың шунсама халыҡ йәшәгән бер районында 30 татар телле мәктәп эшләй икән, ти. Логика буйынса беҙ Татарстанда ла 30 башҡорт мәктәбе асылыуын талап итә алабыҙ түгелме?**

**З. ЕНИКЕЕВ:** Был - хөкүмәттең эше булырға тейеш. Юридик яҡтан, закон йәһәтенән иһә быға нигеҙ һалынған.



**Ә. БОҪҠОНОВ:** Юридик яҡтан ҡарағанда, хәҙер беҙҙең өсөн бик уңайлы шарттар тыуҙы. Йәғни, бер ниндәй ҙә сикләүҙәр юҡ. Бөгөн Башҡортостанда башҡорт булыуы файҙалы. Быны аңлаған башҡа милләт вәкилдәре бар.

**З. ЕНИКЕЕВ:** Әле ауылдарҙағы күпселек халыҡ ике формация араһында тороусы маргиналдарҙы тәшкил итә. Беҙгә был хәлдән ҡотолор өсөн Рәсәй программаһына ярашлы казачествоны индерергә кәрәк. Беҙ шул нигеҙҙә генә ауыл йәштәрен бергә туплай аласаҡбыҙ. Башҡорт борон-борондан атлы казак булғанын да онотторға ярамай. Казачество - ул йәшәү рәүеше лә. Әйҙә, мал көтһөндәр, атҡа менеп, төрлө хеҙмәттәр алып барһындар. Казачествоға объекттарҙы, иген баҫыуҙарын, урмандарҙы һаҡлауҙы, урындағы тәртип һаҡсылары вазифаларын йөкмәтергә була. Уларҙы хатта предприятиеларҙың шәхси һаҡсылары итеп тә эшкә алырға мөмкин. Рәсәйҙең ҡайһы бер өлкәләрендә был тәжрибә бар. Уларҙың хатта урядниктары, зауряд хорунжийҙары бар. Эсеп, тыңламай йөрөүселәрҙе ҡамсы менән һуҡтырып торалар хатта. Кремлдә казачество эштәре буйынса идаралыҡҡа инеп, был турала белешеп сыҡтым. Ҡаршы түгелдәр. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында мин был хаҡта сығыш яһаясаҡмын. Беҙ, ғәҙәттә, ҙур идеялар хаҡында һөйләйбеҙ, бына ошондай халыҡты күтәрә торған сараларға бөтөнләй иғтибар итмәйбеҙ.

**▸ Тарихта шундай тенденция бар: IV быуаттан XVIII быуатҡа тиклем - империялар дәүере, XVIII быуаттан алып XXI быуатҡа тиклем - дәүләттәр дәүере, XXI быуаттан башлап милләттәр дәүере башлана. Тимәк, киләсәктә, һеҙ әйткәнсә, сиктәр юйылып бөткәс, һәр бер милләт үҙен һаҡлаһа - йәшәй ала, һаҡлай алмаһа - юҡҡа сыға...**

**З. ЕНИКЕЕВ:** Глобалләшеү милләттәргә был хаҡта саҡырыу ташланы, оран һалды. Тимәк, беҙ был осраҡта тарих һәм заман алдында һынау тотасаҡбыҙ. Был процесс Европала бара, хәҙер инде дәүләт сиктәре юҡҡа сыға башланы. Уның хатта бар сиктәрҙе үтә торған үҙ валютаһы - евро барлыҡҡа килде. Шул уҡ ваҡытта Евросоюзда телдәрҙе һаҡлаусы хартия эшләй. Әгәр ҙә Рәсәй ҙә әхлаҡи һәм юридик яҡтан Европа цивилизацияһы кимәленә етһә, ул үҙенең составындағы аҙ һанлы милләттәргә йөҙө менән бороласаҡ. Һәр хәлдә, Рәсәй мәҙәни Европа кимәленә күтәрелергә тейеш. Беҙ ошо кимәлдә фекер йөрөтә белгән милли кадрҙар тәрбиәләргә, уларҙы үҫтерергә тейешбеҙ.

**Ә. БОҪҠОНОВ:** "Һинең бер сикәңә һуғалар - ә һин, "мин толерантлы", тип әйтәһең дә икенсе сикәнде ҡуяһың, уныһына һуҡһалар - тағы ла "мин - толерантлы" тигән һүҙҙе ҡабатлайһың", - ти Рамаҙан Абдулатипов. Беҙ, ысынлап та, толерантлы милләт, әммә беҙҙә толерантлыҡ бер яҡлы ғына.

**З. ЕНИКЕЕВ:** Һәр бер кеше, башҡорт булараҡ, балаларын үҙ рухында тәрбиәләп, кеше итһә генә лә, ҙур эш эшләнер ине. Быңдай кеше ихтирамға лайыҡлы. Һин ҙур ғалим, депутат булып та йөрөргә мөмкинһең, әммә үҙеңдән туған телеңдә һөйләшкән балаларың һәм ейән-ейәнсәрҙәрең ҡалмай икән, был дәрәжәләреңдән ни фәтеүә?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сәйәсәт - бысраҡ эш, уның менән, ана, профессионалдар шөғөлләнһен, мин үҙ эшем менән булам, тип тә йәшәп булмай хәҙерге заманда. Әңгәмәлә ҡатнашыусыларҙың фекеренә таянып, шуны әйтергә була: хәҙер хатта балаларыңды нисек тәрбиәләүең дә, уларға ниндәй һөнәр, йүнәлеш биреүең дә - барыһы ла милли сәйәсәткә хеҙмәт итергә тейеш. Нимә тиҙәр әле: сәйәсәт менән шөғөлләнергә теләмәүселәрҙең яҙмышын башҡалар хәл итә.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Толомдары менән иҙән һеперер, иренең иңдәренә саң да ҡундырмаç, күҙҙәренә генә ҡарап торор, ни ҡушһа, шуны эшләр. Резеда ла кеше, уның да бәхеткә хаҡы бар.***



- Әйҙә, һөйөклөм, нимә генә ҡушһаң да, мин әҙер! Утҡа инергә бойор - инәм! Һыуға һикер тиһәң - һикерәм! Тамсы ла уйлап тормайым!

Ҡыҙ күҙ йәштәре аша йылмайҙы. Улар таҡырайып бөткән һуҡмаҡ буйлап йылғаға табан атланы. Илһам ҡыҙҙың нәҙек бармаҡтарын эләктереп алып, һаҡ ҡына үҙенең көрәктәй усына йомдо. Резеда ҡарышманы. Ул һүҙҙе нимәнән башларға белмәй аптыраны. Үпкәләтмәçлек итеп, нисек шыма ғына әйтергә? Ҡайһылай аңлатырға барыһын да? Бер нисә генә көн эсендә ул бит барыһын да яҡшылап уйлап, аңлап та етмәне. Моғайын, Илһам да шундай уҡ хәлдәлер. Киноларҙа ғына күрешәләр, шунда уҡ туй яһайҙар, ҡауышалар - рәп-рәхәт, еңел. Ә был бит ысын тормош.

- Илһам, ни... - Ҡыҙ тотлоҡто. Ҡулын егеттең усынан һурып алды ла, яр ситенә барып баçты.

- Аһ, мин, иçәр! Өшөйһөңдөр инде. Ҡана, пинжәгемде ябайым.

- Юҡ, юҡ, һыуыҡ түгел...

Егет уның һүҙҙәрен ҡолағына ла элмәне, пинжәген сисеп, ҡыҙҙың яурынына һалды.

- Бына шулай... Эх! Ошонда минең ғүмерем үтте лә инде! - Илһам аяҡтарын кирә баçып, ҡулдарын елкәһенә саҡмаштырып ҡуйып, күкрәк тултырып тын алды. - Әлдә бында төшөргә тәҡдим иттең әле! Уртаҡ тормошобоҙ ошо хозур урында башлана инде.

- Илһам...

- Туҡта, Резеда. Бына тыңла әле: төндөң тауышы бигерәк ирмәк бит ул.

Һин үҙең ирмәк, тип эстән генә көлөмһөрәне ҡыҙ, төн төн инде, уның ниндәй тауышы булһын! Илһам кәләшен арттан килеп ҡосаҡланы.

- Тыңлай беләһеңме?

- Беләм шикелле, - Резеда көлдө.

- Улайһа, күҙҙәреңде йом, барлыҡ уйҙарыңды башыңдан сығарып ташла, тынлыҡҡа ҡолаҡ һал, нимә ишетерһең икән...

Йәш кәләш мейеһендә ҡайнаған ҡаршылыҡлы уйҙарынан тиҙ генә ҡотола алманы, фекерен туплай алмайынса яфаланды.

- Тыныслан... Һиңә рәхәт... Ҡоштар тауышын ишетәһең... Йылға ағышы...

Тиҙҙән, ысынлап та, күҙҙәрен йомоп, Илһамдың тауышына буйһонорға тырышҡан Резеданың ҡулдарын, аяҡтарын хәлһеҙлек биләне. Ҡайһылай рәхәт! Илһамдың йылы ҡосағында сихри бер донъяға остомо ни! Ишетә, ишетә ул төндө! Йә, хоҙайым! Иçерергә бер ниндәй ҙә шарабың кәрәкмәй! Бындайҙы Резеданың тәүләп татыуы... Илһамдың көслө ҡулдары, ҡоштар һайрауы, сылтыр-сылтыр йылға ағыуы, сиңерткәләрҙең сырылдауы, алыçта эттәр өрөүе, ҡайҙалыр матай, ҡайҙалыр трактор, машина тауыштары. Шифалы, наҙлы һауа. Бына ҡайҙа ул ожмах!

- Бына ошонда үтте минең бала сағым. - Илһам әкрен генә тауыш менән Резеданың ҡолағына шыбырланы. - Түбәндәрәк малайҙар менән һыу инә торғаныҡ. Күҙ алдыңа килтерәһеңме? - Резеда "Эйе" тигәнде белдереп, башын ҡаҡты. - Алла бирһә, иртәгә көндөҙ ул яҡтарҙы алып барып күрһәтермен, ә икенсе йыл икәүләп һыу инербеҙ, әйме?

- Уй, мин һыуҙан ҡурҡам да ул! - Резеда бала шикелле ҡыуанып көлдө. - Беҙҙең ауылда йылға былай ҙур түгел бит. Бәләкәй генә. Тауыҡ кисеп сығырлыҡ.

- Ҡайғырма! Мин һине өйрәтермен. Ә балаларыбыҙҙы икәүләп өйрәтербеҙ...

- Балаларҙы? Ниндәй балаларҙы? - Ҡыҙ ялп итеп Илһамға башын борҙо.

- Беҙҙең балаларҙы. Мин бишәү булыуҙарын теләр инем.



Гөлнара МОСТАФИНА

# ҠАЯҒА ҺЫЙЫНҒАН ҠАЙЫН

(Повесть)

- Бишәү? Һин нимә? Берәү булһа ла бик шәп беҙҙең йәштә!

- Ярай, уныһын аҙаҡ күҙ күрер. Әлегә һине үҙем менән таныштырыуымды дауам итәм. Белгең килһә, трактор тәгәрмәсе камераһына ултырып, ағып китә яҙғайным бала саҡта. Шул хәлдән һуң миңә "моряк" тигән ҡушамат та тағылып ҡалды.

- Бигерәк күңелле үткән шул бала сағың! - Резеда ҡурҡыуынан ни эшләргә белмәй аптырап ултырған малайҙы күҙ алдына килтереп, рәхәтләнеп көлдө.

- Ҡайһылай матур көләһең!... - Илһам уға һоҡланып ҡараны.

Ҡыҙыҡай ҡапыл көлөүенән туҡтаны, ҡыҙыҡһынып, Илһамға ҡараны:

- Шунан? Тағы ниндәй эштәр боҙа торғайның бала саҡта?

- Әсәйҙәрҙән әрләнә-әрләнә балыҡ тота торғайныҡ.

- Ә ниңә әрләнеп? Балыҡ тотҡан өсөн әрләйҙәрме ни?

- Малайҙарың булып, ҡыҙыу эш ваҡытында ҡармаҡтарын тотоп юғала башлаһалар, ни эшләрһең икән? Шунда ҡарарбыҙ! Йә булмаһа, тәҙрәңдәге селтәр менән селбәрәләр һөҙһәләр...

- Һа-һа-һа, ул ваҡытта әлегә инде!

- Бына шул-шул!...

Рәхәт ине Резедаға Илһам янында. Бына ошо ябайлығы менән арбағандыр ҙа инде. Юҡһа, танышҡандың икенсе көнөнә өйләнешергә һүҙ ҡуйышмаçтар ине. Илһамдарҙың ауылына тәүге көндән уҡ ғашиҡ булды Резеда. Урман-тау араһынан һыҙылып ятҡан юл буйлап килеп инеүгә һине бейек ҡая ҡаршылай. Башыңды күтәрһәң, кәпәсең төшөп китерлек. Ҡаяны ла ниндәй бит әле: кемдер яртыһын тигеҙ генә итеп киçеп алған төçлө. Аçта уға һырылып тигәндәй йылға аға. Әле улар ауылдың икенсе яҡ осонда тора. Бында тигеҙлек. Әммә ифрат матур - әҙ генә лә барырға түгел - Ҡасим тауы башлана. Уны ҡая менән сағыштырып булмай, әлбиттә. Уның ҡарауы, емеш-еләккә бай, йәнлек-хайуандар ҙа оçрап ҡуя тиҙәр унда.

Ҡыҙ уның йылы, көслө ҡосағына бына шулай һыйынып торор ҙа торор ине, әммә Илһам әкрен генә уны ауыл яғына йүнәлтте:

- Барыһын да бөгөн һөйләп бөтһәм, ҡыҙығы ҡалмаç. Иртәгәгә, унан һуңға ҡалдырайыҡ... - Бер аҙ баргас. - Ә! Бая миңә нимәлер әйтергә теләгәйнең шикелле? - тип Резеданы күктән ергә төшөрҙө. Әммә ҡыҙҙың әлеге мәлдә үҙенең күңелһеҙ хәбәре менән Илһамдың да, үҙенең дә кәйефен төшөргөһө килмәне. Ярай, тип уйланы ул эстән генә, нимә булһа ла булыр, иртәгә... Ә әлегә... бәхет даръяһында йөҙһөн әле. Уның вайымһыҙ ҡараштарында тәүге тапҡыр нур саҡҡылары күренде бит. Нисәмә йылдан һуң тәүләп элеккесә, бер ҡайғыһыҙ һәм ғәмһеҙ рәхәтләнеп көлә алды. Илһамдың йылы ҡосағы уны тамам иретте. Юғиһә, бындай наҙлы мөнәсәбәтте онотоп, роботҡа әйләнә башлағайны ла баһа! Әйтһәләр - эшләй, саҡырһалар - бара, ҡыуһалар - китә. Әле бына Динә менән осрашҡас, Илһам менән танышҡас, йөрәгендә ниндәйҙер осҡон ҡабынғандай булды, уйларлыҡ, фекерләрлек, тирә-йүнендә нимәләр булып ятҡанын күрерлек хәлгә килде. Ошоға тиклем бындай ҙа туң йөрәк менән нисек йәшәй алған? Әле кисергәндәре ни бары төш кеүек булып, таңға юҡҡа сығып, алдағы тормошо өр-яңынан башланмаçмы? Резеданың башынан бер-береһенә бәйләнмәгән уй артынан уй ағылды. Кешене яҙмыш үҙе йөрөтә, Резедаға ла ошонда килергә, Илһам кеүек яҡшы кешегә кейәүгә сығырға яҙғандыр.

Ынйыбикәләрҙең йорто ҙур. Замансалап, ике ҡатлап төҙәгәндәр. Ире менән икеһе пар килгәндәр шул, аҡса эшләйбеҙ, донъя малы йыябыҙ, тип тырышып торалар. Резедаға үҙенең ҡыçынҡы бер бүлмәле фатиранан һуң был тотош һарай кеүек күренде. Илһам, ғәҙәтенсә, юлында һәр осраған нәмә менән кәләшен таныштыра барҙы:

- Бына быныһы - күтәрмә, таныш бул. Ошонда аяҡ кейемдәрен сисәләр...

Уның һәр һүҙенән ҡыҙыҡ табып ҡыуанған Резеда был юлы ла сыңғырлатып көлөп ебәрҙе.

- Уныһын ғына мин дә беләм, айҙан төшмәгәнмен дә.

- Ә минең өсөн күктән төшкән йондоҙ һин. Йондоҙом минең!

Наҙ менән әйтелгән был һүҙҙәр Резеданың йәнен иркәләй. Уға рәхәт!.. Еңелсә башы әйләнә. Тағы, тағы әйттергеһе килә. Әммә шул уҡ ваҡытта күңел төбөндәге болоҡһоу уйҙары янынан ҡалҡып сыға.

- Илһам, һин бит мине бөтөнләй белмәйһең, нисек улай тип әйтә алаһың? Танышыуыбыҙға ла бер нисә генә көн... - Резеда бер аҙ борсолоп, күтәрмәгә менде.

- Ни эшләп белмәй ти? Һин - донъялағы иң матур, иң яҡшы, иң изге кеше! - Илһам уны ҡапыл күтәреп алды. - Һине ғүмер буйы бына ошолай ҡулымда күтәреп кенә йөрөтәрмөн!

Әле генә бар кәрттәрҙе лә асып: "Ғәфү ит, беҙҙең өйләнешеү яңылышлыҡ булды",- тип, ҡойроҡто һыртҡа һалырға әҙер ҡыҙ тағы өндәшмәй ҡалды. Уның ғүмеренең өр-яңы бите асылды, өр-яңы тормош башларға тора. Барыһы ла яҡшы булһын өсөн тырышасаҡ ул. Ныҡ тырышасаҡ. Аллаһы Тәғәләнән яңылышлыҡтары өсөн ярлыҡауын үтенәсәк. Толомдары менән иҙән һеперер, иренең иңдәренә саң да ҡундырмаç, күҙҙәренә генә ҡарап торор, ни ҡушһа, шуны эшләр. Резеда ла кеше, уның да бәхеткә хаҡы бар. Ҡәйнәһе йортонан сығып йөрөмәç, Өфөгә аяғын да баçмаç. Әсәһенә лә онотҡанда бер генә ҡайтып әйләнер. Ҡыҙҙарын күрергә теләһәләр, үҙҙәре килерҙәр. Бына шул! Инде фекерҙәрен бер төйөнгә тупланы шикелле. Нисә көндәр тоноп торған мейеһе асылып, алдында яҡты юл күренгәндәй булды. Иренең муйынына һарылған килеш күккә ҡараны. "Рәхмәт һиңә, Хоҙайым, рәхмәт ай-йондоҙҙарым! Мин дә хәҙер йондоҙ бит әле, Илһамдың йондоҙо!" - тип бышылданы.

Резеда иртә уянды. Уянды, тиеү дөрөç тә түгелдер, төнө буйы керпек тә ҡаҡманы. Яҡтырып бөткәс, бер аҙ серем итеп кенә алды. Әле күҙҙәрен асты ла, кире йомдо, иркәләнеп урынында кирелде. Аһ, ҡайһылай рәхәт! Бер ҡайғы юҡ, борсолоуҙар артта тороп ҡалды. Алда - яҡты көндәр! Ул бәхетле! Йә, Хоҙайым, күҙ генә тейеп ҡуймаһын! Эргәһендә бер нәмә белмәй йоҡлаған иренә оялып ҡына күҙ һалды. Ниндәй матур, һөйкөмлө ул! Тигеҙ тын алыу ыңғайына танау япраҡтары әле асыла, әле ябыла. Керпектәре лә оҙон икән. Күҙҙәре... һоро төçтә ине булһа кәрәк. Резеда уның йөҙөн күҙ алдына килтереп йылмайҙы. Ҡуйы ҡара ҡаштары, танау башланған ергә тиклем һуҙылып, икеһе бергә ҡушылған. "Уның береһе - мин, береһе - ул", тип һыйпарға үрелде лә, үҙенән үҙе оялып, ҡулын тартып алды. Уф, бигерәк йәш ҡыҙ кеүек ҡыланам, тип үҙен битәрләп алды. Тәүләп ир күреүеме ни? Улай тиһәң, элек күрҙеме ни уларҙы? Түшәк, түшәк... Башҡа бер нәмә лә белмәне ир тигән әҙәми заттар менән. Ә бындайҙы, ысын һөйөүҙе, ысынлап та, тәүләп татыуы. Тәүге мөхәббәте Ирғәлене һанамағанда. Уныһы ла "әҙәм аҡтығы" булып сыҡты! Алдаҡсы, ҡурҡаҡ! Иçенә төшөргөһө лә килмәй. Хәйер, уның был яҡты донъянан китеүенә лә быйыл биш йыл. Кешене лә бәхетле итмәне, үҙе лә бер рәхәтлек күрмәне был тормошта. Эт типкеһендә йөрөп үлде. Илһам менән сағыштырһаң, икеһе ер менән күк араһы. Илһам, ана, ниндәй мыҡты кәүҙәле, нимә теләгәнен үҙе белә, дөрөçөн ҡырҡа әйтә! Бындай ир эргәһендә, әлбиттә, үҙеңде ышыҡта тояһың. Бер нәмә лә ҡурҡыныс түгел.

Улар йоҡлаған бүлмә йорттоң икенсе ҡатында. Өй эсе яп-яҡты. Стенаның ярты өлөшөн ауылға килеп ингән юлсыларҙы, ҡунаҡтарҙы ҡаршы алып торған ғорур ҡая һүрәте биләй. Уны шунда уҡ таныны Резеда. Берәй рәссам төшөрҙөмө икән? Әллә үҙҙәре шулай оçтамы? Ана бит, йортто ла былай-алай итеп һалып ҡуйғандар. Кешеләр йәшәй белә. Ә Резеданың күпме ғүмере заяға үткән. Ҡайтарып булһын ине ул мәлдәрҙе, белер ине нисек йәшәргә. Әллә барыһы ла яңынан ҡабатланыр инеме? Яҙмыштан уҙмыш юҡ, тиҙәр бит. Резеда үрелеп тәҙрәгә күҙ һалды. Ана, әлеге ҡая! Ынйыбикә апайҙарының ҡаршыһында ғына бит. Аçта талғын ғына йылға аға. Ожмах! Теге рәссам нәҡ ошонан ултырып төшөргән, күрәһең. Терһәгенә таянған килеш, оҙаҡ күҙен ала алмай һоҡланып ятты Резеда. Унан күҙе тәҙрә төбөндә ултырған сәғәткә төштө. Сәғәт ете! "Кисә нимә тип һүҙ бирҙең әле үҙеңә?" тип шелтәләп алды ҡыҙ үҙен. Килен кеше 7-гә саҡлы йоҡлап ятырмы? Ҡәйнәһе иртүк тороп, һыйырҙарын күптән һауып, көтөүгә оҙатҡандыр инде, ә ул йоҡо һимертә. Һыйыр, тигәндән, ауылдан сығып киткәне бирле һыйыр имсәген тотоп ҡарағаны юҡ. Һауырға онотоп бөтмәнеме икән? Оятҡа ҡалып тормаçмы? Ул, ирен уятмаçҡа тырышып, һаҡ ҡына урынынан торҙо. Туй күлдәген эләктерә һалып, аяҡ остарына ғына баçып, ишектән сыҡты. Өçкө ҡатта улар йоҡлаған бүлмәнән тыш тағы ике бүлмә бар икән. Балаларыныҡылыр. Баçҡыс янындағы ишек асыҡ тора. Зал, ахырыһы. Тауыш-тын ишетелмәй. Береһе лә өйҙә юҡмы икән ни? Әллә йоҡлайҙармы? Тышта һыйырҙар, быҙауҙар мөңрәгән, ҡаҙҙар ҡаҡылдаған, сыбыртҡы шартлатҡан тауыштар ишетелә. Моғайын, һарай тирәһендә йөрөйҙәрҙер.

**(Дауамы. Башы 20-се һанда).**

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ...
## катмарлы фекерҙәре...

**Минең ауыҙымдан ишеттерәм тигән һүҙҙәрен әйттереп бөтөрмәйенсә, Хаҡ Тәғәләм телемде тыймаҫ, күҙҙәремде йомдормаҫ, аңымды томаламаҫ, сөнки ысын тормош ягымлы һүҙҙәр күп ерҙә түгел, ялған һүҙҙәр әҙ ерҙә! Амин, шулай булһын!**

### Еңеллектә егетлек кәрәкмәй

Еңеллек, етешлек көҫәү ихтыяжы һәр тере йәнгә хас тойғолор, сөнки һәр кемебеҙ еңеллеккә анһат ҡына бирелеп бара. Күп ваҡытта яһалма, ваҡытлыса ғына еңеллек ләззәтен татыу өсөн дә, уның ниндәй һөҙөмтәләргә килтеререн уйлап та бирмәй, күҙҙәрҙе йомоп, хистәр ҡосағына ташланабыҙ, йәнәһе, бөгөн йәтеш, рәхәт булһа - булды! Ләкин"ҡуктән төшкән" яһалма еңеллек күп осраҡта уйламаған, көтмәгән юғалтыу, ҡайғы-хәсрәттәргә тарыктыра әҙәм балаһын. Хайран ҡалырлыҡ: ундай хәлдәр һәр кемебеҙҙең башынан үткән, ләкин беҙ йә фәһем ала белмәйбеҙ, йәиһә белмәмешкә һылтанабыҙ!

Яман ғәҙәттәре тоҡомоноң тамырҙарын ҡоротоуы ихтимал икәнен төҫмөрләү генә түгел, аңлай, ләкин үҙен тыя алмай, ихтыяр көсө етмәйҙер, күрәһең. Киреһенсә, үҙ башына яңынан-яңы ғәжәп ғәләмәттәрен уйлап сығарып ҡына тора. Яһалма ғәҙәттәре ҡайғы-хәсрәттәрен еңел кисерергә, арыу-талыуҙарын еңел күтәрергә ярҙам итә, йәнәһе. Аҡыл кешегә үҙен аҙҙырыр, ағыулар өсөн бирелгән, тип уйларһың. Шулай булмаһа, Ер йөҙөнән үҙен ҡырып бөтөрөрлөк яңынан-яңы көслөрәк ҡорал төрҙәре, химик ағыуҙар уйлап табыуын, тере йәндәрҙә тәжрибәләр үткәреүен һәм уларҙы бар әҙәм затын юҡ итерлек күләмдә етештереүен башҡаса нисек аңлатырға була?

Еңеллектә йәшәү ғәйеп түгел, ләкин шып-шыма ерҙә осабыҙға шырау табырға беҙгә ҡуш! Әҙ генә ваҡыт татыулыҡта, именлектә әҙәмсә йәшәй башлаһаҡ, әллә ҡайһы арала осабыҙға яңы сиҡан сығырға әҙер тора. Шул сиҡанды ярһытырға сыпрандап осло шырау әҙләй башлайбыҙ, шикелле. Әҙәм заты бөгөнгә тормошта бәхетле йәшәүгә өлгәшеү, киләсәк быуынға лайыҡлы йәшәү шарттары тыуҙырыу менән бер рәттән, үткәндәренә баһа биреп, фәһем алып, холҡон тәҙәтә торған урынға, тарихын тәҙәтеп, ҡиәфәтен үҙгәртеп, һәйбәт булып күренергә маташа. Кемде алдайҙыр? Сәйәсәт, көнкүрешендәге мәнфәғәттәрен яңынан ҡороп, камиллаштырһа - бер хәл, аптыраған өйрәк арты менән һыуға сума, тигәндәй, теле, мәҙәниәте, йола, ғөрөф-ғәҙәттәре менән тәжрибәләр үткәреүҙән дә тартынмай.

Һөйләү телебеҙҙә генә алайыҡ. Халыҡты халҡ, ҡатын-ҡыҙҙы хатынҡыҙ, тип тә баш ҡатырҙылар заманында әрһеҙ алдан йүгереүселәр. 50-се йылдарҙың матбуғатын ҡараһаң, һөйләмдең яртыһы урыҫса һүҙҙәрҙән тора. Тимәк, шул мәлдә үк ике телде дөйөмләштереү башланған. Заманында "арҙаҡлы" тел белгестәре, әҙәбиәтселәр ҙә был "алдынғы үҙгәрештәр"ҙең иң алғы сафында барғандыр инде. Шул унай менән файҙаланып, әллә кемдәр, әллә күпме "фәнни" бейеклектәр, бөйөклөктәр яулағандыр, шунһыҙ булмағандыр, ай-һай... Шуның һөҙөмтәһендә хәҙер күптәребеҙ русса уйлай, фекер йөрөтә, әгәр башҡортса һөйләргә тура килһә, руссанан башҡортсаға тәржемә итеп һөйләйбеҙ. Һөйләгәндә рус һүҙенең тәржемәһе ҡапыл иҫкә килмәһә, мейебеҙҙе артыҡ яҙалатмай, русса әйтәбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Хәҙерге буталсыҡ, күп осраҡта мәғәнәһеҙ, айышһыҙ һаҡау телебеҙ шулай барлыҡҡа килгән дә инде. Әгәр тыумыштан бирелгән әсә телендә уйлап һөйләшһәк, йәнебеҙҙе, аңыбыҙҙы йәберләп, көсләп яҙалатмаҫ инек, сөнки күңелдәге телдән һүҙҙәр үҙенән-үҙе ағыла. Хаталар өҫтөндә эшләйбеҙ, тип, комиссиялар ойоштороп ҡарайыҡ. Ләкин бөтә изге уйҙарҙы, әлеге лә баяғы, эшкә еңел-елпе ҡарау касафаты юҡҡа сығара ла ҡуя! Хәбәрҙе мул һөйләйбеҙ, вәғәҙәләр бирәбеҙ ҙә, вәссәләм! Еңел генә әйтелгән һүҙҙәрҙең, бирелгән вәғәҙәләрҙең хаҡы билдәле...

Ике-өс быуын дәүерендә тел, рух, мәҙәниәт, йәҙ, буй-һын менән бер рәттән, милләттең үҙенсәлеген билдәләгән исемдәребеҙгә еңел-елпе ҡарауыбыҙ һөҙөмтәһендә күпме мосолман балаһы өсөн изге шәжәрә ағастарының ботаҡтары зарланып, зарарланып, һулып бөтөр икән? "Яңы көн талабына ярашлы" исемдәргә үҙ милләтен, үҙ тоҡомон һанға һуҡмағандар йәки үҙенең телен, үҙенең асылын танымаған маңҡорттар ғына түгел, кемлеген яҡшы белгән башҡорттар ҙа еңел күсте. Сөнки милли үҙенсәлектәребеҙҙе яҡлау, һаҡлау өсөн талап ителгән йән, аң көсөргәнешенән анһат ҡотолоу сараһын сит-ят йоғонтоға еңел бирелеүҙә күрәбеҙ. Еңеллеккә егәрлелек кәрәкмәй! Бигерәк тә аумаҡай, тотанаҡһыҙбыҙ шул. Ҡатмарлы тормош шарттарына еңел яраҡлашыу, бәлки, ҡайһы бер осраҡтарҙа һәйбәт сифаттыр ҙа, ләкин ярамһаҡланыу түгел. Тағы күпме быуын балалары хәҙерге ят исемдәргә гәрләнепме, ләгнәтләнепме иҫтәрендә һаҡлар? Шөкөр, бөгөн ул яңылыштан әкренләп кенә, шыуышып ҡына булһа ла, сығып киләбеҙ шикелле, күҙ теймәһен! Ләкин изге шәжәрәләребеҙҙән ят исемдәрҙе еңел генә юйып ташлай алмаҫбыҙ. Телебеҙ ярлылығы аралашҡанда һиҙелһә, рухыбыҙ яралы булыуы тарҡаулыҡта сағылыр, ә ят исемдәр шәжәрәләрҙә ярылып ятыр. Улар, бәлки, киләсәктә варисҡтарыбыҙҙы ғәмһеҙлектән иҫкәртеү һәйкәле булыр. Был ғәмһеҙлек ауырыуынан камил һауыҡҡанға тиклем, исмаһам, уҙамандарыбыҙҙың "алдынғы алдан йүгереүселәре" килеп сыҡмай торһа ғына ярар ине, тип теләйек әлегә.

Милләтебеҙ өсөн ифрат мөһим икенсе бер сетерекле мәсьәләгә тура ҡарайыҡ. Башҡорт егет, ҡыҙҙары башҡа халыҡ вәкилдәре менән дә ғаилә ҡора. Ҡатнаш ғаиләләрҙә ике яҡтың да йола, ғөрөф-ғәҙәттәре тигеҙ хөрмәт ителһә, ҡана ла һүҙ! Ғәмәлдә, был тигеҙлек беҙҙең файҙаға түгел: беҙҙекеләр "безнеке"ләрҙән еңел генә еңелеп, тиҙ арала икенсе арбаға күсеп ултыра. Ысынлап та, үҙендеке өсөн көрәшер кәрәк, ә былай, ризалаштың да ҡуйҙың... Анһат бит! Беҙҙең ауылда борондан урыҫтар йәшәне. Бөтәһе тип әйтә алмайым, ләкин күптәре башҡортса таптаҙа һөйләште. Бер кем уларҙы көсләп уҡытманы, өйрәтмәне. Улар үҙ теләге менән үҙҙәренең мәнфәғәттәрен яҡлар өсөн, келше араһында ала ҡарға һымаҡ аңра булмаҫ өсөн, үҙҙәрен ауыл тормошонан мәхрүм итмәҫ өсөн өйрәнделәр телде. Телде, йолаларҙы белеп, ихтирам итә белеүҙән арҡаһында аҫаба халыҡ менән яҡын аралашып, тигеҙ, татыу йәшәнеләр. Ауылыбыҙға татар кәләштәр алып ҡайтыусы ажар егеттәр ҙә булды, ләкин гүмеремдә ул килендәрҙең береһенең дә башҡортса һөйләшә башлағанын ишетергә насип булманы. Быны ниндәй көслө халыҡ! Ҡайҙа, кем менән йәшәһә лә, үҙенекен һүҙ итә беләләр! Һоҡланырға, көнләшергә генә ҡала беҙгә...

Ҡайһы бер тәкәббер ҡәрҙәштәребеҙ үҙ мәҙәниәтенән, үҙ халҡынан ситләшкән мәлдә, башҡа аҡыллы милләт вәкилдәре беҙҙең бай рухиәтебеҙгә, бай мәҙәниәт хазиналарына ҡағылып, һйыныып, күңелдәрен байытлар, йән ләззәте кисерәләр. Мәрйә ҡыҙы Галина Сват күкрәгенә һалып ҡурайҙа уйнағанда, немец Вернер йәне менән бирелеп оҙон көйҙө йырлағанда йөрәкһенеүҙән алҡымдар ҡыҫылып, күҙгә йәштәр килә. Әллә мин генә шулай нескә хисле кешеменме икән? Ул һәләттәре менән милләттәштәренән ихтирам ғына түгел, оло абруй яулай улар, башҡалар күтәрелә алмаҫ үрҙәргә артылалар, үҙ булмышынан да юғарыраҡ өҫтөнлөккә эйә булыу бәхетенә өлгәшәләр.

Әйе, бөгөн башҡортлоғона һүҙһеҙ ышанған халыҡ йәшәгән райондарҙың, ҡайһы бер башҡорттар күберәк йәшәгән төбәктәрҙең балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә башҡорт теленә иғтибар артыуы ҡыуаныслы хәл. Әммә, был саралар ғына етерлек тип тынысланырға иртәрәк. Телебеҙ, ысынлап та, халыҡты берләштерер көскә эйә булыуын теләһәк, көнкүрешебеҙҙә телебеҙгә ихтыяжды даими тойорға тейешбеҙ. Әгәр ҙә ошондай аныҡ маҡсатлы сәйәсәт ҡыҙыҡһындырыу тыуҙырһа, ватандаштарыбыҙ көсләмәйенсә лә телде белергә ынтыласаҡ. Ҡайһылайтып, ниндәй ысулдар менән быға өлгәшергә? Унаһы инде фән, ғилем әһелдәренең, ҡоролтай вәкилдәренең, ил етәкселәренең етди хәстәрлегенән тора. Ысынлап та, был хәстәрлек дәүләт сәйәсәте булһын ине. Ошо фекер мотлаҡ яңғырарға тейеш буласаҡ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында.

Бөгөн тырышып-тырмашып үҙ телендә һөйләшергә өйрәнгән күп башҡорт балаларын өлкәндәр үҙҙәре "юлдан яҙҙыра" икәнен беләбеҙ. Балаларҙы үҙ асылынан яҙҙырыу юлы бер - ул дөйөм балалар баҡсалары, ундағы бөтә балаларға бер төрлө ҡараш, бер төрлө талаптар. Ата-әсәһе эргәһендә үҙ телендә матур ғына тәтелдәп йөрөгән бала баҡсаға барһа, үҙ телен оноторға мәжбүр. Ҡәҙерле баламды ике телдә һөйләштереп "ыҙалатҡансы", тиҙәр ҙә, атай-әсәйҙәр ят тел файҙаһына туған телде ҡорбан итеп, үҙҙәре еңел генә "пап", "мам"ға әйләнә. Ғәмәлдә, ата-әсә, балаһын йәлләгән булып, үҙенә еңеллек көҫәй, сөнки баланың теләген, ризалығын бер кем дә һорап тормай. Мәктәптә, тыумыштан йәненә һалынған телен үҫтереү урынына, сит ил телдәрен көсләп өйрәтеп, бала әсә телендә һөйләшеү хоҡуғынан мәхрүм ителә. Баланы йәлләү, ҡурсалау түгел был, киреһенсә, яфалау, сөнки уның йәне кем икәнен белмәй ыҙалай, икеләнеүҙәрҙә йонсой. Ә йонсоу йәндең йүне лә булмай, юлы ла уңмай. Үҙ мөхитендә, үҙ булмышына тап килеп, үҙ телендә иркенләп һөйләшеп, ғүмерен сәф үҙе булып рәхәтләнеп йәшәр ине лә, мөхитенән көсләп ситләтелгәс, телен йүнләп белмәгәс, ояла. Ағасты тамырҙары түгел, йәшәгән шарттары кәкерәйткән кеүек, әҙәм балаһын да йәшәгән мөхите ҡулайлашырға мәжбүр итә. Бала, ирекһеҙҙән, йәненә хас булмаған ҡағиҙәләргә яраҡлашып, баҙнатһыҙ, ҡыйыуһыҙ булып үҫә, ят ғүмерҙә йәшәүгә дусар ителә. Кешенен фекер йөрөтөү һәләте лә туған телен белеүгә тығыҙ бәйле икәнен яҡшы беләбеҙ. Тимәк, балаларыбыҙҙы тәрән, төплө фекерләү һәләтенән аңлы рәүештә яҙҙырып, күрәләтә, яртыаҡлыға әүерелдерәбеҙ түгелме? Яртыһын русса, яртыһын башҡортса уйлағас, шулай була бит! Тоғро һүҙгә ҡаршы дәлил юҡ!

Иғтибар иткәнегеҙ бармы икән, 30 йәшенә тиклем русса ғына аралашып йөрөгән егеттәрҙә, ни хикмәттәндер, ҡапыл башҡортса һөйләшеү ихтыяжы тыуа. Үҙемдең һәм таныштарымдың балалары менән аралашыуҙан тойҙом был бик фәһемле һәм өмөтлә күренеште. Ниңә үҙҙәренә ауырлыҡ тыуҙыралар икән? Ниндәй сәбәптән был ихтыяж тыуа? Кешеләр һәр ваҡыт үҙенә еңеллек көҫәй, тип һөйләнек, ә бында - киреһенсә. Тимәк, эске булмышы кешенән, ҡасан булһа ла, үҙ асылына ҡайтыуын талап итә. Бер миҙгелгәме, әллә ҡалған бөтә ғүмеренә етерлек буламы икән ул ихтыяж? Кем белһен. Үҙ асылын аңлар йәшенә еткәс, үҙенең ни урыҫ, ни башҡорт түгел икәнен аңлап, тәбиғи булмышына ҡайтырға, йән-фигелен үҙгәртеп ҡарарға батырсылығы етә, ә сабырлығы, дәрте, ныҡышмалығы етерме икән? Етер, әгәр иләндә туған телгә ихтирам булһа! Етер, әгәр бөтә башҡорт егеттәре уның кеүек үҙендә ҡыйыу алға атларға көс, ғәйрәт, сәм тапһа!

Был хәл минән генә тормай, мин бер үҙем нимә ҡыла алам, мин һаҡау һөйләшкәндән генә донъя үҙгәреп китмәҫ әле, тигән һымаҡ һылтау табып, үҙҙәрен йыуатып ғәмһеҙ йөрөүселәр ныҡ яңылыша. Бөгөнгө үҙебеҙҙең хәлебеҙгә беҙ, башҡорттар, бөтәбеҙ ҙә яуаплы! Бер милләттәшебеҙҙең генә лә тауышын һанға һуҡмау беҙҙең өсөн үлемесле, сөнки беҙ унар миллионлы халыҡ түгел. Бөгөн үҙебеҙҙең яҙмышыбыҙҙы: телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, рухиәтебеҙҙе, йөҙәбеҙҙе һаҡлау һәр беребеҙҙән тора! Хәлебеҙҙе үҙебеҙ хәстәрләмәһәк, әллә ҡайҙан, әллә кем килеп ярҙам итер тигән өмөт юҡ. Беҙ үҙ еребеҙҙә, үҙ илебеҙҙә генә башҡорт халҡы булып йәшәй алабыҙ, ә ситтәгеләр башҡорт милләте вәкилдәре йә башҡорт диаспораһы ғына була ала. Шулай булғас, ихтыяжларыбыҙҙы яҡлау, милли һыҙаттарыбыҙҙы, йола, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һаҡлау, ер, илебеҙҙе төрлө хәрәфәттәрҙән ҡурсалау һәр башҡорттоң йән бурысы. Үҙен ысын башҡорт балаһы тип танығандың йәшәү маҡсаты ла ошо булырға тейеш!

Әйе, яуаплы ауыр йөктөң ҡамыты өлкәне өйкәр, инде баҫыр, ваҡыты менән алҡымдан алып, тынды ла ҡыҫыр, ләкин был изге йөгөнән еңел туғарылған халҡы, ырыуы, тоҡомона хыянат иткән кеше булыр. Ундай кешегә ваҡытында баһаһын биреп, әйтеп барыу зарур. Шунһыҙ булмай! Чечендәрҙең үҙ халҡына, йолаларына ҡаҡшамаҫ тоғролоғона һоҡланыуҫы мин генә түгел. Улар, ысынлап та, үҙ булмышынан аңлы рәүештә йә сараһыҙҙанмы ситләшкән ҡәрҙәштәренә аяуһыҙҙар һәм нәфрәттәрен күрһәтергә ҡурҡмайҙар. Йәндәре ҡабул итмәгән күренештәргә ике йөҙләнеп йә күрмәмеш булып ҡыланмайҙар, үҙҙәре булып ҡала беләләр, шуға ла берҙәмдәр...

Үҙебеҙ берҙәм булып, аңыбыҙҙы, заңыбыҙҙы заман кимәленә күтәрә алһаҡ, ихтирам итерҙәр, талаптарыбыҙҙы, хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлай алһаҡ, талап, мәнфәғәттәребеҙҙе ҡәнәғәтләндерерҙәр, фекерҙәребеҙҙе һанға һуғырҙар, тәҡдимдәребеҙ менән иҫәпләшерҙәр. Шул осраҡта ғына киләсәгебеҙ тотороҡло, ышаныслы, уңышлы булыр, Алла бирһә. Донъябыҙ менән ғәҙел идара итергә өйрәнһәк, киләсәктә халҡыбыҙҙың ирекле, берҙәм, бәхетле йәшәүен тәьмин итә алырбыҙ, яҙмышыбыҙҙың, тормошобоҙҙоң хужалары үҙебеҙ булырбыҙ. Ватаны көслө, нәҫеле һау-сәләмәт варисҙарыбыҙ беҙҙән ҡәнәғәт булыр. Еңеллектә егетлек кәрәкмәй, ауыр саҡта егет булайыҡ!



**Урал МОСТАФИН.**

ИНТЕРНЕТТАН



# АСЫҒЫУ ТОЙҒОҺОН... лимон ҡабығы баҫа

■ Йөрәкте сирҙәрҙән һаҡлау өсөн көн дауамында бер нисә тапҡыр яратҡан көйөңдө тыңлау ҙа етә. Мэриленд штаты Университеты кардиологтары үткәргән һынауҙа ҡатнашҡан кешеләр ике аҙна дауамында бер ниндәй ҙә көй тыңламай. Яратҡан композицияларын ишетеү менән уларҙың барыһының да артериялары тәүге күрһәткестәргә ҡарағанда 26 процентҡа киңәйгән булыуы асыҡлана.

■ Яңы Зеландияның "Үҫемлектәр һәм аҙыҡтар тикшереү" компанияһы тикшеренеүселәре иҫбатлауы буйынса, ҡара ҡарағат емештәрендә булған химик берләшмәләр ҡурылдайҙы дауаларға ярҙам итә. Ғалимдар әйтеүенсә, ҡара ҡарағаттың төп элементы - эпигаллотехин иммунитетты ла күтәрә.

■ Диетологтар лимонды организмды таҙартыусы иң яҡшы сара тип һанай. Ул организмдан шлактарҙы ҡыуа, махсус диета тотҡанда һәм физик күнекмәләр яһағанда был цитруслы үҫемлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итә. Бынан тыш, лимонда иммунитетты нығытыусы, аллергия, туберкулез, ревматизм мәлендә хәлде яҡшыртыусы С витамины күп. Диетологтар лимондың ҡабығын да ашарға тәҡдим итә, сөнки уның составындағы пектин асығыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа.

■ Иртәнге аш майлы аҙыҡтарҙан торорға тейеш, тип белдерә АҠШ-ның Алабама университеты ғалимдары. Мәҫәлән, ҡурылған йомортҡа, бекон сәләмәтлек өсөн иң файҙалы иртәнге аш һанала. Баҡтиһәң, йоҡонан торғас та ашалған туҡлыҡлы аҙыҡ метаболик синдромдарҙан ҡотҡара һәм көн дауамында матдәләр әйләнеше яҡшы була.

■ Миннесота университеты белдереүенсә, ҡапыл барлыҡҡа килгән баш ауыртыуын кеҫәгеҙҙә ятҡан аҡса баҫа ала. Белгестәр әйтеүенсә, бының өсөн магазинға сығып, әйбер һатып алырға түгел, ә аҡсаларҙы һанау ҙа етә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың бер төркөмө - аҡса, ә икенсеһе киҫелгән ҡағыҙ һанаған. Бынан һуң улар ҡулдарын эҫе һыуға тығып торорға тейеш була. Асыҡланыуынса, аҡса һанаусылар ҡулдарын һыуҙа оҙағыраҡ тота алған, йәғни улар ауыртыу тойғоһо һиҙмәй башлаған.

■ Американың Эймори медицина мәктәбендә иҫәпләп сығарылыуынса, оло кеше көн һайын 30-40 ҡалаҡ шәкәр ашай икән. Бында аҙыҡ-түлек һәм эсемлектәрҙәге шәкәр ҙә инә. Рөхсәт ителгән норма 23 ҡалаҡ булғанлыҡтан, белгестәр аҙыҡ-түлектәге шәкәр күләме менән ҡыҙыҡһынырға һәм артыҡ татлы аҙыҡ һәм эсемлектәр менән мауыҡмаҫҡа тәҡдим итә.

■ Швецияның "Төньяҡ-Көнбайыш" психиатрия үҙәге табиптары оҙайлы депрессия кисереүсе кешеләрҙе күҙәткәндән һуң, паник ҡурҡыуҙы һәм депрессияны интернет ярҙамында еңергә мөмкин тигән һығымтаға килгән. Кеше интернетта бындай сирлеләр менән аралашып, бергәләп проблеманы хәл итеү юлдарын эҙләгәндән һуң, тыныслана икән. Әлбиттә, Бөтә донъя селтәре дарыуҙарҙы алыштыра алмай, әммә интернетты өҫтәмә дауа сараһы итеп ҡулланып була, ти белгестәр.

■ Бөйөк Британияның Нортумбрия университеты ғалимдары асыҡлауынса, сейә һуты күнекмәләрҙән һуң организмды элекке хәленә ҡайтарырға ярҙам итә. Тикшеренеүҙәрҙә 20 спортсы-марафонсы ҡатнаша. Табиптар уларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһенә ике аҙна дауамында сейә һуты эсергән. Һөҙөмтәлә, уларҙың мускулдарында оксидатив стресс түбәнәйеү сәбәпле, сейә һуты эскән спортсыларҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икәнлеге асыҡланған. Ғалимдар быны сейәлә антиоксиданттарҙың күп булыуы менән аңлата.

ЙҮНСЕЛ ЙҮНЛӘР...

# ЯҢЫ БАШҠОРТ ОБРАЗЫ...

## эшлекле эшҡыуар инде ул

**Халҡыбыҙҙы үҙ асылына ҡайтарыр рухиәт, туған тел, мәҙәниәт, әҙәбиәт, тарих кеүек өлкәләрҙән тыш, уның күркәм тормошон, йәшәйеш ҡағиҙәһен, мәшғүллеген тәьмин итеүсе матди өлкәне лә хәстәрләү беҙҙең алдыбыҙҙа торған төп бурыстарҙың береһе. Милләттәштәребеҙҙең көнкүреш хәлен яҡшыртыу, иң тәү сиратта, эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә ҡайтып ҡалыуын асыҡ тойомлап, быйыл Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Өфөлә башҡорт эшҡыуарҙарының "Башҡортостанда башҡорт эшҡыуарлығы торошо һәм үҫеш перспективалары" тигән республика семинар-кәңәшмәһе уҙғарғайны. Үткән аҙнала ошо уҡ лозунг аҫтындағы күсмә ултырыш Әбйәлил районында булып үтте.**

Эшҡыуарҙар менән осрашыуҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының эшҡыуарҙар координацион советы рәйесе, "Стройтрейдинг" компанияһының генераль директоры Иршат Аҫылғужин, БР-ҙың Эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса дәүләт комитеты рәйесе Ринат Зәйнуллин ҡатнашты. Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Ейәнсура, Йылайыр, Күгәрсен, Учалы, Хәйбулла райондарынан, Сибай ҡалаһынан йыйылған йөҙҙән ашыу эшҡыуар улар менән күҙмә-күҙ ҡарап аралашты, фәһемле сығыштар тыңланы, үҙҙәрен борсоған һорауҙарына яуап алды, фекер алышты, тәҡдимдәр индерҙе.

*Салауат ТАКАЛОВ, Йылайыр районы:*

***- 2009 йылдың апрелендә шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлдем һәм кәзә һөтөнән ҡымыҙ эшләп һатам. Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгенән эште башлау өсөн ҡаралған 58 мең һәм район администрацияһынан 50 мең һум ярҙам алғанға күрә, финанс ҡыйынлыҡтар әллә ни булманы. Әҙер продукцияны магазиндар, баҙарҙар һәм дә юлға сығарып һатам. Был эштә миңә ҡатыным ҙур ярҙамсы булып тора. Ошондай эш башлауыма үкенмәйем, быйыл эштең нисек барыуына ҡарап, киләсәктә киңәйеүгә иҫәп тотам.***

Тарихтан белеүебеҙсә, беҙҙең халыҡҡа яугирлыҡ хас. Ил баҫыр өсөн түгел, башлыса ерен, телен, динен һаҡлап яу сапҡан ул. Ошо яугирлыҡ рухы, эске ҡеүәт замананалар алышынғанда кемебеҙҙәлер үҙенә дөрөҫ юл ала алмайынса тыйлығып, ағышын туҡтатты, кемебеҙҙәлер ул һырҡырап ҡына аҡты, кемебеҙҙәлер ярһыуын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, ташҡын булып ажарланды, кемебеҙҙәлер тар юлдан китеп, быстраҡ күләүеккә әүерелде. Тап ошондайҙар заман һынауҙары алдында баҙап ҡалып, үҙенең йәшерен эске көсөн тормошҡа ашыра алмайынса, эскегә һабышты, юлдан яҙҙы, төшөнкөлөккә бирелде, кемеһелер, киреһенсә, ошо "батырлығын" (әгәр уны батырлыҡ тип атап булһа) үҙ-үҙенә ҡул һалып иҫбатланы. Бында, әлбиттә, дөйөм халыҡ тураһында һүҙ бармай. Милли рух менән янған, айыҡ аңлы, киң ҡарашлы, төплө фекер йөрөткән, тормош ҡәҙерен белеп йәшәгән милләттәштәребеҙ ҙә бихисап. Башта һанап үтелгән күренештәрҙән ҡотолор өсөн беҙгә тап яҡты киләсәккә ҡыйыу атлаған аңлы һәм сәләмәт тормош алып барған яңы башҡорт образын барлыҡҡа килтерергә кәрәк. Ул үҙенең ошо эске көсөн, рухи ҡеүәтен телде, милләтте, ерҙе һаҡларҙай заманға ярашлы өлкәгә йүнәлтергә тейеш.

"Беҙгә хәҙер тел, мәҙәниәт мәсьәләләренән тыш, аңлы рәүештә эшҡыуарлыҡ өлкәһен үҫтереү мөһим. Сөнки әлеге мәлдә милләт-ара, дәүләт-ара конкурентлыҡ көрәше, глобалләшеү процестары бара. Ә ошо мәҙәниәттәр киҫелешендә халыҡ дәүләт институтына таянып ҡына йәшәп китә алмай, - тип әйтеп китте Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең социаль-иҡтисади тикшеренеүҙәр институты хеҙмәткәре, иҡтисад фәндәре докторы Илдар Зөлҡәрнәй. - Күп милләтле республикала беҙҙең халыҡ үҙенең милли булмышын нисек һаҡлай ала? Уның иҡтисади үҫешкә илтеүсе эске сығанағы - эшҡыуарлыҡ бар. Аҫаба башҡорт булараҡ, башҡорттар бүтән халыҡтарға ҡарағанда эшҡыуарлыҡҡа күпкә яҡын торған. Хәҙер беҙгә ошо юғалған сифаттарыбыҙҙы кире ҡайтарып, яңы башҡорт образын булдырырға кәрәк. Яугир ҙа түгел, шағир ҙа түгел, ә эшҡыуар башҡорт образы кәрәк. Тап ул халҡыбыҙҙың телен дә, мәҙәниәтен дә, иҡтисади хәлен дә һаҡлауға һәм үҫтереүгә ҙур өлөш индерә аласаҡ".

Эшҡыуарлыҡ беҙҙең милләт киләсәген тәьмин итәсәк төп йүнәлеш булырға тейешлеге һәр кем сығышында ҡыҙыл еп булып үрелеп барҙы. Әбйәлил районы хакимиәте башлығы Рим Сыңғыҙов ошо фекерҙе бик тапҡыр итеп әйтеп китте: "Бөгөн бөтә көстө эшҡыуарлыҡ өлкәһенә йүнәлтергә кәрәк. Шул саҡта районыбыҙҙағы, илебеҙҙәге суицид, ғаиләләр тарҡалыуы, ташландыҡ балалар, наркоманлыҡ, эскелек кеүек кире күренештәр үҙенән-үҙе бөтәсәк, - тине ул. - Бөгөн күп ерҙә колхоз-совхоздар тарҡалып бөттө, тип ҡайғырып, Хөкүмәткә зарланып ятыусылар күп. Ә эштән күп нәмә юҡ, тот та береһен башла. Көтөп ултырһаң, берәү ҙә килеп беҙҙең үлгән совхоздарҙы терелтмәйәсәк, завод-фабрикалар төҙөмәйәсәк. Мин тау-урманы, күлдәре булған Әбйәлил районының киләсәген тик эшҡыуарлыҡта күрәм. Беҙҙә әлегә туризм, йәшелсә үҫтереү буйынса бер нәмә лә эшләнмәй. Үҙебеҙгә аҡса табырға, килем алырға өйрәнергә кәрәк".

Әммә беҙ бөгөндән тота килеп тотош халыҡты үҙгәртә алмайбыҙ. Беҙгә быны үҫеп килеүсе быуынды тәрбиәләүҙән башларға кәрәк. Балаларҙы бәләкәйҙән йүнселлеккә өйрәтеү, ата-бабаларҙан килгән ошо эске көстө уятып, дөрөҫ йүнәлештә үҫтереү фарыз. Эшҡыуарҙар семинарында ҡатнашыусылар был мәсьәләне лә ситтә ҡалдырманы һәм Ринат Зәйнуллин "Эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге нигеҙҙәре" дәресен мәктәптә өлкән кластарҙа уҡыта башлауҙы резолюцияның бер пункты булараҡ тәҡдим итте. Эшҡыуарлыҡ өлкәһендә 20 йыл тәжрибәһе булған Әбйәлил эшҡыуарҙар советы рәйесе Дамир Аллаяров та йүнсел булырға саҡырҙы: "Беҙҙең халыҡҡа ҡыйыулыҡ һәм тәүәккәллек етешмәй. Балаларыбыҙҙы бәләкәйҙән аҡса табырға, йүнсел булырға өйрәтергә кәрәк. Бының өсөн мәктәптәрҙә эшҡыуарҙар менән йышыраҡ осрашыуҙар үткәреп торорға, уҡыусыларҙы эшҡыуарлыҡ серҙәре менән таныштырырға кәрәк", - тине ул.

Эшҡыуарҙар ултырышы бына ошондай бөгөнгө көндә милләт өсөн мөһим булған мәсьәләләр күтәреп, унан сығыу юлдары эҙләп, етди рухта үтте. Тик ҡайһы берәүҙәрҙе бары тик аҡса мәсьәләһе, ваҡ мәшәҡәттәр генә борсоуы күңелде ҡырҙы. Дәүләт ярҙамы төрҙәре һәм уны нисек алыу юлдарын тәфсирләп аңлатҡандан һуң да, ҡабат-ҡабат бер үк һорау менән мөрәжәғәт итеү эшлекле һөйләшеүҙең йәмен ебәрә биреп ҡуйҙы. Был инде замандаштарыбыҙҙың иғтибарһыҙлығымы, тыңлай белмәүеме, әллә бер уй - көс түкмәйенсә генә нисек тә булһа ҡулға аҡса төшөрөү уйы менән баш ватыуҙан, ҡомһоҙлоҡтан киләме? Ринат Зәйнуллин әйтеүенсә, хатта старт-ап программаһы буйынса бер тапҡыр аҡса алып, эшен ябып, унан һуң яңынан эшҡыуар булараҡ теркәлеп, тағы ла был дотацияға дәғүә белдереп, ғариза яҙыусылар булған. Был инде законға ярашһыҙ эш һанала. Буш аҡсалар кешене шаштыра, боҙа тигән фекерҙе ҡеүәтләп, Ейәнсура районынан Нәжип Юлдашбаев былай тине: "Әгәр дәүләт аҡса бирмәһә, улар күптән, бәлки, эш башлаған булыр ине. Беҙ былай ҙа йоҡомһорап йөрөйбөҙ, әкрен ҡуҙғалабыҙ, хәҙер килеп, ярҙам көтөп ултырабыҙ. Мин эш башлағанда дәүләт тарафынан эшҡыуарҙарға ярҙам күрһәтелмәй ине. Барыһын да үҙ көсөм менән йырып сыҡтым. Шуға ла бер кемде лә көтөп ултырырға кәрәкмәй, тоторға ла эш башларға кәрәк".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Анау тиклем батырҙары булған халыҡ өсөн бахырлыҡ төҫ түгел. Беҙ рухыбыҙ, ихтыярыбыҙ, иманыбыҙ, аҡылыбыҙ менән көслө халыҡ булырға тейешбеҙ. Ошо көстө беҙ үҙеребеҙҙә күркәм, етеш тормош ҡороуға, милләтебеҙгә тәүфиҡлы балалар үҫтереүгә, халҡыбыҙға хеҙмәт итеүгә берҙәм һәм әүҙем рәүештә йүнәлткәндә, Башҡортостаныбыҙ ҡеүәтле илдәрҙең береһенә әүерeләсәк, иншаллаһ.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Тирә-йүнебеҙҙә күпме кеше бөгөнгө йәшәйешен үҙгәртергә теләй, ләкин быны өсөн йә көсө етмәй, йә ялҡаулыҡ ҡамасаулай, йә иһә беҙҙе уратып алған ысынбарлыҡ быны эшләргә бирмәй. Һәр кемдең яҙмышы үҙ ҡулында, шуны онотмаһаҡ ине ул. Күптәребеҙ бөгөнгө ауыр тойолған тормошобоҙ өсөн кемделер ғәйепләргә ярата, ләкин үҙебеҙҙең өҫтөбөҙгә яуаплылыҡ алырға тырышып бармайбыҙ. Кемгәлер ғәйеп тағып, үҙеңә меҫкенлек битлеге кейҙереп, йәлләү тойғолары уятып йәшәүҙе, шулай булырға тейеш, тип ҡабул итә башланыҡ түгелме һуң? Ләкин үҙебеҙҙән, бары тик үҙебеҙҙең йәшәү көсөнән тора матур һәм тулы тормошта ғүмер итеүебеҙ. Беҙҙең ынтылыштарҙан тора.**

# МАҠСАТ ҠУЙ ҺӘМ АТҠАР!

## (Йәш эшҡыуар яҙмалары)

Мин ауылда тыуып үҫтем. Яҙмышым шулдыр: балалыҡтан иртә сығырға тура килде. Ләкин быға һис үкенмәйем, сөнки бөгөнгө көнгә үҙемде яҡларлыҡ, башҡарған эштәрем өсөн яуап бирә алырлыҡ фекер тупланым, белем йыйҙым. Белем алыу теләге бала саҡтан көслө булды миндә. Ошо уй-хыялдарым, көслө теләгем ата йортонан иртә айырҙы, сит тарафтарға алып китте. Ваҡыт үтеү менән тормош юлдары мине бала саҡта һүрәттәрҙән генә күреп белгән матур, һоҡланғыс ҡалаға - Өфөгә алып килде. Өфө урамдарынан тәү тапҡыр атлап үтеүем әле булһа күңелдә яҡты иҫтәлектәр булып йәшәй.

Бына ун йыллап инде мин баш ҡалала, уның тарихи үҙәге һаналған Ғафури урамында, Телеүҙәк янындағы йорттарҙың береһендә йәшәйем. Ләкин үҙ фатиримда түгел - бындай бәхеткә өлгәшеп булғаны юҡ әлегә. Театр яратаһыңмы - рәхим ит, концерттарҙы хуп күрәһеңме - көн дә барырға мөмкин, үҙ уйҙарыңа сумып аҙыраҡ йөрөп килгең киләме - парктар бихисап, балконға ғына сыҡ - ҡул төбөндә башҡортомдоң бөйөк улы Салауат Юлаев һәйкәле торған майҙан... Ҡыҫҡаһы, күңелең ни теләй, барыһы ла бар баш ҡалала. Эшләгән ерем дә арыу ғына - министрлыҡта эшләйем. Әйтеүе генә ни тора - министрлыҡ! Иртән башымды ғорур күтәреп баҫҡыстан менеп китәм, эш сәғәте бөткәс, шулай уҡ ғорур килеп төшәм. Ситтән ҡарағанда барыһы ла һәйбәт кеүек. Ләкин былар барыһы ла шул "кеүек"кә генә ҡайтып ҡала...

Бөгөн бына айҙың бише. Күптәребеҙ өсөн ошо һан яҡын да, ҡәҙерле лә булып бөткән. Сөнки был көндө эш хаҡы күсерәләр. Бына әле мин дә эштән ҡайтышлай банкоматҡа инеп, "байып" ҡайтып киләм. Ә башта мең төрлө уй: "был тиклем" аҡсаны нисек бүлергә лә, ҡайҙа еткерергә. Сөнки ошо аҡсанан фатир өсөн түләйһе, студент ҡустыға бүлеп бирәһе, аҙыҡ-түлек магазинына инеп сығаһы бар, ағайҙан алып торған бурысты ла ҡайтарырға кәрәк... Ҡыҫҡаһы, "кәрәк"тәр иҫ киткес күп. Дуҫтар әллә ҡасандан бирле осрашырға саҡыра, был айҙа ла булмаҫ инде осрашып. Ағайҙың юбилейы бөгөн. Телефондан ғына ҡотланым. Ун йылдан тағы юбилейың, шунда бер юлы барырмын инде, Алла бирһә, тинем үҙенә.

Ауылдаштарым күҙлегенән ҡарағанда, мин бик "крутой" кешемен. Шулай булмай ней, Өфөлә йәшәйем, эшләйем. Бар туғандарҙың балаларынан башлап, дуҫ-иштәренә тиклем ҡалаға килгәндә миндә туҡтайҙар. Туҡтайҙар ине... Улар барыһы ла быны, шулай тейеш, тип ҡабул итәләр. Мин дә тәүҙә уларса уйлай инем... Ләкин тора-бара мине таңдан тороп вокзалдан ҡаршы алыуҙар, бараһы ерҙәренә алып барып-алып ҡайтыуҙар, ҡунаҡтарҙы диванға һалып, һыуыҡ иҙәндә йоҡлауҙар тамам ялҡытты ла, арытты ла. Һәм апайымдың дуҫының ҡоҙаһының ҡыҙы минең һуңғы ҡунағым булды. Ошонан һуң мин бындай темаларға шылтыратыуҙарҙы төбө-тамырынан ҡырт киҫә башланым. Әсәйҙе лә киҫәтеп ҡуйҙым. Теләмәй генә ризалашты, әммә ләкин минең ризалыҡтан башҡа телефон номерымды һәм адресымды кешеләргә биреүҙән туҡтаны. Кемгәлер яман булып ҡалдым, кемдер минең менән хәҙер һөйләшмәй... Әммә былар барыһы ла минең өсөн мөһим түгел. Барыһына ла яҡшы булып булмай ул. Үҙемдең проблемалар баштан ашҡан. Ҡайһылары бит рәхмәт тә әйтә белмәне. Нисек кенә булмаһын, кеше эгоист һәм тәү сиратта үҙен уйлай. Мин дә шундайҙарҙан. Тормош өйрәтте. Элекке киң күңеллелек юҡ хәҙер.

Ә проблемаларҙың барыһы ла шул аҡса етмәгәнлеккә ҡайтып ҡала. Һаулыҡ булмаһа, йәшәүҙең ҡыҙығы юҡ, тиҙәр. Ә мин был фекерҙе аҙыраҡ үҙгәртер инем. Аҡса булмаһа, йәшәүҙең ҡыҙығы юҡ. Аҡса булмау нервыларҙы бөтөрә, һаулыҡты ҡаҡшата. Коллегаларығыҙҙы, дуҫтарығыҙҙы, туғандарығыҙҙы күҙәтегеҙ әле бер яйы килгәндә. Әгәр ҙә мәгәр кәйефтәре юҡ, күҙҙәре асыулы, аҙ һүҙлегә әйләнделәр икән, тимәк, кеҫәләре таҡырайған. Киреһенсә булһа, тимәк, аҡсалары бар. Күңел көр һәм шат. Ҡыйынһынмағыҙ, үҙегеҙҙе һынап ҡарағыҙ әле. Тап мин әйткәнсә, шулаймы? Шулай.

> ***Тора-бара мине таңдан тороп вокзалдан ҡаршы алыуҙар, бараһы ерҙәренә алып барып-алып ҡайтыуҙар, ҡунаҡтарҙы диванға һалып, һыуыҡ иҙәндә йоҡлауҙар тамам ялҡытты ла, арытты ла. Һәм апайымдың дуҫының ҡоҙаһының ҡыҙы минең һуңғы ҡунағым булды. Ошонан һуң мин бындай темаларға шылтыратыуҙарҙы төбө-тамырынан ҡырт киҫә башланым. Кемгәлер яман булып ҡалдым, кемдер минең менән хәҙер һөйләшмәй... Әммә былар барыһы ла минең өсөн мөһим түгел.***

Бөгөнгө көн минең түҙемлегемдең һуңғы тамсыһы булды. Башҡаса былай йәшәү мөмкин түгел ине. Ниҙер уйларға, нимәлер хәл итергә кәрәк. Һинән күпкә ауырыраҡ йәшәгән кешеләр ҙә бихисап, тиерһегеҙ. Бәхәсләшмәйем, шулай. Әммә ләкин мин былай йәшәргә теләмәйем. Эйе, теләмәйем. Бер тапҡыр бирелә торған ғүмеремде гел генә аҡса хаҡында уйлап үткәргем килмәй. Шулай итеп, эш хаҡымды ҡулда тотҡан килеш, ҡаты уйға талдым. Уйҙарыма - сик, һорауҙарыма яуап эҙләгәндәй, эргәмдәге гәзиткә текәлдем дә, уҡый башланым. Тәүге төртөлгән мәҡәлә, ысынлап та, һорауҙарыма яуап биргәндәй булды. Ул республикала бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү саралары тураһында ине.

Шулай итеп, эште оҙаҡҡа һуҙмай, эшҡыуарлыҡҡа тотоноу тураһындағы ниәтемде тормошҡа ашырырға булдым. Ныҡлы ҡарарға килеүен килдем дә ул, ә эште ниҙән башларға һуң? Ниндәй эш асырға? Республикала ауыл хужалығы, балыҡсылыҡ, файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу алдынғы йүнәлештәрҙең береһе булып тора. Ләкин күп ир-егеттәр йөрьәт итмәгән был тармаҡтар ишеге йәш ҡыҙ өсөн ябыҡ. Күптәр кеүек алыпһатарлыҡ менән шөғөлләнге килмәй. Үҙ ҡулым көсө, үҙ тырышлығым менән ниндәйҙер файҙалы эш башҡараһы ине. Халыҡҡа ла файҙаһы булһын, миңә лә, тигәндәй. Оҙаҡ уйлағандан һуң, әлегә беҙҙең республика өсөн ятыраҡ булған мендәр таҙартыу салоны асырға булдым. Киләсәктә инде был эште тағы ла киңәйтеп, район үҙәктәрендә булмаған химик таҙартыу предприятиелары асыу теләге лә бар. Ауылда ла, райондарҙа ла, бәләкәйерәк ҡалаларҙа ла бит шундай уҡ кешеләр йәшәй, улар ҙа костюм-тундар кейә, балаҫтар йәйә... Шулай уйланым. Ләкин уйлау - бер, ә уйҙарыңды тормошҡа ашыра башлау - икенсе. Ярай әле, беҙҙең ҡарамаҡҡа Интернет бар. Бөтә мәғлүмәтте ошо селтәрҙән алдым. Уйланаһы уйҙар уйланып, кәрәкле мәғлүмәт йыйылып бөттө. Шулай уйлаған булдым, ә ысынында иһә уйҙарымды тормошҡа ашырыу процесы барышында тағы әллә күпме эҙләнеүҙәр, мәғлүмәт йыйыуҙар буласағын, нимәнелер аңлап етмәү арҡаһында яңылышлыҡтарға, хаталарға юл ҡуйыуым алда булған икән әле...

Тәү сиратта, таҙартыу аппараты ҡулға төшөрөү бурысы тора минең алда. Әлеге лә баяғы Интернет селтәре аша ошондай тармаҡта эшләүсе компания менән бәйләнешкә инеп, аппарат мәсьәләһен хәл иттем. Хәл иттем, тием дә ул, хаҡын күргәс, иҫ-аҡылым китте. Ләкин беҙ бит артҡа сигенә торғандарҙан түгел. Әйтеп үтәйем, ошо минуттан алып аҡса мәсьәләһе мине бөтә ерҙә оҙатып барҙы. Ҡайҙа боролһаң да түләргә кәрәк, хәйер, хәҙер бит кәңәште лә түләп ала торған заман. Хәлеңә ҡарап аяғыңды һуҙ, тигән мәҡәлде иҫкә төшөрөп, иң арзан аппаратҡа заказ бирҙем. Ярай, заказ үтәлә торһон, ә миңә эшҡыуар булараҡ һалым органдарында теркәлергә кәрәк ине. Прописка буйынса теркәлһәң икән. Киттем поезға ултырып ике көнгә Өфөмдө ташлап. Барып төштөм Сибайға. Һалым органы бинаһына индем, кәрәкле кабинетты эҙләп таптым. Кешенең күплеге! Бер мин түгел икән үҙ эшен асырға теләүсе. Сират алдым да стенаның буйынан буйына эленеп ҡуйған мәғлүмәттәрҙе уҡый башланым. Сиратым еткәнсе, бер-нисә тапҡыр ҡала буйлап "экскурсия" эшләп алырға тура килде. Баҡтиһәң, һине теркәйҙәр ҙә сығаралар түгел икән дә, файлдан алып, ун бит ҡағыҙға тиклем үҙеңә килтерергә, күсермәләр эшләргә кәрәк. Сиратым килеп етеүгә, минең ҡулда барлыҡ кәрәкле ҡағыҙҙар тултырылып, бер папкаға тегеп ҡуйылғайны инде. Шулай итеп, ҡағыҙҙарымды тултырып, расписка тоттороп, биш көндән килергә ҡушып, ярты сәғәт тигәндә сығарып та ебәрҙеләр.

**Гөлназ САФУАНОВА.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Ҡуллан, юғиһә юғалтырһың

Әгәр беҙ "Дөрөҫ эшлә йәки нисек тә булһа эшлә!" тигән бойороҡ өҫтөндә уйланһаҡ, кешелек үҫеше процесын яҡшыраҡ аңлай алмаҫ инекме икән? Ҡулланылмаған әйбер юғала, йәғни беҙҙең ҡулланылмаған тәбиғи һәләттәребеҙ юҡҡа сыға, тигән формула тормош ҡанундарының береһе булып тора.

Был ҡанундың нисек атҡарылыуын белер өсөн кешенең физик мөмкинлектәре үҫешен ҡарап үтәйек. Кеше кәүҙәһенең тәбиғи хәле - сәләмәтлек, көс һәм һығылмалыҡ. Әгәр ҙә беҙ ошо сифаттар менән файҙаланмаһаҡ, нимә килеп сығасаҡ? Күпселек ваҡытыбыҙҙы хәрәкәтһеҙ үткәрәбеҙ икән, мускулдар ҡорой, хәлһеҙлек барлыҡҡа килә, бер үк мәлдә эске органдарҙың йәшәйеш функцияһы боҙола, ә был, үҙ сиратында, аңға тәьҫир итә һәм ул төшөнкөлөккә, депрессияға килтереүе ихтимал. Беҙҙең сәләмәтлегебеҙҙең тәбиғи торошо юғала. Кешеләр ваҡыттарын да юғалта. Һәр кемебеҙҙең ҡарамағында 24 сәғәт бар, әммә беҙ уны ниндәйҙер эшлекле маҡсатҡа ҡулланмайбыҙ икән, уларҙы кире ҡайтара алмаясаҡбыҙ. Һәләттәр тураһында ла ошоно уҡ әйтергә була: ҡулланылмаһа, улар "тутығасаҡ".

Аҡса (йә булмаһа, кешенең йәшәйешен тулыландырыусы башҡа физик, матди әйбер) беҙҙе һаҡлаулы итә, яҡшы мөмкинлектәр, тыныслыҡ, ҡәнәғәтлек һәм азатлыҡ бирә, тип уйлайбыҙ. Ысынында шулаймы? Бер кеше аҡса йыйыр өсөн ғүмеренең оҙаҡ йылдарын ауыр хеҙмәттә үткәргән. Был йылдар эсендә ул ярайһы ғына ҙур сумма туплаған. Һәр юлы ҡатыны уға бер ни тиклем аҡсаны тотонорға тәҡдим иткән, мәҫәлән, өй йүнәтеү, ҡайҙалыр икәүләшеп ял итергә барып килеү йәки мохтаждарға ярҙам итеү. Әммә был кеше ҡатынының тәҡдимен кире ҡаға килгән йәки теләкһеҙ генә ризалашҡан. Тиҙҙән ул һәр яҡлап та юғалтыу кисерә башлаған: ҡатынының ихтирамын юғалтып, аралары өҙөлгән, өйҙәре иҫкергән. Был кеше һәр ваҡыт тиндәренә тиклем һанап, аҡса ғына уйлап йөрөгәнгә күрә, бөтә тормош шатлығынан мәхрүм булған, тыныслығын юғалтҡан, йомартлыҡ һәм бүтәндәр менән уртаҡлашыу кеүек тойғолар тыуҙырыусы етешлекте һәм үҙ-үҙенә ышанысты тоймай башлаған. Уның ҡомһоҙлоғо һаулығын ҡаҡшатҡан һәм һөҙөмтәлә бөтә аҡсаһы медицина хеҙмәтенә һәм дарыуҙар һатып алыуға киткән.

Беҙҙең эске мөмкинлектәребеҙ менән дә ошондай уҡ хәл ҡабатланыуы ихтимал. Быға үҙ-үҙеңә ышаныс тойғоһо өлгө булып тора ала. Ошо тойғоға иғтибарҙы туплап, һин уңыш һәм ҡәнәғәтлек өсөн ысынбарлыҡтағы мөмкинлек тояһың. Был тойғоно үҫтереү өҫтөндә эшләгәндә ул һинең аңыңда ныҡлап тамыр йәйәсәк. Әммә ҡурҡыуға, икеләнеүгә буйһоноп, үҙеңде артҡа ҡарай борорға юл ҡуяһың икән, үҙ-үҙеңә ышаныс тойғоң юғаласаҡ.

Ғәҙәттә, ҡурҡыу мөхәббәт, аҡса, үҙ-үҙеңә ышаныс йәки уңайлы мөмкинлектәр кеүек беҙҙең өсөн ҡиммәтле булған әйберҙе файҙаланырға ҡамасаулай. Нисек кенә көлкө тойолмаһын, әммә тап барлыҡ әйберҙе юғалтыу хәүефе беҙҙе уны файҙаланыуҙан тыйылырға мәжбүр итә лә инде, һөҙөмтәлә, барыбер ҙә улар беҙҙең ҡулдан ысҡына. Беҙ тормоштоң ысын ниғмәттәрен асырға ҡурҡмаҫҡа тейешбеҙ, сөнки азатлыҡ һәм ниндәй генә изгелекте лә нигеҙле ҡулланыу уны тағы ла тулыландыра һәм уның өсөн тағы ла киңерәк юлдар аса.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 24 МАЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 Время
21.30 "Ермоловы", 9-я серия. Сериал
22.30 "Остров по имени Бродский". Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Познер"
01.10 "Гении и злодеи"
01.40, 03.05 "Поле мечты"
03.00 Новости
03.40 "Петля-2"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Молния-убийца. Погоня за шаровой"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 58-я серия. Сериал
18.05 "Ефросинья", 67-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине", 87-я серия. Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Застывшие депеши", 1-я и 2-я серии. Сериал
22.55 "Мой серебряный шар"
23.50 "Вести+"
00.10 "Час пик-2". Боевик
01.45 "Изгоняющий дьявола: приквел"
04.00 "Молния-убийца. Погоня за шаровой"

### НТВ

05.40 "Государственная граница". "Мы наш, мы новый..."
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Столыпин... Невыученные уроки". Биографическая драма
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
14.30 "Знаки судьбы". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Вернуть на доследование". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Бомж", 1-я, 2-я и 3-я серии. Сериал
22.20 "Час Волкова". Сериал
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Роковой день"
01.45 "Сердце - одинокий охотник"
04.15 "Особо опасен!"
04.50 "Холм одного дерева"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.05 Погода**
**10.10 "Полезные новости"**
**10.15 "Виктория"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.30 "Байман"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественый фильм**
**16.30 "По волнам моей памяти". Я. Кулмый**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Любимые мелодии"**
**18.20 "Дорога без конца..."**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Салават - город спорта"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Атайсал"**
**21.00 "Замандаш"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Спортивный интерес"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 25 МАЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Ермоловы", 10-я серия. Сериал
22.30 "Кремль-9. Записки телохранителя". Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.20 "На ночь глядя"
01.10, 03.05 "Дитя человеческое". Триллер
03.00 Новости
03.15 "Мальчишник: последнее искушение"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.35 "Дворик", 59-я серия
18.05 "Ефросинья", 68-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Застывшие депеши", 3-я и 4-я серии. Сериал
22.55 "Венок из ромашек"
00.40 "Вести+"
01.00 "Евровидение-2010". 1-й полуфинал
03.05 "Девушка-сплетница"
04.00 "Наша "АББА"

### НТВ

05.40 "Государственная граница". "Мы наш, мы новый..."
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Столыпин... Невыученные уроки". Биографическая драма
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
14.30 "Знаки судьбы". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Вернуть на доследование". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Бомж", 4-я, 5-я и 6-я серии
22.20 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Главный герой представляет"
00.25 "Главная дорога"
01.00 "Последний выход". Драма
02.45 "Дракула". Фильм ужасов
04.45 "Холм одного дерева"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Галерея изящных искусств"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "На своей земле"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.30 "Нефтекамскому филиалу БГУ - 10 лет"**
**17.15 "Виктория"**
**18.05 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Точка зрения"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Во благо будущего"**
**21.00 "Победить себя"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 26 МАЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Ермоловы", 11-я серия
22.30 "Среда обитания". Док. фильм
23.30 "Школа"
00.00 "Ночные новости"
00.20 "На ночь глядя"
01.00, 03.05 "Подъем с глубины". Боевик
03.00 Новости
03.15 "Мой телохранитель"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Шутки большого человека. Евгений Моргунов"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Дворик", 60-я серия
18.05 "Ефросинья", 69-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Застывшие депеши", 5-я и 6-я серии
22.50 "Семь смертных грехов", 2-я часть док. фильма
23.50 "Вести+"
00.10 "Донская повесть". Мелодрама
02.10 "Честный детектив"
02.45 "Горячая десятка"
03.50 "Девушка-сплетница"
04.40 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.40 "Государственная граница". "Мирное лето 21-го года"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Столыпин... Невыученные уроки". Биографическая драма
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
14.30 "Знаки судьбы". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Вернуть на доследование". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Бомж", 7-я, 8-я и 9-я серии
22.20 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Поздний разговор"
00.20 "Внезапная смерть". Боевик
02.35 "Ричард Львиное Сердце". Приключения
04.50 "Холм одного дерева"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Действующие лица"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Судьбы радужные нити"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Байык"**
**16.10 "Голоса молодых". IV Республиканский литературный фестиваль**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Они видели Победу"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Курултай"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Хрустальный соловей-2010"**
**23.45 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 27 МАЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым"
21.00 Время
21.30 "Ермоловы", 12-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.20 "Школа". Сериал
01.20, 03.05 "Застрял в тебе". Комедия
03.00 Новости
03.30 "Борис Черток. Выстрел во Вселенную"
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Дворик", 61-я серия
18.05 "Ефросинья", 70-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Застывшие депеши", 7-я и 8-я серии
22.50 "Я вам больше не верю". Драма
00.40 "Вести+"
01.00 "Евровидение-2010". Международный конкурс исполнителей, 2-й полуфинал
03.05 "Девушка-сплетница"
04.05 "Огненный рейс. Как это было"

### НТВ

05.40 "Государственная граница". "Мирное лето 21-го года"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Первая кровь"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Столыпин... Невыученные уроки"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
14.30 "Знаки судьбы". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Вернуть на доследование". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Бомж", 10-я, 11-я и 12-я серии
22.20 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Страшный суд". Драма
02.00 "Эпидемия". Триллер
04.35 "Холм одного дерева". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.45 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.20 Мультфильм**
**16.45 "Наш дом - Башкортостан"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Учим башкирский язык"**
**18.20 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Крестьянский двор"**
**19.55 "Небесные спасатели"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Спортивный меридиан"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Действующие лица"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 28 МАЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо", 241-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "На краю стою..." Драма
23.10 "Закрытый показ" с Александром Гордоном". "Полторы комнаты, или сентиментальное путешествие на Родину". Биографическая драма
02.40 "Бог знает, мистер Аллисон". Приключения
04.40 "Последний житель русской Атлантиды"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 62-я серия
18.05 "Ефросинья", 71-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала"
22.55 "Девчата"
23.50 "Отдаленные последствия". Мелодрама
02.00 "Мерцающий". Боевик
03.45 "Фредди против Джейсона". Фильм ужасов

### НТВ

05.30 "Государственная граница". "Восточный рубеж"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Особо опасен!"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Столыпин... Невыученные уроки". Биографическая драма
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Вернуть на доследование". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "НТВшники"
21.45 "Залезть на луну". Криминальная драма
23.30 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
00.20 "Дикая река". Приключения
02.35 "Последняя зима". Триллер
04.35 "Мужчины в большом городе". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Телекомпас"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.45 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.20 "Автограф". Р. Хакимов**
**16.55 "Виктория"**
**17.40 "Йома"**
**18.00 "Узаман". Г. Султангильдин**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 "Новости" (на башк. яз)**
**19.30 "Парламентский вестник"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 29 МАЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Перехват"
06.00 Новости
07.30 "Играй, гармонь, любимая!"
08.10 Дисней клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Смак"
11.10 "Моя родословная"
12.10 "Грядка"
12.40 "Праздник непослушания"
13.40 "Широка река". Сериал
17.20 "Живой мир"
18.20 "Кто хочет стать миллионером?"
19.20 "Шрек третий". Полнометражный мультипликационный фильм
21.00 "Время"
21.15 "Чизкейк". Триллер
22.50 "Прожекторперисхилтон"
23.30 "Что? Где? Когда?"
00.40 "Молодожены". Романтическая комедия
02.30 "Срочное фото". Триллер
04.20 "Чапай с нами"
05.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.35 "За кем замужем певица?" Комедия
07.10 "Вся Россия"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00, 11.00 "Вести"
08.10, 11.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.25 "Луни Тюнз: снова в деле". Комедия
11.20 "Качество жизни"
11.35 "Дела и люди"
11.45 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30, 04.15 "С журавлиной стаей. Судьба мастера"
15.25 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
16.20 "Субботний вечер"
18.30 "Дом малютки". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Дом малютки". Продолжение
23.00 "Вечно молодой". Мелодрама
01.00 "Евровидение-2010"
04.15 "С журавлиной стаей. Судьба мастера"
05.10 "Городок"

### НТВ

05.30 "Вилли Вонка и шоколадная фабрика". Сказка
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Лучший город Земли"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Суд присяжных: главное дело"
17.55 "Очная ставка"
18.40 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.50 "Ты не поверишь!"
22.40 "Легенды видео". "Город грехов". Триллер
01.05 "Уайатт Эрп". Биографическая драма
04.45 "Мужчины в большом городе". Сериал

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Доброе утро!"**
**08.40 Погода**
**08.45 Мультфильм**
**10.00 "Советы садоводам"**
**10.30 "Волшебный курай"**
**11.05 Р. Ханнанов. "Когда цветут цветы". Спектакль Сибайского башкирского государственного театра драмы им. А. Мубарякова**
**12.20 "Студенческая весна-2010". Гала-концерт**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Сулпылар"**
**14.40, 19.20 "Дарю песню"**
**15.55 "Черный плащ". Мультсериал**
**16.20 "В гармонии созвучие находя". Концерт струнного квартета УГАИ**
**16.40 "Позитив"**
**17.05 "Противостояние"**
**17.30 "Аплодисменты". Р. Гимранов**
**18.25 "Пером и оружием"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**20.20 "Сэнгелдэк"**
**20.40 "Замандаш"**
**21.10 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На сон грядущий"**
**22.40 "Етеген". Хит-парад**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 30 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Укрощение строптивой"
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости
10.20 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.00 Новости
12.20 "Фазенда"
12.50 "Севастопольские рассказы"
13.40 "Улица полна неожиданностей". Комедия
15.10 "КВН". Премьер-лига
17.00 "Дочка". Мелодрама
18.40 "ДОстояние РЕспублики"
21.00 Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Южное Бутово"
23.50 "Остаться в живых: последняя тайна". Сериал
02.00 "Анастасия". Драма
04.00 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.55 "Чужие здесь не ходят". Детектив
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.35 "Утренняя почта"
09.10 "Катерок"
09.20 "Карантин". Комедия
11.00, 14.00 "Вести"
11.20, 14.15 "Местное время. Вести-Башкортостан. События недели"
12.00 "Городок"
12.30 "Алина". К Международному Дню защиты детей. Фестиваль детской художественной гимнастики
14.25 "Музыка в стране глухих"
15.15 "Реальный папа". Комедия
17.00 "Взрослые и дети" в гостях у программы "Спокойной ночи, малыши!" К Международному Дню защиты детей
18.55 "Специальный корреспондент"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Ванечка". Драма
23.05 "Евровидение-2010". Финал национального отборочного конкурса исполнителей детской песни. Прямая трансляция
01.15 "Зодиак". Драма
03.25 "Комната смеха"
04.25 "Городок"

### НТВ

05.35 Мультфильм
05.45 "Крик совы". Приключения
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 QUATTRORUOTE
10.50 "Спасатели"
11.25 "Первая кровь"
12.00 "Дачный ответ"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Алтарь победы"
15.05 "Своя игра"
16.25 "МАсквичи". Телевизионная комедия
17.15 "И снова здравствуйте!"
18.15 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа" с Кириллом Поздняковым"
19.55 "Чистосердечное признание"
20.25 "Шериф". Сериал
00.00 "Авиаторы"
00.35 "Сладкий ноябрь". Драма
03.00 "Саван мумии"
04.50 "Мужчины в большом городе". Сериал

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 "Для вас, ветераны!"**
**08.45 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**10.05 "Ребятам о зверятах"**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семер"**
**12.05 "Байтус"**
**12.25 "Артылыш"**
**13.00 "Проверка на зрелость". 20 лет Национальному молодежному театру им. М. Карима**
**14.00 "Дарю песню"**
**15.00 "Книжный дом"**
**15.25 "Салям". Воскресный выпуск**
**15.40 "Дорога к храму"**
**16.00 "Мир глазами звезд"**
**16.35 "Зеркало души". Творческий вечер Альфии Юлчуриной**
**18.20 "Дарю песню"**
**19.25 "Новое кино"**
**19.50 "В центре внимания"**
**20.10 "Байык"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.45 Погода**
**22.50 "Вечер.сом"**
**23.30 Художественный фильм. По окончании: погода**

ЙӘШЕЛ ДАУА

**Беҙҙең халыҡ Рәсәй телевидениеһынан йығылып ятып Малаховтың тапшырыуҙарын ҡарай, шулай уҡ Рәсәйҙә сығарылған ЗОЖ тигән гәзитте уҡый, имеш. Ауылдарҙа шуны ишетеп, хайран ҡалынды бер мәл. Шул уҡ ваҡытта бына ҡырҡ йылдан ашыу ғүмерен үҙебеҙҙең тыуған төйөктең йәшеллек донъяһын өйрәнеүгә арнаған танылған үлән белгесе һәм яҙыусы Рим Әхмәдовтың китаптары менән таныш булғандар бик һирәк. Рим Билал улы иртә яҙҙан шул үләндәрҙе үҙ ҡулдары менән йыя, өйрәнә, ауырыуҙарҙа һынай, шунан һығымталар яһай. Һығымталары, асыштары иҫ киткес! Май айында айырыуса һутлы, айырыуса шифалы беҙҙең тыуған төйәгебеҙҙә үҫкән үләндәр, ти Рим ағай һәм уларҙы уның китаптарында яҙылған тәкдим-кәңәштәр буйынса йыйырға саҡыра. Бына әле, мәсәлән, беҙҙең халыҡҡа яҡшы таныш балтырған тигән үләнде йыйыр мәл. Уны элек-электән аш итеп бешереп ашаған ата-бабаларыбыҙ. Бына нимә ти Рим Билал улы был үлән хаҡында:**

# АЯҠ АҪТЫНДА ҒЫНА...

## дарыу үҫә



### Балтырған

Тәбиғәткә яҡын булған һәр кем балтырғандың йәш үҫентеләренән әҙерләнгән аштарҙың һәм салаттарҙың ҡырҡыу тәмен беләләр. Ә дауалаусылар уның япраҡтарын, орлоҡтарын һәм тамырын бер нисә төр ауырыуҙы дауалау өсөн йыя. Әбүғалисина балтырған тураһында: "Ул быуманан, ауыр тын алғанда һәм астманан ныҡ файҙалы. Уның тамыры бауыр ауырыуҙарынан һәм һары ауырыуынан ярҙам итә", - тигән. Һынлап та, балтырған нервы ауырыуҙары һәм неврозҙан, тартышыуҙан, эпилепсиянан яҡшы ярҙам итә. Ҡапыл эс китһә, япраҡ төнәтмәһен эсергә кәңәш итәләр, ә һурпаһын ашҡаҙан-эсәк сәнсеп ауыртҡанда, гастритта, йыуан эсәк ауыртҡанда, бауырҙа һәм үт ҡыуыығында тоткарланыу күренештәре булған осраҡта эсәләр.

**Эпилепсия.** 1 ҡалаҡ иҙелгән тамырҙы 250 мл һыуға һалырға, ҡайнатырға һәм йәйләп бешекләргә. Һарҡытырға. Көнөнә 4-5 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр ҡалаҡлап ҡабул итергә.

**Фурункулез.** 1 балғалаҡ орлоҡ емешен 200 мл һыуға һалырға, һүрән утта 7-8 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә. Фурункулез ваҡытында ашар алдынан көнөнә 4 тапҡыр 50 мл ҡабул итергә.

**Һары ауырыуы, бауыр һәм бөйөр ауырыуҙары, быуылыу.** Балтырған орлоҡтарын порошок итеп ыуаларға, тигеҙ нисбәттә бал менән бутарға. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашар алдынан һыу менән ҡабул итергә.

**Төрлө тартышыуҙар, эпилепсия, тире ауырыуҙары, ашҡаҙан эшмәкәрлеге боҙолғанда, нервы ауырыуҙары ваҡытында.** 3 балғалаҡ ҡоро үләнде 2 стакан ҡайнаған һыуыҡ һыуға ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр стакандың дүрттән бер өлөшөн ашар алдынан һыуыҡ килеш ҡабул итергә.

Балтырған менән дауаланған ваҡытта артериаль ҡан баҫымын тикшереп тороу талап ителә. Балтырған енси әүҙемлекте һүлпәнәйтә. Оҙайлы ваҡыт ҡулланыу түлһеҙлеккә килтерә. Балтырғанды артыҡ кислоталылыҡ менән гастрит булған ваҡытта ҡулланырға ярамай.

**Шулай итеп, балтырған ашын әҙерләү ысулын да өйрәтәйек:** үләндәрҙең бәпкә өлөшөн ваҡлап турарға, уға йомортҡа һәм он һалып, ыумас һымаҡ итеп ыуырға. Картуф, кишер туралған, төрлө тәмләткестәр һалынған ҡайнап торған һурпала биш минут самаһы ҡайнатып алырға. Был аш туҡлыҡлы ғына түгел, дауалау сараһы ла. Эсәктәрҙе йомшарта, тирләтеп, тиреләге шлактарҙы сығара.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# НОМЕРҺЫҘ ЙӨРӨҮ...

## ҡиммәтләнә төштө

**Теркәлмәгән һәм техник тикшереү үтмәгән автомобилдәр менән йөрөү ҡиммәтләнә төштө. Хәҙер тәүге тапҡыр был ҡағыҙҙарҙе боҙған өсөн штраф 300 һумдан 800 һумға тиклем, икенсе тапҡыр 500 һумдан 800 һумға тиклем тәшкил итә. Ә бер нисә көн элек кенә 100 йәки 200 һум түләп ҡотолорға мөмкин ине. РФ-ның административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексының "Билдәләнгән тәртиптә теркәлмәгән транспорт саралары, дәүләт техник тикшереүе үтмәгән транспорт саралары менән идара итеү" тураһындағы 12.1 статьяһындағы төҙәтмәләр 18 апрелдән үҙ көсөнә инде.**

Бындай ҡарарҙы закон сығарыусылар объектив сәбәптәр менән аңлата. Былтырғы йыл һеҙәмтәләренә ҡарағанда, Рәсәйҙә иҫәпкә ҡуйылмаған автомобилдәр һаны 2008 йыл менән сағыштырғанда 35 процентҡа күбәйгән. Был статистикаға шулай уҡ срогы үткән "Транзит" знагы номерлы автомобилдәр ҙә, әгәр ҙә машина алған ваҡытта транзит знагы бирелмәгән икән, ә уны алыуға биш тәүлектән артыҡ ваҡыт үткән осраҡта дәүләт номеры булмаған автомобилдәр ҙә инә. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, теркәү үтмәгән автомобиль водителдәрен автоматик режимда эшләгән фото һәм видеофиксация саралары ярҙамында яуаплылыҡҡа тарттырыу мөмкин түгел. Бынан тыш, номеры булмаған машиналар юл-транспорт ваҡиғаһы башҡарылған урындан ҡасҡан йәки бындай автомобиль ярҙамында енәйәт башҡарылған ваҡытта уның хужаһын билдәләү ауырға тура килә.

Техник тикшереү үтмәгән автомобилдәр менән идара иткән өсөн яуаплылыҡҡа тарттырылған водителдәр һаны ла 11,3 процентҡа күбәйҙе. Бындай яуапһыҙлыҡты штраф күләмен арттырыу аша ғына кәметеп булыуын тәжрибә иҫбат итте. Хәүефһеҙлек ҡайыштарын йәки көйләнмәгән йәйәүлеләр үткәүелен хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ: штраф күләме 100 һум булғанда водителдәр уны һанға ла һуҡманы. Тимәк, автомобиль хужаһын штрафтарҙың бәләкәй күләме ҡурҡытмай. Унан һуң, эш башҡарыу производствоһына барып еткән осраҡта приставтар ҙур теләк менән 100 һум түгел, ә 800 һум штраф һаласаҡ. Әйткәндәй, ике осраҡта ла 800 һум - штрафтарҙың иң юғары күләме. Штрафтың ҡәтғи күләмен хоҡуҡ боҙоусыны асыҡлаған ваҡытта милиция хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре билдәләй һәм 12.1 статья буйынса урында протокол төҙөлә. Шул уҡ ваҡытта инспекторҙар аҡсалата штраф һалған саҡта уның һуңғы күләмenә йоғонто яһаусы бөтә хәл-ваҡиғаларҙы иҫәпкә алырға тейеш. Әгәр автомобиль хужаһы ашығыс командировкаға китеү сәбәпле, машинаһын иҫәпкә ҡуйырға өлгөрмәгән икән - был бер хәл. Был саҡта ул, әйтәйек, транспорт һалымын түләмәү өсөн махсус рәүештә теркәлмәй йөрөгәнгә ҡарағанда минималь штрафҡа иҫәп тота ала. Шулай уҡ водитель йылдан ашыу техник тикшереүһеҙ йөрөй икән, срогы аҙнанан ашыу үткәндекенә ҡарағанда күберәк түләйәсәк.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Һатып алғандан һуң биш тәүлек эсендә машинаны иҫәпкә ҡуйырға кәрәклеген хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ. Транзит номерҙары менән 20 көн йөрөргә мөмкин. Яңы автомобиль һатып алыусы, йәғни сығарыу ваҡыты иҫәпкә ҡуйыу ваҡыты менән тап килгән осраҡта, өс йылға талон ала. Бынан һуң уға ике тапҡыр ике йылға талон бирелә, ә инде ете йылдан ашыу йөрөлгән машина хужалары йыл һайын техник тикшереү үтергә бурыслы.**

Әлфиә ШӘРӘФЕТДИНОВА.
БАШвестЪ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 майҙа** "Һуңғы ҡыңғырау, һау бул, мәктәбем!" театраль концерт.

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 майҙа** композитор, аккордеонсы һәм ионикасы, халыҡ көйҙәрен эшкәртеүсе һәм пропагандалаусы РСФСР-ҙың атҡаҙанған, БАССР-ҙың халыҡ артисы Бәхти Ғайсиндың тыуыуына 80 йыл тулыу уңайынан **"Бәхти моңо йырлай йөрәктәрҙә, Бәхти моңо йәшәй күңелдә!.."** тип аталған хәтер кисәһе уҙа. Тамашала бейеүселәр, йырсылар, музыканттар һәм композиторҙың ҡатыны Фәриҙә Ҡудашева ҡатнашасаҡ.

* * *

**27-29 майҙа Сибай ҡалаһында X Төбәк-ара "Ирәндек моңдары" башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар конкурсы үтә.**

Халыҡсан итеп башҡарыу сәнғәтен һаҡлау һәм үҫтереүҙе, башҡорт фольклорының боронғо ынйыларын тергеҙеү, һәләтле һәм өмөтлө башҡарыусыларҙы асыҡлау, республиканан ситтә йәшәүсе милләттәштәр менән рухи бәйләнештәрҙе нығытыуҙы маҡсат итеп ҡуйған конкурстың географияһы йылдан-йыл киңәйә, абруйы арта. Һуңғы йылдарҙа был күркәм бәйгелә Ҡурған, Төмән, Ырымбур, Пермь өлкәләренән, Ташкент, Санкт-Петербург, Мәскәү ҡалаларынан ҡатнашыусылар булды. Быйыл иһә Ҡурған, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән, Ауырғазы, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Ейәнсура, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Тәтешле, Учалы, Хәйбулла, Әбйәлил райондарынан, Салауат, Сибай, Өфө ҡалаларынан 65 кеше конкурста ҡатнашырға теләк белдергән.

ҠОТЛАЙБЫҘ!

**Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Миниәхмәт улы ИШЕМҒОЛОВты 50 йәшлек юбилейы айҡанлы ихлас ҡотлайбыҙ!**



Һеҙҙең Башҡортостан Республикаһының умартасылыҡ өлкәһендәге эшмәкәрлегегеҙ оло ихтирамға лайыҡ. Һеҙҙең белемегеҙ һәм тәжрибәгеҙ, ижади ҡарашығыҙ, инициативағыҙ һәм проекттарығыҙ һөҙөмтәһендә республикабыҙҙың умартасылыҡ тармағы Рәсәйҙә алдынғы урындарҙы алып тора, Һеҙ етәкләгән фәнни учреждение ла, Башҡорт дәүләт аграр университетында биология, умартасылыҡ һәм һунарсылыҡ кафедраһы ла йыл һайын уңыштарға өлгәшә.

Һеҙгә артабан да фән һәм уҡытыу өлкәһендә уңыштар, ныҡлы һаулыҡ һәм бәхеттәр теләйбеҙ.

**Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге коллективы.**

* * *

Учалы районының Ишкен ауылында йәшәүсе һөйөклө әзәйем **Нәйрә ХӘМИҘУЛЛИНА**ны 75 йәшлек күркәм юбилейы менән ихлас ҡотлайым.

Ҡәҙерле әзәйем! Артабан да балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең хөрмәтен, ихтирамын тойоп, барыбыҙға ла терәк-таяныс, кәңәшсе булып, тағы ла оҙаҡ йылдар ауырымай-һыҙланмай йәшәргә насип булһын. Беҙгә күрһәткән яҡшылыҡтарың, хәстәрлегең өсөн Хоҙай үҙеңде ҡөҙрәтенән ташламаһын.

**Иң изге теләктәр менән, балаларың исеменән ейәнсәрең Гүзәл.**

**Утерян военный билет на имя Мирхашимова Ильшата Минеахатовича. Нашедшего прошу вернуть за вознограждение. 8-917-799-78-19.**

АФАРИН!

# ХАЛЫҠ ҠОРАМАҺЫ...



## матур ғаиләләрҙән, матур эштәрҙән ҡорола

**Халыҡты нимә биҙәй? Әлбиттә, уның өлгөлө ғаиләләре, кеше ҡулдары башҡарған хеҙмәт емеше. Бөрйәндәр быны асыҡ тойомлап, йыл һайын Ғаилә көнөнә ҡарата күркәм сара ойоштора. Быйыл да 50, 60 йыл бергә йәшәгән ғаилә иштәрен, күп бала үҫтереүсе йәш ғаиләләрҙе ҡотлау тантанаһы менән бергә, "Ҡорама-туй" һәм "Биҙәктәрҙә йәйғор нуры" тигән мендәр сигеү район конкурстарына йомғаҡ яһауға арналған матур байрам үтте.**

Ҡул эштәре конкурсында йөҙгә яҡын ҡатнашыусының ижад емеше өлгөләрен, уларҙың мең төрлө балҡышын күреп, Бөрйән ерендә, ысынлап та, алтын ҡуллы оҫтабикәләр, халыҡ рухын һаҡлаған һөнәрмәндәр йәшәүенә тағы ла инанылды. Ҡул белгән шөғөлдө еткерер инәй-апайҙар, уны өйрәнергә теләк белдергән ҡыҙ-ҡырҡын етерлек икән төбәктә һәм улар халҡыбыҙҙың көнкүреш йолаларын лайыҡлы дауам итеүселәр. Әле был конкурста ла 9 йәшлек баланан алып 80 йәшлек Мәрфуға инәй Аҫылбаеваның ҡатнашыуы ошондай яҡты өмөттәр уятты.

Был сараның мөһимлеген билдәләп, шуны әйтке килә: ғаилә усағынын йылылығы ҡатын-ҡыҙға ҡайтып ҡала. Ул яҡты йөҙө, ҡайнар ашы һәм дә үҙе башҡарған ҡул эштәре менән өйөн нурлы, ҡотло итә. Юҡҡамы ни, борон бирнәлеккә ҡорама юрғандар теккәндәр, аҫалы балаҫ һуҡҡандар, мендәр сиккәндәр, йәш ҡыҙҙар һөйгәндәренә сигеүле ҡулъяулыҡтар бүләк иткән, еңгәйҙәр ҡәйнештәренә янсыҡ әҙерләгән, бирсәткәләр бәйләгән. Бындай әйберҙәр бик ҡәҙерле һаналған, иҫтәлеккә һаҡланған. Ҡатын-ҡыҙ оҫталығының баһаһы бына ошолай билдәләнгән.

Ғөмүмән, ғаилә именлеге, ишлелеге лә нигеҙҙә ҡатын-ҡыҙҙан торалыр ул. Аҡыллы ҡатын-ҡыҙ әсәй-өләсәйҙәренең, ҡәйнәләренең юлын дауам итеп, уларҙың тормошонан өлгө алып, бәхеткә өлгәшә. Быны беҙ ирҙәре менән 60 йыл бергә ғүмер кисергән Йәмилә инәй Баһауетдин ҡыҙының, 50 йыл йәшәгән Роза инәй Миңлерәхим ҡыҙының, Сәриә инәй Абдрахман ҡыҙының, шулай уҡ биш бала әсәһе Зөлфиә Исламованың, өс бала әсәләре Резеда Әбделмәнова менән Резеда Сәғитованың өлгөләрендә күрҙек. Иҫке Собханғол мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Резеда Ғәйзулла ҡыҙы бына нимә тине: "Һәр кем бәхет тауын үҙе төҙөй. Мин үҙем, мәҫәлән, ҡайны-ҡәйнәм, атай-әсәйемдең көткән тормошонан өлгө алып йәшәйем. Беҙ улар һалған һумаҡты, улар күрһәткән юлды дауам итергә тейешбеҙ. Яңы ғаилә ҡорған йәштәргә кәңәшем шул: ғаилә нигеҙенең ныҡлығы - туғандарының олоһона ла, кесеһенә лә булған йылы мөнәсәбәтенән, ихтирамынан тора". Ә район мәҙәниәт йортонда эшләп йөрөүсе биш бала әсәһе Зөлфиә Исламова әсәһе менән ҡәйнәһенән күрмәксе, ишле ғаилә булдырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған. Тап шуға ла ул: "Күп балалы булыуҙан ҡурҡырға ярамай, һәр бала үҙ ризығы менән тыуа", - ти.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөрйән оҫтабикәләренең күҙҙең яуын алырҙай ижад емештәренә, көткән тормоштары, башҡарған хеҙмәттәре менән күптәргә өлгө булырҙай ғаилә парҙарына ҡарап һоҡланған саҡта, уларҙан фәһем дә алаһың, фәлсәфә лә табаһың. Матур эштәр башҡарыу, күркәм ғаилә ҡороу өсөн эске донъяңдың ошо ерҙең тәбиғәте ише матур, саф, эскерһеҙ, яҡты булыуы фарыздыр шул. Биҙәктәр ана шулай нағышлана.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...




**Фәнүзә ИШБАЕВА, Мәһәҙей ауылы:** Үҙем ҡорама юрғандар өҫтөндә уйнап үҫкән бала булараҡ, милли традицияларға тоғро ҡалырға тырыштым. Беҙ балалар менән "был төҫ минеке", "быныһы әсәйемдең күлдәге", "быныһы һеңлемдеке", тип, рәхәтләнеп, шул төҫтәрҙе, биҙәктәрҙе һайлаша инек, бер төҫлөләрен, йә сәскә төшкәндәрен һанай торғайныҡ. Үҙенә күрә бер мауыҡтырғыс уйын ине ул. Әле өлкәнәйә килә был шөғөл күңелемә нығыраҡ инеп ятҡан һайын, бер нәмәгә иғтибар итәм: ҡорама - ул тарих, хәтер. Бынау буй юрғанды хасил иткән ҡорама киҫәктәренә күҙ һалайыҡ. Мәҫәлән, унда Ейәнсуралағы ҡоҙағыйым бүләк иткән күлдәклектән, өсөнсө ҡыҙымдың туйында килендәргә тип теккән алъяпҡыстарҙан, ейәнсәремә теккән күлдәктән, өсөнсө баламдың бәпәйенә тегелгән йүргәктән тороп ҡалған туҡыма киҫәктәре урын алған. Бына бит үҙенә күрә ғаиләбеҙҙең хәтер китабы килеп сыҡҡан.

Ҡораһаң, нимә булһа ла килтереп сығарырға була икән. Тағы ла борон ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ түшен ҡаплап йөрөгән түшелдерек, алъяпҡыстар, юл тоҡсайы теккәнмен. Янсыҡ иһә элек еңгәйҙәрҙең ҡәйнештәренә биргән иң ҙур бүләге булған. Бәпәй тыуғанда иң кәрәкле әйбер - ул йүргәк. Бәпәй йүргәгеген боронғолар ҡара көстәрҙең, шайтандарҙың күҙҙәрен ҡамаштырыр, юлдарын яңылыштырыр, төҫтәрҙе аҙаштырыр өсөн ҡораманан тегер булған. Мин бындай йүргәкте әле тыуасаҡ ейәнемә тектем.

Ҡорама әйберҙәр тегеүҙең һәр яҡлап та файҙаһы күп. Ул, беренсенән, иҫке ҡалдыҡ әйберҙәрҙе исраф итеүҙән һаҡлай, икенсенән, ғаилә бюджетына ла ыңғай йоғонто яһай. Унан һуң, ҡул йылыһы һалып, күҙ нуры түгеп эшләнгән әйберҙәр һәр ваҡыт ҡәҙерле була, өйгә ҡот, нур өҫтәй.

Минең өләсәйем ҡул эшенә бик оҫта булды. Күндән итектәр, ҡолаҡсын бүректәр, күкрәксендәр тегә торғайны. Ул һәр нәмәне тегә лә, тышына бер биҙәк һалып ҡуйыр ине. Иҙәндә ятҡан 10 сантиметрҙай епте лә ташлап ҡуймай, ала һалып, энәгә һабаҡлап, берәй әйбергә ҡар бөртөгө итеп тегә һалып ҡуйыр ине. Беҙҙе лә әйберҙе ҡәҙерләргә, һаҡсыллыҡҡа өйрәтте. Әсәйем дә тегенергә яратты.

**Йәмилә БИКБУЛАТОВА, Иҫке Собханғол ауылы:** Мин үҙем 9 бала үҫкән ғаиләлә иң өлкәне булдым. Һуғыш йылдарының бар михнәтен үҙ иңебеҙҙә татыһаҡ та, ошо йәшкә етеп, бабайым менән 60 йыл бергә йәшәү шатлығын кисереп ултырыу оло бәхет ул. Бер михнәттең бер рәхәте лә була, ти бит. Минең күп тиңдәштәрем ошондай матур тормоштоң рәхәтлеген күрә алмай, мәрхүм булып китте. Тормош иптәшем менән шул тиклем матур, татыу йәшәнек. Биш бала үҫтереп, бөтәһенә лә юғары белем биреп, ғаиләле иттек. Ышаныслы ир булды ул. Бергә үткәргән алтмыш йыл алты йылдай ҙа булманы. Шуға ла Аллаһҡа рәхмәттәремде әйтеп, барына шөкөр ҡылып йәшәйем. Тормошҡа еңел-елпе генә ҡарап йәшәп булмайҙыр ул, ауырлыҡты ла күтәрә белергә, яҡшылыҡты күрә, үҙеңдән ололарҙы ла, кеселәрҙе лә ҡәҙер итә белергә кәрәк.

**Ырыҫбикә ЙӘНСУРИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҢЕЛ БУШЛЫҒЫН...

## кейем менән ҡаплап булмай

Ҡарттарҙың өйрәтеүҙәре ҡышҡы ҡояш һымаҡ: яҡтырта, әммә йылытмай.

**(Л. Вовенарг).**

Йәш кешеләр зауығын һаҡлаған ҡарттар көлкө тыуҙырып ҡына ҡалмай, улар хөрмәткә лә лайыҡ түгел.

**(Наполеон I).**

Бер күргән - белеш, ике күргән - таныш, күп күргән дуҫ була.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

"Мин үҙемде бер ваҡытта ла былай йәш тойғаным булманы!" тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡабатлайһың икән, тимәк, һиңә ысынлап та ҡартлыҡ килгән.

**(Ж. Ренар).**

Күңел бушлығын... кейем менән ҡаплап булмай.

**(Рәшит Шәкүр).**

Тигеҙлекте тормошта эҙләмә, уны бары зыяратта ғына табып була.

**(Г. Левис).**

Булып ятҡан ваҡиғалар бер-береһенән бер нисек тә айырылмай, үткәндә лә, киләсәктә лә шул бер үк ваҡиғалар, унда ҡатнашыусы йөҙҙәр генә үҙгәреп тора.

**(М. Аврелий).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Бер кеше бик матур, ҙур йорт һатып алған. Йорт алдындағы емеш-еләк баҡсаһына, ундағы зауыҡ менән ултыртылған һәр түтәл, һәр ағасҡа һоҡланып бөтә алмаған яңы хужа. Әммә... Уның күршеһендә ергә һеңешеп бөткән иҫке йортта бер көнсөл кеше йәшәгән. Ул әйләнгән һайын яңы йорт хужаһының кәйефен боҙорға, уға ниндәйҙер әшәкелек эшләргә яйын табып ҡына торған: йә сүп-сарын уның ҡапҡаһы алдына, ихата эсенә ырғыта, йә башҡа төрлө этлек уйлап таба, ти. Бер саҡ яңы йорт хужаһы матур кәйеф менән уянып, күтәрмәгә сыҡҡан, ҡояшҡа сәләм биргән һәм... күршеһе ултыртып киткән сүп биҙрәһенә абынып йығыла яҙған. Ләкин аптырап ҡалмаған, асыуын тыя һалып, баяғы сүпте бушатып,биҙрәһен йылтыратҡансы йыуған да, уға иң өлгөргән, иң тәмле алмаларын тултырып, күршеһенең өйөнә йүнәлгән. Ишеген шаҡыған. Көнсөл күрше: "Әһә, талаш ҡуптарырға килде был... - тип уйлай һалған һәм яңы күршеһенә ҡаршы торорға ғәйрәтләнеп, ишеген асып ебәрһә... күршеһе уға алма тулы биҙрәһен һонған һәм былай тигән: "Нимәгә байбыҙ, шуның менән бүлешәбеҙ инде..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6167
Заказ 1978